***Аҡ һаҡаллы мулланан: "Һаҡалың олораҡмы, әллә үҙеңме?" - тип һорағандар. "Әлбиттә, үҙем, - тип яуап бирғән мулла. - Мин тыуғанда әле бер төк һаҡалым да юҡ ине". "Әгәр ҙә һин һаҡалыңдан олораҡ икән, ниңә ул ағарған, ә һинең күңелең ҡарайған һуң?" - тип һорағандар тағы. Әммә был һорауға мулла яуап бирә алмаған.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12 - 18 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№28 (602)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Аҡылға ултырыу...**



дәрестә аҡыллы ултырыуҙан башлана

3

**Илһөйәрлек...**

һүҙҙә түгел, күҙҙә сағыла

5-6

**Эшҡыуарлыҡҡа байығыу өсөн киләләрме?**



8-9 Юҡ, ғаиләне аҫырау өсөн

**Фитыр сәҙаҡаһы менән...**

ураҙаларыбыҙҙы камиллаштырайыҡ!



13

14 ТВ-программа


ШАҒИР ҺҮҘЕ

Рәми ҒАРИПОВ

# САЛАУАТ БАТЫР

*Сосланбәк Тавасиевҡа - яҡташтарым, ер-һыуым, заманым исеменән*

*Сабып сығып сал быуаттар аша,
Сапсындырып суйын саптарын.
Оран һалып илгә, һай, Салауат
Мәңгелеккә әйҙәй сафтарын.*

*Арыҫлан ир, яугир, шағир ҡото
Айбарланған батыр һынында.
Дошмандарын айҡар йәшен ише
Ай-ҡылысы ятыр ҡынында.*

*Үрткә тотҡан ауылдарҙың ҡуҙы
Дөрләп яныр бөркөт күҙендә.
Йолҡоп алған тотҡондарҙың теле
Ажар сәсер сәсән һүҙендә!..*

*Ҡоштар осоп етмәҫ утрауҙарға -
Ҡайҙа ғына батша һөрмәһен,
Утлы тамға өтөр киң маңлайын,
Тик бөгөлмәҫ быҒау-төрмәһе...*

*Илкәйенең хәр көндәрен даулап,
Ирек, Ырыҫ, Хаҡлыҡ хаҡына,*

*Сал быуаттар аша сапты, сапты,
Сапты һаман ғәзиз халҡына.*

*Йөҙәп сыкты етмеш даръяларҙы,
Ярып сыкты етмеш тауҙарҙы,
Ҡуй һарыҡтай турай-турай сапты
Ҡаршы сыҡҡан етмеш яуҙарҙы.*

*Ят тупраҡта ятып ҡалғанда ла
Аҫыл һөйәк, изге исеме,
Үҙенән дә ғәййәр яугирҙарҙың
Тел осонда булды исеме.*

*Ҡаһым түрә утлы Париждарға
Алғасҡыла бәреп кергәндә,
Салауаттың һынын олатайҙар
Еңеү тауы итеп күргәндәр.*

*Питер эшселәре башҡортома
Әләм тотторғас та ҡыҙылдан,
Ҡылысындай сыңлап Салауаттың,
Пулковтарҙа ҡалды беҙҙең дан.*

*Ул Шаһиттай шыуҙы, ҡаны һарҡып,
Кронштадттың боҙо өҫтөнән,
Башлап таҡты "Ҡыҙыл Байраҡ"ты ла
Күкрәгенә ғорур төҫ менән.*

*Ҡайҙа ғына ул ҡурайын һыҙмаҫ,
Ат һуғармаҫ ҡайһы йылғанан, -
Ватан ҡушҡас, утлы өйөрмәнән
Ул Эльбаға илтте Волганан!..*

*Батыр данын йылдар юя алмай,
Ел-дауылға ул бит ҡарамай:
Әле булһа һаҡлай фармандарын
Ҡыуышында солоҡ-ҡарағай.*

*Аҡмағандай кире Ағиҙелкәй,
Сүкмәгәндәй ергә Уралтау,
Салауаттың йыры тынмаҫ илдә,
Еңә алмай рухын ҡорал-дау.*

*Хас дошмандар әле сиктәр аша
Хәр халҡыма күпме таш сөймәҫ.
Батшаларға башын эймәгәнде
Башҡаларға башҡорт баш эймәҫ, -*

*Пугачевы менән Салауатым,
Сапсындырып суйын саптарын,
Сәсән теле менән сәмләндереп,
Мәңгелеккә әйҙәй сафтарын!..*

АФАРИН!

# САЛАУАТТЫҢ РУХЫ, ШИҒРИ ҺҮҘЕ...

## сал быуаттар аша елеп ҡайтты

**Салауат районында үткән "Салауат йыйыны" Республика фольклор байрамының матур бер тамаша булыуҙан да бигерәк, рухыбыҙҙы терелткән, асылыбыҙға ҡайтырға ярҙам иткән сара икәнлегенә тағы бер инанырға насип булды быйыл. Милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулыуға һәм Мәҙәниәт йылына бағышланған йыйын үҙенең майҙанына 15 меңгә яҡын тамашасыны йыйҙы һәм ошоноң менән генә лә үҙенең мәртәбәһен һәм мөһимлеген тағы бер ҡат расланы.**

(Дауамы 11-се биттә).



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# КАРВИНГ - ҒӘЖӘП СӘНҒӘТ



**Матурлыкты яратыусылар һәм үҙҙәре тирәләй уны булдырыусылар бик күп. Кемдер матур итеп бәйләм бәйләй, икенселәр күҙҙең яуын алырлыҡ гөлдәр үҫтерә, өсөнсөләр һүрәт төшөрә. Минең дә донъяға гүзәллек өҫтәгән һәм аҡса эшләргә мөмкинлек биргән шөғөлөм бар.**

Ул - карвинг. Карвинг - емеш һәм йәшелсәләрҙе семәрләп ҡырҡып, төрлө йәнлек, сәскә, ағас, хатта кеше һындарын кәүҙәләндереү мөмкинлеге биргән ғәжәйеп сәнғәт. Шулай уҡ был маҡсатта сыр, шоколад һәм башҡа ҡырҡырға мөмкин булған азыҡ-түлекте лә ҡулланырға мөмкин. Мин иһә нәҡ йәшелсә һәм емештәр менән эш итәм. Бынан меңәр йыл элек Көнсығышта барлыҡҡа килгән был маһирлыҡ беҙҙә лә көндән-көн нығыраҡ тамыр йәйә бара. Хәҙерге көндә карвингҡа өйрәтеүсе курстар һаны арта, китаптар баҫыла, махсус ҡоралдар һатып алыу ҙа ауырлыҡ тыуҙырмай.

Шәхсән үҙем карвинг менән ҡунаҡта "таныштым" һәм уны ныҡлап өйрәнеү теләге тыуҙы. Беренсе тапҡыр махсус рәүештә ҡабаҡ һатып алып, өкө һыны эшләп ҡараным. Үҙемсә бик шәп килеп сыҡты ул. Өҡөмдө өҫтәлдең түренә ултыртып ҡуйҙым да, эштән иптәшемде һәм улымды көтә башланым. Уларҙан тик маҡтау һүҙҙәрен ишетәсәгемә, һоҡланыуҙарына шул тиклем ныҡ ышандым. Киске ашҡа ултырғас, иптәшем көлөмһөрәп: "Был ҡолаҡлы ҡабаҡты нимәгә ҡуштың ашарға?" - тигәс, хатта үпкәләп ҡуйҙым. Ләкин уларҙың шаяртыуы мине тик сәмләндерҙе һәм мин улар өйҙә булмағанда оҫталығымды шымарта башланым. Интернетта карвингҡа өйрәтеүсе фильмдар ҡараным, ҡоралдар һатып алдым. Ниһайәт, телһгемә өлгәштем: Яңы йыл байрамы өҫтәлен ҡыярҙан - лилия сәскәләре, кишерҙән - тубырсыҡтар, редистан - рауза гөлләмәһе, грушанан - терпе һыны, алманан күбәләктәр эшләп биҙәнем. Ғаиләм һәм ҡунаҡтар был матурлыкты күреп таң ҡалды. Ысынлап та, өҫтәлдәге ҡәҙимге аш-һыу карвинг ярҙамында бөтөнләй башҡа төҫ алды - ул йәнләнде.

Ошо байрамдан һуң миңә таныштарым һәм дуҫтарым тантаналары өсөн төрлө әйбер эшләп биреүемде һорап мөрәжәғәт итә башланы, әлбиттә, аҡса түләү шарты менән. Мин шатланып риза булдым, сөнки күберәк шөғөлләнгән һайын оҫталыҡ арта, ҡул шымара, эшләгән әйберҙәр ҙә ҡатмарлана бара. Шулай уҡ финанс яғынан да ҡулайлы, сөнки сәләмәтлегем насар булыу сәбәпле, эшләү мөмкинлегем юҡ. Көндән-көн минең хеҙмәтем менән даими ҡулланыусылар һаны арта бара. Ярашлы рәүештә, килемем дә яҡшы ғына.

Гәзиткә хат яҙыуымдың сәбәбе шул: бәлки, минең кеүек өйҙә ултырыусылар ошо шөғөлдө ныҡлап өйрәнеп, аҡса эшләй башлар. Ныҡышмалылыҡ һәм бай фантазия булғанда был ҡатмарлы, әммә мауыҡтырғыс һәм матур шөғөлдө үҙләштерергә була.

**Нажиә ЙӘҺҮҘИНА.**
**Өфө ҡалаһы.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыйылдырған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МИЛЛӘТ ҺАҠЛАНҺЫН ӨСӨН...

## бер-беребеҙҙе маҡтарға өйрәнәйек

**Рәйсә КУЗБӘКОВА, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты сектор мөдире:** Бик тәрән мәғәнәле башҡорт халыҡ мәҡәле бар: "Булыр илдең балаһы бер-береһенә батыр, тир, булмаҫ илдең балаһы бер-береһенә бахыр, тир". Бөгөнгө көндә башҡорттар ошо мәҡәл эсенә йәшеренгән тәрән мәғәнәле, ата-бабалар васыятына тиң һүҙҙәргә ҡолаҡ һалһын ине. Беҙ бер-беребеҙҙе кеше алдында булһынмы, үҙебеҙҙең арала булһынмы, әрләргә, тәнҡитләргә яратабыҙ. Бына ошо сифаттарҙан ҡотоларға кәрәк ине ул. Бер-беребеҙҙе кеше алдында күтәрмәләргә, маҡтарға өйрәнәйек. Тәнҡит һүҙҙәре әйтер урында ла кеше алдында шымып ҡалырға, аҙаҡ ул кешенең үҙе менән генә иплап һөйләшергә күнегәйек. Башҡа милләттәр алдында бер-беребеҙҙең бәсен төшөрмәй йәшәргә, берләшергә ине беҙгә. Сөнки беҙгә тап ошо сифаттар етмәй, үҙ башҡортобоҙға ярҙам ҡулы һуҙа белмәйбеҙ. Ә бит бүтән милләттәр, мәҫәлән, шул уҡ йәһүд халҡы, бер-береһен бер ҡасан да кеше алдында яманламай, тәнҡитләмәй. Ҡайҙа булһа ла һәр ваҡыт, хатта үҙенең дошманын да ул йәһүд булғаны өсөн генә күтәрмәләй. Беҙгә лә шуға өйрәнергә кәрәк ине. Шул саҡта ғына беҙ халыҡ булараҡ йәшәй, телебеҙҙе, илебеҙҙе, үҙебеҙҙең йолаларыбыҙҙы һаҡлай алыр инек, тип уйлайым.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

**Гәзит беҙҙең өсөн алыҫтан көтөп алынған ҡәҙерле ҡунаҡ кеүек. Һәр шәмбе хат ташыусы килгәнен түҙемһеҙләнеп көтөп алабыҙ һәм эште ҡалдырып булһа ла, гәзиттәге һәр мәҡәләне уҡып сығабыҙ. "Киске Өфө" - бар республиканы баш ҡалабыҙ менән бәйләүсе булып тора, тиһәм дә хата булмаҫ.**

# БАШ ҠАЛА МЕНӘН БӘЙЛӘҮСЕ...

Уның биттәрендә баҫылған Өфө хәбәрҙәре, баш ҡалала уҙған саралар хаҡында зыялыларыбыҙ менән ҡоролған әңгәмәләр аша белеп ҡыуанабыҙ. "Булды", "үтте", "ҡатнашты" тип дөйөм һүҙҙәр менән түгел, ә тәрән анализлап яҙылған һәм мөһим әйберҙәргә иғтибарҙы йүнәлтә алған был мәҡәләләр уҡымлы булыуы менән айырыла.

Оптимистик рухта яҙылған, киләсәккә ышаныс уята алырлыҡ, бөтә мәсьәләләрҙе лә йырып сығып була икәнлеген аныҡ кешеләр өлгөһөндә һүрәтләгән мәҡәләләр күңелгә һәр ваҡыт хуш килә. Ҡайһы саҡта, бигерәк тә хәл ителмәҫтәй тойолған проблема килеп тыуһа, йыйып барған гәзит һандарын алып, ошо рухта яҙылған мәҡәләләрҙе ҡараштырып сығыуым була, барыһы ла үҙ урынына ултыра. Күпме милләттәштәрем үҙ ғаиләһендәге генә түгел, ә тотош халыҡтың йәшәйешенә ҡағылған мәсьәләләрҙе хәл итер әмәлдәр тапҡанда, ни эшләп мин бөгөлөп төшөргә тейешмен һуң әле, тип уйлайым. Балаларыма ла ошо фекерҙе һеңдерергә тырышам һәм һүҙҙәремде ныҡытыу өсөн гәзиттәге теге йәки был мәҡәләне уҡырға бирәм.

Тағы ла миңә "Киске Өфө" биттәрендәге исламға, дингә ҡағылышлы мәҡәләләр һәм "Мосолман әҙәбе" рубрикаһы оҡшай. Унда яҙылғандар бәләкәй генә, әммә йөкмәткеле һәм йөҙәткес түгел. Гәзит артабан да ошо йүнәлештә иҗад итһә ине, тип теләйем. Барлыҡ хеҙмәткәрҙәргә эштәрендә уңыштар теләйем.

**Рәмилә САФИНА.**
**Ҡырмыҫҡалы районы.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# СЕБЕР КИТӘ ЕГЕТТӘР...

Себерҙә эшләп йөрөгән бер ҡустым менән һөйләшәм.

-Етер инде Башҡортостан менән Себер араһын тапауың, ҡасан ғаиләң, балаларың янында әҙәмсә йәшәй башлайһың? - тим.

- Бына йортто яңыртып һалып бөтәм дә...- тине ул.

- Йорт һалғас, улдарымды йортло итәм, тиәсәкһең инде һин. Ҡасан үҙең өсөн йәшәп өлгөрмәксе булаһың? - тигән мыжыуыум яуапһыҙ ҡалды.

Был һөйләшеүҙе бергәләп сәй эсергә ултырғас, тағы дауам иттем.

- Бындай гастролер ир менән йәшәүе ҡыйындыр инде ул? - тигән булдым ҡатынына.

- Өйрәнгәнмен инде, - тине ҡатыны. - Киреһенсә, Себерҙән ҡайтып, өйҙә оҙағыраҡ тора башлаһа, "Ҡасан китәһең инде?" - тип түҙемһеҙләнә башлайым...

- Мин үҙем дә, ҡасан китәм инде, тип түҙмәй йөрөйөм ул, - тине ире лә.

- Нисек инде улай? - тип аптыраным тағы ла. - Бында ҡайтҡас, үҙенә ниндәйҙер матур бер шөғөл табырға кәрәк. Барыһы ла үҙенде нимәгәлер көйләүҙән тора бит инде ул. Һин үҙеңде Себергә, ундағы эшеңә генә көйләгәнһең дә, бындағы ҡыҙыҡтарҙы, үҙеңде мауыҡтырырҙай шөғөлдәрҙе күрергә теләмәйһең, тимәк...

- Балалар аталарын умарта эше менән шөғөлләндерергә хыяллана хыялланыуға, - тип һүҙгә ҡушылды ҡатыны. - Әммә мин әлегә уның өйҙә тороуын күҙ алдына килтерә алмайым. Пенсияға сығып, гел генә бергә йәшәй башлаһаҡ, айырылып ҡуйырбыҙмы икән, тип көлөшөп тә алабыҙ.

- Тәүбә тиген... - тигән булып, темаһы икенсегә борҙом.

...Ә бит ошондай ину йәшәү рәүеше өҫтөнлөк ала бара беҙҙең милләттә лә. Артабан ул ниндәй эҙемтәләргә килтерер икән, тигән булдым да ул. Эҙемтәләре әле уҡ билдәле бит инде: ғаиләләр тарҡала, балалар атайһыҙ үҫә, хатта ҡайһы бер ҡыҙ-ҡатындар түйып һикерәп, ире алдындағы яуаплылыҡты онотоп, яңылыш юлға баҫа...Себер иркенлегенә, оҙон аҡсаға өйрәнгән ирҙәр ҙә уларҙан ҡалышмай. Ҡайҙа барабыҙ беҙ, йәмәғәт?..

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Төбәк башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов Мексика Ҡушма Штаттарының Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Рубен Альберто Бельтран Герреро менән осрашыу үткәрҙе. Ҡунаҡ Башҡортостан һәм Мексика араһында өс үҙ-ара эш итеү өлкәһен билдәләне. "Беренсенән - сауҙаны кәсәйтергә кәрәк, ә ул инвестициялар ағымын аңлата. Бынан тыш, мәҙәни бәйләнештәрҙе әүҙем үҫтереү зарурлығы тора. Һәм өсөнсөһө, иң мөһиме: Өфө Рәсәй Федерацияһының энергетика йөрәге булып тора һәм был тәңгәлдә беҙҙең уртаҡ нәмәләр байтаҡ", - тине Герреро әфәнде.

✓Рөстәм Хәмитов хоҡуҡ тәртибен һаҡлауҙы тәьмин итеүҙә даими эшләп килгән координация кәңәшмәһенең ултырышын үткәрҙе, унда пассажирҙарҙы йөрөтөү мәсьәләләре тикшерелде. "Был эшмәкәрлектең ҡайһы бер йүнәлештәрендәге хәл борсоуға һала. Тәү сиратта, тукталыштарҙағы этеш-төртөш, маршрут такси водителдәренең тупаҫ мөнәсәбәте, машрутта хәүефле ярыштар. Кешеләр, билдәһеҙ техник тороштағы һәм аңлайышһыҙ водитель йөрөткән транспортҡа ултырып, көн һайын стресс кисерә", - тине Рөстәм Хәмитов.

✓Республика башлығы Рөстәм Хәмитов Салауат Юлаевтың 260 йыллығына арналған "Салауат йыйыны" Республика фольклор байрамында ҡатнашты. Сәфәр барышында ул Әлкә ауылында - Салауат Юлаевтың кесе Ватанында урта мәктәпте ҡараны. Был республиканың смарт-мәктәптәренең береһе, заманса технологияларҙы өйрәнеү буйынса базалы майҙансыҡ булып тора. Салауат районы башлығы Ғәли Хәйретдинов мәктәпте Салауат Юлаев исемендәге лицей итеп атарға тәҡдим итте. Рөстәм Хәмитов дөйөм алғанда был башланғысты хупланы һәм республиканың мәғариф министры Әлфис Ғаязовҡа был мәсьәләне өйрәнергә ҡушты.

✓Ғинуар-июндә Башҡортостанда инфляция, дөйөм алғанда, Рәсәйҙәге кеүек, 4,8 процент тәшкил итте, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. Ағымдағы йылда Башҡортостандың ҡулланыу баҙарында инфляция торошо былтырғыға ҡарағанда азыҡ-түлеккә (2013 йылдың ғинуар-июнендәге 6,1 процентҡа ҡаршы 8,3 процент) һәм хеҙмәттәргә (2,7-гә ҡаршы 4,3 процент) хаҡтарҙың юғары үҫеше менән билдәләнә.

КИЛЕШМӘЙЕМ!



# АҠЫЛҒА УЛТЫРЫУ...

## дәрестә аҡыллы ултырыуҙан башлана

**Яныраҡ Үҙәк телевидение бер төркөм кешеләрҙең Украинаның бер губернаторын кабинетына инеп дөмбәҫләүен һүрәтләгән сюжет күрһәтте. Губернаторҙың гәйебе шунда: ул Майҙандағы митингыларҙа ҡатнашҡан бер табипты һаулыҡ һаҡлау министры итеп ҡуйырға теләмәгән, имеш. Кейеме бүҫелеп йыртылған бахыр губернатор кабинетының тәҙрәһенән сығып ҡасырға мәжбүр булды - центнерҙан артыҡ кәүҙәһе менән икенсе ҡаттан ырғып төшөүҙе еңелдән булмағандыр, әммә күҙенә аҡ ҡара күренмәгән төркөмдән ҡотолоуы менән ул барыбер үҙен бәхетле тойғандыр...**

Был ваҡиғанан алда Украина президенты Виктор Янукович та халыҡтың үҙсуд ойоштороуынан ҡасып ҡотолдо, ошондай хөкөмдән ҡасҡан элекке хөкүмәт етәксеһе Николай Азаровты хәҙер бөтә донъя буйлап эҙләйҙәр. Бындай экскурс үткәреүемдең сәбәбе шунда: төрлө кимәлдәге депутаттар, чиновниктар үҙҙәрен яҡлау һәм һаҡлау өсөн ниндәй генә сара уйлап тапмай! Үҙҙәрен көнө-төнө һаҡлаған махсус органдар, иммунитет тураһындағы закондар, дәүләт тарафынан яҡшы матди тәьминәт (дачалар, машиналар, ял йорттары, пенсия һ.б.). Һүҙ ҙә юҡ, дәүләт менән идара итеү еңелдән түгел, йыш ҡына уларға үҙ халҡына ҡаршы йүнәлтелгән ҡарарҙар ҡабул итергә лә тура килә - үҙендә халыҡ нәфрәтенән ошолайтып "аярға" кәрәктер ҙә. Әммә бик шашып киткәндә халыҡ был сараларға төкөрөп бирә лә ҡуя шул...

Бына әле лә РФ Дәүләт Думаһының Мәғариф буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Виктор Шудеговтың тейешле законға индереү өсөн тәҡдим ителгән төҙәтмәләр һәм үҙгәртеүҙәр проекты халыҡты шаҡ ҡатырҙы. Унын асылы шунда: уҡытыусыларҙы әлеге чиновниктарға тиңләү. Депутат уйы буйынса, педагогты мыҫҡыллаған, кәмһеткән, уға ҡул күтәргән өсөн ата-әсәгә, балаға тейешле яза бирергә кәрәк. Ул Енәйәт Кодексының 319-сы статьяһына ярашлы, власть әһелдәрен "рәнйеткән" өсөн бирелгән язаға тиң булырға тейеш. Мәҫәлән, әгәр уҡыусы, унын ата-әсәһе уҡытыусыны кеше алдында мәсхәрә итһә, уларҙы ярты йылдан бер йылға тиклем холоҡ төҙәтеү эштәренә ебәреү ҡаралырға тейеш.

Был новация тураһында ишеткәс, үҙемдең таныш педагогтарға мөрәжәғәт иттем. "Күптән кәрәк ине!" тигән, дәрәү хуплау һүҙҙәрен ишеткәс, баҙап ҡалдым: ни хәлгә барып еттек - уҡытыусы йәлләткә әйләнгән булып сыға түгелме? Ни өсөн ул тыңламаған балалар, уларҙың ата-әсәһе өсөн ошо сараны хуп күрә? "Кеше кешегә - бүре" тигән принцип мәктәпкә лә барып еттеме ни хәҙер? Был закон мәғарифтағы хәлде үҙгәртә алырмы? Әйе, акселерат уҡыусыларҙың йыш ҡына уҡытыусылар менән конфликтҡа инеүе, хатта ҡул күтәреүе тураһында яҙып торалар. Ҡайны бер ата-әсә лә бөтә гәйепте балалар баҡсаһы, мәктәп коллективына яҡһарырға әҙер тора. Юҡ-бар өсөн судлашып йөрөүселәр ҙә етерлек. Ата-әсәләр йыйылышында ошондай кешеләрҙе күреп, йән әрней. Уҡытыу, тәрбиә процесы менән шөғөлләнеү урынына, судтарҙа ваҡыт үткәргән мәғариф етәкселәрен йәлләп тә ҡуям. Әгәр ҙә баяғы закон проекты үҙ көсөнә инеп, уҡытыусылар судлаша башлаһа, уҡыу процесы нисек булыр икән?

Депутаттың әлеге тәҡдимен аңлап була: Думаның ярты составы киләһе округтарҙа үтәсәк һайлауҙарҙа ҡатнашырға әҙерләнә - электоратҡа оҡшарға тырышыу өсөн ниндәйҙер яңылыҡ кәрәктер, күрәһең. Тимәк, уҡытыусылар В. Шудегов өсөн тауыштарын йәлләмәйәсәк...

Әйткәндәй, Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығының быйылғы Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре буйынса ҡабул иткән ҡарары ла аптыратты. Уртаса балл бик түбән килеп сыҡҡас, балаларҙың байтағын (уртаса 20 процентын) аттестатһыҙ ҡалдырмау өсөн рус теленән тейешле балды 24-кә тиклем төшөрөү тураһында ҡарар ителде. Был ҡарарҙың В. Шудегов тәҡдиме менән бәйле икәне көн кеүек асыҡ бит. Мәктәптәге тәртипһеҙлектәр башлыса ошо "балласт" арҡаһында килеп сыға түгелме? Барыбер аттестат бирәсәктәренә ышанған уҡыусынан тейешле тәртип көтөп тә булмай. Белем менән ныҡышылмаған аттестатын тотоп, атаәсәһен эйәртеп, вузға килмәҫ тимә уны. Һуңынан министрлыҡ уларҙы ҡабул иткән вуздарҙы лицензиянан мәхрүм иткән булып, халыҡ алдында "эш күрһәтә". Кемде алдайбыҙ һуң?..

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Әлиә ЯҠУПОВА:** Бөгөн мәктәптә эшләгән уҡытыусының баланың агрессияһынан, һүгенеү, әр һүҙҙәренән директор ҙа, мәғариф идарафлығы ла яҡлай алмай, сөнки уҡыусы һәм уның ата-әсәһе һәр ваҡыт хаҡ, тигән принцип алға ҡуйыла. Быны уҡыусылар ҙа, ата-әсәләр ҙә яҡшы белә һәм бик оҫта ҡуллана. Мәҫәлән, мин өлгәшә алмаған уҡыусыға 3-лә билдәһе ҡуям икән, уның ата-әсәһе ҙур тауыш ҡуптарып, был баламдың "өслө"һө түгел, һеҙҙеке, сөнки тейешенсә белем бирә алмағанһығыҙ, тип, балаһын аҡлап, һине гәйепләп китә. Бер әсәйҙең 25 йыл эш стажы булған уҡытыусыны шулай төрлө урындарға саҡыртып йөрөткән, аҙаҡтан ғәфү үтенергә мәжбүр иткәнен беләм. Дөрөҫөн әйткәндә, бындай бәхәстәр башлыса юҡ ҡына урында тыуа, янъял көсәп йөрөүселәргә был етә ҡала. Өфө ҡалаһының бер лицейында эшләйем, директорыбыҙ бәхәстәрҙе яйлау буйынса хатта махсус комиссия булдырырға мәжбүр булды. Шунан ата-әсәнең уҡытыусыға булған бындай мөнәсәбәтен күргән бала уҡытыусыны нисек ихтирам итһен инде? Ошоларҙы иҫәпкә алғанда, бындай закон бик кәрәк.

**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА, уҡытыусы:** Беҙ бит ураҡ-сүкешле Совет иленән. Эшселәр менән крәҫтиәндәр синыфы алға ҡуйылып, башҡа өлкәлә эшләгән хеҙмәткәрҙәр йәмғиәттең әрегорто, тип иғлан иткәндә алтынсы класта уҡып йөрөй инем. Бигерәк тә уҡытыусылар, мәҙәниәт менән медицина өлкәһендә эшләүселәр эләкте был кәмһетеүгә. Яныраҡ юғары белемле нефтсе: "Бөтөн әрәмтамаҡтарҙы беҙ, матди байлыҡ етештереүселәр, аҫрайбыҙ", - тип хәбәр һөйләй. Нефтте етештерә алмауҙарын, ер ҡуйынынан әҙерҙе һурып ултырыуҙарын, ә инде үҙенә белем биргән уҡытыусыларына рәхмәтле була белмәүе әҙәпһеҙлек икәнлеген иҫкәртергә тура килде. Йылдар һуҙымында мәғарифты икенсе планға ҡуйыу, теләнсе хәленә төшөрөү, хоҡуҡи яҡтан сикләүҙәр, мәғәнәһеҙ реформалар үҙенең емергес эшен эшләне инде. Телевидениеның мыҫҡыллы фильмдар аша мәктәпкә, уҡытыусыларға кире йөмәғәт фекере әүәләү өҫтөндә эшләүе бер нисек тә аҡларлыҡ түгел. Матбуғатта ла ике йөҙләлөк ярылып ята. Мәғариф эсендә ҡайнап та, ундағы хәл-торошҡа бөтөнләй йөгонто яһай алмаған уҡытыусы, әлбиттә, хоҡуҡи яҡлауға мохтаж. Дәүләт кимәлендә сәйәсәтте 180 градусҡа үҙгәртмәй тороп, мәғарифтың престижын, уҡытыусы абруйын ҡайтарыу мөмкин түгел. Ә закондар яҙып ҡына нимәнелер үҙгәртеп булмаясаҡ. Бер фәйләсүф әйткән бит: көслө дәүләттең закондары күп булмай...

ИШАРА

# БАЛА ҠАРҒА

**Мин башҡорт кинематографистары төшөргән "Етегән" фильмын аҙна һайын булмаһа ла, ай һайын ҡарар инем. Ул фильмда һүҙҙәр урынына йырҙар ғына ҡулланыла. Етмәһә, боронғо иң матур йырҙарҙы иң оҫта йырсылар башҡара. Кинонь ҡарап, "Бала ҡарға" йырын аҙна буйы көйләп йөрөнөм. Ул йырға һалынған риүәйәтте беләм, тик тулыһынса хәтерләй алмайым.**

Ул йырҙа: "Дошман яуы етеп килә, балабыҙҙы алығыҙ, алығыҙ..." тип йырлана. Ә риүәйәте ошолай: дошман яуынан ҡасып барған әсә балаһын ҡарға ояһына һалып китергә мәжбүр була. Яу баҫылғас, әйләнеп килһәләр, бала - иҫән-һау. Ҡарғалар тере йәнде үлтермәй, төрлө ем, еләктәр ҡаптырып, һаҡлаған. Был, әлбиттә, риүәйәт кенә. Ә ысын тормошта "бала ҡарғаларҙы" (етемдәрҙе) һәр саҡ меҫкен тип ҡабул итәләр. Беҙ ҙә "бала ҡарға" булдыҡ. Атайҙар - яуҙа, әсәйҙәр - ауырыуҙан ауған. Ә ҡайны берәүҙәр балаларын, астан үлмәһен, тип, балалар йортона тапшырған. Ил халҡы һуғыштан һуңғы илленсе йылдарға тиклем икмәккә туймаяны бит. Тик илебеҙ етемдәрҙе балалар йорттарына йыйып, мөмкин тиклем бәхетле итеп үҫтерергә тырышты. Тәрбиәселәрҙең: "Һеҙҙең атайҙарығыҙ ил азатлығы өсөн көрәшеп, яуҙа ауған. Атайҙарығыҙ менән ғорурланып үҫегеҙ!" - тип әйткән һүҙҙәре ғүмергә хәтерҙә ҡалды. "Һеҙ - етем" тигән һүҙҙе бөтөнләй ишетмәнек уларҙан.

Ә хәҙер етемдәр тураһында һөйләшеүҙәр ойошторалар ҙа, уларҙы кәмһетеп һөйләйҙәр. Күптән түгел "Телеүҙәк" тапшырыуында бер балалар йорто директорының ошондай кәмһетеүле һүҙҙәрен ишеттем, тыңлап бөтөрә алманым уны, телевизорымды һүндереп ҡуйҙым. Балаларҙың гәйебен ҡабартып һөйләгән һүҙҙәрен ишетеп: "Был ҡатын нисек балалар йортонда эшләй икән?" - тигән уй килде башыма.

Етемлектең сәбәптәре күп. Етемдәрҙең бөтәһе лә эскесе балалары түгел. Юл фажиғәләре, янғындар, ташҡындар һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында ла етем ҡалғандар етерлек... Яҙмыш тарафынан ҡыйырһытылғандарҙы тағы өҫтәп ҡыйырһытмайыҡ. Уларҙы: "Һеҙ, балалар, һәйбәт, аҡыллы, һәләтле! Көслө, уңышлы кешеләр булып үҫерһегеҙ! Бер ҡасан да ауырлыҡҡа бирешмәгеҙ!" - тип үҫтерергә кәрәк. Әтеү: "Балалар йорттарын ябырға! Етемдәр Хөкүмәткә ҡыйбатҡа төшә, уларҙы ғаиләләргә таратып бирергә!" - тигән һүҙҙәрҙе ишетеп, йән әрней. Ә нисек итеп балалар йортонан данлыҡлы йырсы Рамаҙан Йәнбәков, данлыҡлы актер Арыҫлан Мөбәрәков, шағир Рәми Ғарипов (уның "Детдомыма сәләм Мәскәүҙән" тигән шиғыры ла бар), Александр Матросов - Шәкирйән Мөхәмәтйәнов, режиссер Әнүәр Нурмөхәмәтов һәм башҡалар үҫеп сығып, илде данлаған һуң, тип һорағы килә ундайҙарҙан. Уйланырға урын бар.

**Айгөл АХУНОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Сибайҙа Рөстәм Хәмитов "Урал арьяғы-2014": "25-20" стратегияһы. Төбәк-ара хеҙмәттәшлек - уртаҡ уныштың яңы мөмкинлектәре" төбәк-ара инвестиция форумының пленар ултырышында сығыш яһаны. Пленар ултырыш алдынан Урал арьяғындағы халыҡ кәсептәре һәм предприятиелар күргәҙмәһен ҡараны, Сибай, Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән, Йылайыр, Ейәнсура, Учалы, Хәйбулла райондары стендтары менән танышты. Хакимиәт башлыҡтары муниципаль берәмектәрҙең презентацияһын тәҡдим итте, уларҙың территорияларында тормошҡа ашырылған инвестиция проекттары һәм артабанғы иҡтисади үҫеш перспективалары тураһында һөйләне.

✔ "Урал арьяғы-2014" форумында Ҡытай Халыҡ Республикаһы менән үҙара эш итеүҙе кинәйтеү сиктәрендә ағасты тәрән эшкәртеү буйынса инвестиция проектын тормошҡа ашырыу тураһында "Синьдунмин" һәм ҡортсолокто үҫтереү тураһында Elephant Alliance International Economy and Trade Center Ҡытай компаниялары менән ниәттәр тураһында протоколдар төҙөлдө. Агросәнәғәт өлкәһендә инвестиция проекттарын "Prokator" Венгрия компанияһы тормошҡа ашырырға планлаштыра, ә "Пенетрон-Рәсәй" компанияһы һыуҙан һаҡлағыс изоляция материалдар заводын төҙөү мөмкинлеген өйрәнә.

✔ Сибайҙа үткән "Урал арьяғы-2014" төбәк-ара инвестиция форумында Башҡортостан Хөкүмәте һәм Ырымбур, Ҡурған өлкәләре хөкүмәттәре араһында сауҙа-иҡтисади, ғилми-техник, социаль, мәҙәни һәм башҡа өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Сара сиктәрендә бөтәһе өс төбәк-ара һәм һигеҙ муниципаль-ара килешеү, шулай уҡ шәхси компаниялар менән ниәттәр тураһында дүрт протокол төҙөлгән.

✔ Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында ЮНЕСКО кафедраһы асылды. Хәбәр итеүҙәренсә, юғары уҡыу йортонда оҙаҡ йылдар ЮНЕСКО үҙәге эшләгән, ә 2013 йылдың ноябрендә университет ЮНЕСКО кафедраһын асыуҙы раҫлаусы документтарҙы ала. ЮНЕСКО-ның ярҙамы ғилми-тикшеренеү һәм методик эштәрҙә катализатор ғына булып ҡалмаясаҡ, ә вузға өҫтәмә ярҙам йәлеп итеү һәм университет ресурстарын арттырыу өсөн халыҡ-ара саралар ойоштороу мөмкинлеге лә бирәсәк.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Һәр ярыш спортсы өсөн үсеш майҙаны ла, үҙ кимәлен аңлау урыны ла булараҡ ҙур әһәмиәткә эйә. Башҡортостанда бындай ярыш үтә икән, тимәк, бындағы спортсылар өсөн ул тәжрибә майҙансығы ла буласаҡ.*



АЛДАЙҘАР!

## МУТЛАШЫУСЫЛАР ӘҮҘЕМЛӘШӘ

**Интернет селтәрендә мутлашыусылар тоҙағына эләгеп, аҡсаларын юғалтҡан кешеләрҙең кәнәш һорап мөрәжәғәт иткән яҙмалары бихисап. Ысынлап та, мутлашыусылар хаҡында телевидение экрандары аша ла йыш һөйләйҙәр, гәзит биттәрендә лә күп баҫалар, шул уҡ интернет селтәрендә лә һаҡ булырға саҡырған киҫәтеүҙәр яҙылып тора, ләкин улар ҡулынан зыян күреүселәр һаны кәмемәй.**

Банк картаһындағы аҡсаһын үҙ ҡулы менән сит кешеләргә күсергәндәрҙең зиһене, ни өсөндөр, һуңлап ҡына асыла. Мәҫәлән, Бөрө ҡалаһында йәшәүсе бер ир мутлашыусыларҙан алданып, 411 мең һумынан ҡолаҡ ҡаға. Үҙенең банк картаһы ябылыуы (заблокирован) тураһында смс-хәбәр алғас, ул күрһәтелгән телефон номерына шылтырата. Сымдың икенсе осонда үҙен банктың хәүефһеҙлек хеҙмәте хеҙмәткәре итеп таныштырыусы банк картаһын бушатыу мөһимлеген әйтә. Бының өсөн ул карталағы аҡсаны бер-нисә номерға күсерергә кәрәклеге хаҡында белдерә. Уға ышанған ир шулай итә лә - аҡсаһын бүлеп, күрһәтелгән 8 адресҡа күсерә. Бер аҙҙан һуң ул үҙенең мутлашыусылар ҡулына эләгеүен аңлай һәм полиция бүлегенә мөрәжәғәт итә. Уның полицияға тиҙ килеүе байтаҡ аҡсаһын кире ҡайтарып алырға ярҙам итә.

Мутлашыу юлы менән кешенең аҡсаһын тартып алыу юлдары бихисап, ләкин иң таралғаны - телефон ҡулланып башҡарылған закон боҙоуҙар. Бөрө полицияһының енәйәттәрҙе тикшереү бүлеге хеҙмәткәре Александр Ануфриев белдереүенсә, был хаҡта иҫкәртеүҙәр күп булһа ла, аҡсаһын мутлашыусылар иҫәбенә күсереүселәр кәмемәй. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә уның алдында ғына мутлашыусылар менән бәйле 20 эш папкаһы ята. Полиция бүлегенең башҡа хеҙмәткәрҙәрендә лә яҡынса ошондай уҡ һандағы папка булһа, эш масштабының ҙурлығы хайран ҡалдыра.

Шуға күрә полиция хеҙмәткәрҙәре граждандарҙы һаҡ булыу һәм уйлап эш итеү кәрәклеге хаҡында иҫкәртә. Таныш булмаған кешеләргә ишек асмаҫҡа, төрлө тауар тәҡдим итеп йөрөүселәр менән аралашмаҫҡа, телефонға килгән смс-хәбәрҙәргә ышанмаҫҡа саҡыра. Мутлашыусыларҙан алданған осраҡта иһә кисекмәҫтән полицияға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Был осраҡта алданыусының оператив эш итеүе генә аҡсаһын кире ҡайтарып алыу мөмкинлеген арттыра.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# ДОНЪЯ ЧЕМПИОНАТЫ...

## тағы Өфөлә

**12-17 июль Башҡорт дәүләт медицина университетының спорт үҙәгендә студенттар араһында кикбоксинг буйынса Беренсе донъя чемпионаты үтәсәк. Азия, Африка һәм Европа ҡитғаларынан егерменән ашыу дәүләт ҡатнашырға теләк белдергән чемпионатта Башҡортостан спортсылары ла сығыш яһаясаҡ. Сараны Өфө ҡала округы хакимиәте, Рәсәй студенттарының спорт берлеге, FISU халыҡ-ара студенттар ойошмаһы ярҙамында Кикбоксинг ойошмаларының бөтә донъя ассоциацияһы (WAKO) менән Рәсәйҙең Кикбоксинг федерацияһы (ФКР) ойоштора. Был турала Өфө ҡала округы хакимиәтендә үткән кикбоксингтың олимпия перспективаларына арналған кәңәшмәлә Рәсәйҙең кикбоксинг федерацияһы вице-президенты Ришат Саяпов хәбәр итте.**

"Өфөләге чемпионат - кикбоксинг спортын Олимпия комитетына таныту маҡсатында эшләнгән сараларҙың береһе булып тора", - тине кәңәшмәлә Норвегияның Осло ҡалаһынан видео-бәйләнеш ярҙамында ҡатнашыусы WAKO етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Эспен Лунд. Лунд шулай уҡ кикбоксингты популярлаштырыу, олимпия уйындары дисциплинаһына индереү эшенең барышы тураһында бәйән итте, журналистарҙың һорауҙарына яуап бирҙе. Ҡорҙа ҡатнашыусы БДМУ-ның физик тәрбиә кафедраһы мөдире Руслан Ғәйнуллин уҡыу йортоноң спорт үҙәгендә кикбоксинг, бокс һымаҡ һуғыш төрҙәре менән шөғөлләнеү, улар буйынса төрлө кимәлдәге ярыштар уҙғарыу өсөн бөтөн шарттар булдырылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шулай уҡ буласаҡ ярышта ҡатнашасаҡ йәш кикбоксер, БДМУның педиатрия факультеты студенты Айрат Солтановҡа университет етәкселеге ҙур өмөттәр бағлауын да йәшермәне.

Әйткәндәй, БДМУ университеты етәкселеге үҙенең спортсыларын һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә тота. Кафедра доценты, БР спорт алдынғыһы Ю.В. Яркин әйтеүенсә, спортсы студенттар йәй һайын спорт лагерҙарында бушалай ял итә, айырыуса уңыш ҡаҙанған спортсылар йылына бер тапҡыр бирелә торған 50 мең һумлыҡ стипендия менән билдәләнә. Ошоларҙы ғына иҫәпкә алғанда ла, буласаҡ чемпионаттың тейешле кимәлдә үтеренә өмөт тә, ышаныс та бар.

Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, көнсығыш һуғыш төрҙәре буйынса донъя чемпионаттарында ҡатнашыу, уларҙа еңеү бәхетен татыған башҡорт спортсыларынан көтөләсәк сара тураһында фекерҙәрен белештек.

**Тимур КӘРИМОВ, тай боксы буйынса БР чемпионы, кикбоксинг буйынса Рәсәй призеры, ушу-саньда буйынса донъя чемпионы:** Был ярыш тураһында ишетмәгәйнем әле, уның Өфөлә үткәрелеүен ҡыуанып ҡаршы алам. Уны заманында Брюс Ли менән бергә шөғөлләнгән Чак Норрис ойошторған WAKO ойошмаһы үҙе үткәрә икән, тимәк, чемпионат юғары кимәлдә үтер, тип ышанам. Беҙ студент саҡта теге йәки был донъя чемпионатына барыу өсөн әллә күпме аҡса талап ителгәнгә күрә, бағыусылар эҙләй инек. Күп кенә ярыштарҙың сығымдарын ҡаплай алмағанға күрә, саҡырылған урындарға ла бармай ҡалған саҡтар булғыланы. Ә хәҙер Башҡортостан студенттары юл сығымдары өсөн борсолмай ғына донъя чемпионатында ҡатнаша ала икән, улар был шансты ҡулдан ысҡындырмаһын. Һәр ярыш алдынан спортсылар ниндәйҙер күләмдә аҡса түләргә бурыслы. Был - бик тә ғәҙәти күренеш. Судьяларға, чемпионатты хеҙмәтләндереүсе башҡа хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы түләргә лә кәрәк бит.

**Гөлнәзирә ИСҠУЖИНА, теквондо буйынса донъя чемпионаты призеры:** Мин дә ниндәйҙер ярыш үткәреләсәге тураһында урамда белдереү күреп ҡалдым ул, әммә иғтибар итмәгәйнем. Бөгөн килеп, Өфөбеҙҙә донъя чемпионаты үтәсәген ишетеү ҡыуаныслы ваҡиға булып тора. Ә ниңә донъя кимәлендәге ярыш етеп килгәнен һиҙмәйбеҙ һуң? Урамдарҙа был ниңә тойолмай? Кешеләр ниңә был турала белмәй? Моғайын, был һорау менән ойоштороусыларға мөрәжәғәт итмәй булмайҙыр. Чемпионаттың роленә килгәндә, һәр ярыш спортсы өсөн үсеш майҙаны ла, үҙ кимәлен аңлау урыны ла булараҡ ҙур әһәмиәткә эйә. Башҡортостанда бындай ярыш үтә икән, тимәк, бындағы спортсылар өсөн ул тәжрибә майҙансығы ла буласаҡ. Мин, мәҫәлән, чемпионатҡа йүгереп барасаҡмын, уны башынан аҙағынаса ҡараясаҡмын.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Профессиональ спорт донъяһы менән яҡшы таныш бер кеше әйтеүенсә, Рәсәйҙең берәй субъектында Рәсәй кимәлендәге, унан бигерәк, донъя кимәлендәге ярыштар үтә икән, уларҙы, положение буйынса, шул субъекттың Спорт министрлығы ғына үткәрә ала икән. Ә был ярышты үткәреүгә Башҡортостан Республикаһының Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы, ни сәбәптәндер, ҡатнашмаған. Әллә ярышты ҡапыл ғына ойошторғанға шулаймы, әллә башҡа сәбәптәнме, билдәһеҙ. Беҙҙең фекер шул: донъя чемпионатының ниндәй маҡсатта ойошторолоуы түгел, ә уның кимәле һәм беҙҙә үтеүе мөһим.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*



## БАШҠОРТ ТЕКСТАРЫ - СЕЛТӘРҘӘ

**Интернетта башҡорт текстары өсөн башҡорт телендә Bashkort.org системаһы тест режимында эшләй башланы.**

Сайтты эшләүселәр башҡорт телен белгән ҡулланыусыларҙы тест үткәреүгә ҡушылыуҙарын һәм табылған хаталар тураһында хәбәр итеүҙәрен һорай. Шулай уҡ эҙләүҙә сыҡмаған сайттарҙы өҫтәргә мөмкин. Сайтта шулай уҡ Мәскәү дизайнеры Илдар Кинйәбулатов әҙерләгән башҡорт шрифтын күсереп алыу мөмкинлеге бар.

Шулай уҡ ошо көндәрҙә селтәрҙә "Башҡорт теленең терминологик базаһы" барлыҡҡа килде. Уның ойоштороусылары - Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Лингвистика һәм мәғлүмәти технологиялар лабораторияһы. Сайттың базаһында астрономиянан алып телде өйрәнеүгә тиклем төрлө белем өлкәләре терминдары тупланған. Базаны русса-башҡортса һүҙлек итеп ҡулланырға була. Унда тик рус телендә генә эҙләү мөмкин.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Продукция (тауарҙар, хеҙмәттәр) сифаты өлкәһендә Башҡортостан Республикаһы Президенты Премияһына дәғүә итеүгә сираттағы конкурс иғлан ителде. Төбәктә иң абруйлы сифат конкурсында ҡатнашыуға ғаризалар 10 августа тиклем БР Стандартлаштырыу, метрология һәм һынауҙар үҙәгендә ҡабул ителә.

✓Рөстәм Хәмитов "Рәсәй" телеканалының Башҡортостандағы хәбәрселәр пункты хеҙмәткәрҙәрен - "Яңылыҡтар" хәбәрсеһе Азамат Сәлиховты һәм оператор Сергей Шелепинды - Украинаға командировка ваҡытында, профессиональ бурысын үтәгәндә күрһәткән батырлығы өсөн Салауат Юлаев ордены менән бүләкләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы.

✓Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала "Эстония иҫләй: Салауат Юлаев" тип аталған эстон һәм рус телендә баҫылған китаптың презентацияһы үтте. Китапты нәшер итеү инициаторы - Таллиндағы "Агиҙел" башҡорт йәмғиәте. Китап "ТЕА" Эстония китап нәшриәтендә сыҡҡан, тиражы 500 дана. Презентацияла "Агиҙел" йәмғиәтенең рәйесе, йыйынтыҡтың төҙөүсеһе Флүзә Хәйруллина, Эстония нәшриәте мөхәррире Сильви Айре-Вилло, материалдарҙы эстон теленә тәржемә итеүсе, Таллин педагогия университеты студенты Илнур Хәйруллин ҡатнашты. Баҫмала, Салауат Юлаевтың Рогервик ҡәлғәһендә каторгала булыуы менән бәйле, Эстония Милли архивының документтары ҡулланылған.

✓Өфөлә инженер селтәрҙәрен реконструкциялау айҡанлы Пушкин һәм Яңы күпер урамдары буйынса хәрәкәт туҡтатылды. 30 июлгә тиклем автотранспорт хәрәкәте өсөн Зәки Вәлиди урамынан алып Пушкин урамына тиклемге участкала Яңы күпер урамы ябыласаҡ. 24 июлдән 11 августҡа тиклем Яңы күпер урамынан Цюрупаға тиклемге киҫелештә Пушкин урамын ябасаҡтар. Һуңынан, 12 августан алып 3 сентябргә тиклем Пушкин урамынан Октябрь революцияһы яғына 150 метр арауыҡта Яңы күпер урамы буйынса йөрөү сикләнәсәк.

✓Башҡортостан мосолмандарының диниә назараты 2014 йылда мосолмандар өсөн изге урындар иҫәпләнгән Мәккә һәм Мәҙинәгә хаж ҡылырға саҡыра. Теләүселәр Өфө ҡалаһы, Чернышевский урамы, 103 адресы буйынса Башҡортостан мосолмандарының диниә назаратына мөрәжәғәт итә ала. Урындар һаны сикләнгән. Белешмә өсөн телефондар: 272-70-71, 8-917-04-10-750

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Халҡыбыҙҙың милли батыры Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулыуҙы бидәләгән көндәрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты "Хәҙерге шарттарҙа йәш быуында илһөйәрлек тәрбиәләү" темаһына төбәк-ара семинар уҙғарҙы. Әле күптән түгел генә илһөйәрлек, ватансыллыҡ тәрбиәләү көнүҙәк проблема түгел ине, сөнки бала өйҙә булһынмы, балалар баҡсаһындамы, мәктәптәме - һәр кем өсөн олатай-өләсәһе, ата-әсәһе, тарих ҡына түгел, әҙәби китаптарҙың геройҙары Тыуған илендә һөйөү, уның өсөн йәнендә фиҙа ҡылыуҙың тере өлгөһө булып торҙо. Донъя картографтары төҙөгән карталарға үҙе йәшәгән территорияға милләт атамаһы менән инеүселәрҙең, Париждарға ингән атлы полк яугирҙарының, хәрби батырлыҡтары өсөн күкрәктәренә хатта икешәр Советтар Союзы Геройы йондоҙон тағыусыларҙың, Рейхстагҡа байраҡ ҡаҙаусыларҙың, Тыуған илде һуғыш емереклектәренән таҙартып, илебеҙҙе яңы үрҙәргә күтәреүселәрҙең, тыныс тормошта хеҙмәт ҡаһарманлыҡтарына эйә булып, күкрәктәренә Социалистик Хеҙмәт Геройы йондоҙон ҡаҙаусыларҙың вариҫтары, беҙ, улар яулаған ҡаҙаныштарҙы арттырырға, дандарын тағы ла юғарыраҡ күтәрергә тейеш түгелме ни? Эйе, заман башҡа, тип бөтөн нәмәне заманға япһарырға, тик заман дилбегәһен үҙ ҡулыбыҙға алырға ашыҡмайынса, бары тик арбала ғына ултырып барырға тырышабыҙ, буғай.**

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК...

## һүҙҙә түгел, күҙҙә сағыла

"Үҙем өсөн башҡорт йәштәрен патриотик рухта тәрбиәләүҙең өс ҡағиҙәһен астым. Беренсеһе - Тыуған илгә хеҙмәт итеү, тыуған илде яратыу, икенсеһе - ата-әсәнде хөрмәт итеү, өсөнсөһө - башҡорт халҡының тарихын, уның үткәнен белеү. Ошо ябай ғына өс ҡағиҙә нигеҙендә бик һөҙөмтәле эш алып барырға мөмкин", - тип юҡҡа ғына билдәләмәне үҙенең сығышында Дондағы Ростов өлкәһенең башҡорт диаспораһы йәмғиәте рәйесе Мәхмүт Сәлимов. Әммә бөгөн тәрлө яҡлап ошо өс төп төшөнсәне бөтөнләй юҡҡа сығарырға тырышалар. Был хаҡта үҙенең сығышында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев анығ миҫалдар нигеҙендә белдерҙе. "Бөйөк Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы төҙөлөүгә 95 йыл тулыу айҡанлы Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостан халҡына ҡотлау телеграммаһы ебәрҙе. Унда "Республика ошо осорҙа Рәсәй дәүләтселеген нығытыуға, илдең иҡтисади ҡеүәтен арттырыуға, Ватан фәнен, мәғарифын, күп милләтле халҡының баһаһыҙ милли мәҙәниәтен һаҡлауға ҙур өлөш индерҙе. Һеҙ хаҡлы рәүештә бай тарихығыҙ, хеҙмәт һәм башҡа ҡаҙаныштарығыҙ, дуҫлыҡ һәм тыуған ерегеҙгә һаҡсыл ҡарашығыҙ менән ғорурлана алаһығыҙ", тигән юлдар бар", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ул. Был үҙе үк ошо мираҫты артабан да һаҡлауға гарантия кеүек яңғырай һымаҡ. Әммә Рәсәй дәүләте етәкселәренең бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө эшләүе - хәҙер инде ғәҙәти күренеш. Быуаттар буйына улар үҙ һүҙҙәрең өсөн яуап биреүҙең намыҫ эше булыуына төкөрөп кенә ҡарай. "Бөгөн донъя тиҙ үҙгәрә. Милләт-ара мөнәсәбәттәрҙең бер проблемаһын хәл итеп өлгөрмәйһең, яңы мәсьәләләр килеп тыуа. Шуларҙың иң мөһиме - глобаллəшеү шарттарында башҡорттарҙың үҙенсәлеген, башҡорт телен уҡытыуҙың сифатын һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү, халҡыбыҙҙың тарихын һәм билдәле шәхестәребеҙҙең ролен боҙоп күрһәтергә тырышыуҙарға ҡаршы тороу, йәштәребеҙҙе рух-әхлаҡ нормаларында, илһөйәр итеп тәрбиәләү тора", - тип, Румил Талғат улы хатта Башҡортостан тарихсыларының тарихты үҙҙәре теләгәнсә ҡабаттан яҙырға тырышыуына әсенеү белдерҙе. Был йәһәттән ул үҫеп килеүсе быуында башҡорт халҡының тарихына, тарихи Башҡортостандың Евразия киңлегендәге роленә ҡарата объектив ҡуҙаллауҙары булырға тейешлегенә баҫым яһаны. Бында инде яңы ҡитға асырға кәрәкмәй: "Башҡорт халҡының тарихы" ете томлығы донъя күрҙе, башҡа бик күп тарихи материалдар бар, хәтерҙәре ҡыҫҡаларҙың иҫтәренә төшөрөү өсөн матбуғат баҫмаларында мәҡәләләр донъя күреп тора. Салауат Хәмиҙуллиндың "Тарихи мөхит" телетапшырыуы киң билдәлелек яуланы һәм ул йәштәрҙә патриотлыҡ тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай.

Ләкин республиканың үҙендә лә, башҡорттар күпләп - тарихи Башҡортостан ерҙәрендә - йәшәгән төбәктәрҙә лә, башҡорт телен уҡытыу, милли матбуғат баҫмаларын нәшер итеү һәм таратыу, ергә ереккән халыҡты социаль инфраструктураларҙы ябыу, ҡыҫҡартыу юлдары аша ауылдарынан күсенергә мәжбүр итеп, ерҙәренән яҙҙырыу кеүек күренештәр барлығына ла күҙ йоморға ярамай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, башҡорттар хатта сит илдәрҙә лә үҙенең милли үҙаңын юғалтмай, тарихи тамырҙарына тоғро ҡала, милләттәштәребеҙҙе берләштерепп, төрлө мәҙәни саралар үткәрә, йәмәғәт башланғысында йәкшәмбе мәктәптәрен ойоштора, йәш быуында Оло Башҡортостанына, теленә, мәҙәниәтенә, тарихына һөйөү тәрбиәләй.

(Дауамы 6-сы биттә).



Һамар өлкәһе башҡорттары.

ҺОРАУ - ЯУАП

### ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫН ТОТОНОУ

**Минең өлкән улым быйыл юғары уҡыу йортона уҡырға инергә әҙерләнә. Уҡыу өсөн түләүгә әсәлек капиталы аҡсаһын тотонорға буламы?**

- Әсәлек капиталы аҡсаһы менән ҡайһы балағыҙҙың булһа ла уҡыуын түләргә хоҡуҡлыһығыҙ. Тик уҡый башлағанда уның йәше 25 йәштән ҙур булмаҫҡа тейеш. Шул уҡ ваҡытта әсәлек капиталы аҡсаһын икенсе (йәки унан һуңғы) бала өс йәшен тултырғас ҡына тотонорға мөмкин икәнлеген онотмағыҙ. Был хаҡта 2006 йылдың 29 декабрендә ҡабул ителгән 256-сы ФЗ һанлы "Балалары булған ғаиләләргә дәүләт ярҙамы күрһәтеү тураһында"ғы Федераль закондың 7-се һәм 11-се статьяларында билдәләнгән.

### АЛИМЕНТ ТУРАҺЫНДА

**Иремдә алиментҡа биреү өсөн рәсми рәүештә айырылышыу мотлаҡмы?**

- Әгәр ҙә тормош юлдашығыҙ ғаиләһен матди яҡтан тәьмин итеүҙән ялтанһа, законлы никахта булһағыҙ ҙа унан алимент түләтә алаһығыҙ. Әгәр ҙә ғаиләлә бер бала булһа, ирегеҙҙең килеменең 1\2, ике бала булһа - 1/3, өс һәм унан да күберәк бала булһа 1\4 өлөшөн талап итә алаһығыҙ. Әгәр ҙә өс йәше тулмаған бала менән өйҙә ултырһағыҙ йәки ғәрип бала тәрбиәләһегеҙ, шулай уҡ үҙегеҙгә лә алимент түләттерә алаһығыҙ. Быны өсөн үҙегеҙҙең йәки, айырым торһағыҙ, ирегеҙҙең йәшәү урыны буйынса мировой судҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

### КЕЙӘҮЕМ ЕЙӘНДӘРЕМДЕ КҮРҺӘТМӘЙ

**Кейәүем минә ейәндәрем һәм ҡыҙым менән аралашырға, улар менән күрешергә рөхсәт итмәй. Уның былай эшләргә хаҡы бармы?**

- Һеҙҙең ейәндәрегеҙҙе күрергә тулы хоҡуғығыҙ бар. Был хаҡта РФ Ғаилә кодексының 67-се статьяһында әйтелә. Әгәр атай-әсәй (йәки уларҙың береһе) яҡын туғандарға (ә өләсәй һис шикһеҙ ейәндәренә яҡын туған) балалары менән күрешергә рөхсәт итмәһә, опека һәм попечителлек органы уларҙы аралашыуға кәртә ҡуймаҫҡа мәжбүр итәсәк. Быны өсөн һеҙгә ейәндәрегеҙҙең йәшәү урыны буйынса ойошмаға ғариза яҙырға кәрәк. Әгәр ҙә уларҙың талабы инҡар ителһә, һеҙ йәки шул уҡ орган судҡа мөрәжәғәт итергә хоҡуҡлыһығыҙ. Суд балаларҙың фекере һәм уларҙың мәнфәғәтенән сығып ҡарар сығарасаҡ.

Ҡыҙығыҙ менән аралашыу мәсьәләһен иһә үҙегеҙгә хәл итергә тура киләсәк. Ҡыҙығыҙ балиғ кеше һәм кем менән аралашырға йәки аралашмаҫҡа кәрәклеген үҙе хәл итә ала. Әгәр ҙә ул ирен тыңлап, һеҙҙең менән аралашмай икән, ҡыҙғаныҫҡа күрә, бер нәмә лә эшләй алмайһығыҙ.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һипкелдәр

❖ Халыҡ медицинаһында һипкелдәрҙе бөтөрөү өсөн ҡыяр, лимон һуты һәм пертушка ҡулланыла. Уларҙың тәьҫирен көсәйтеү өсөн әсе ҡатыҡ, башҡа һөт ризыҡтары, сөпрә ҡушырға мөмкин.

❖ 1 ҡалаҡ петрушка, 1 ҡалаҡ бал, бер нисә тамсы лимон һутынан битлек әҙерләргә. 35-40 минутҡа биткә һөртөргә, йылы һыу менән йыуырға.

❖ Ҡара ҡарағат, еләк, йөҙөм емеше, ҡарбуз да бит тиреһен ағартыу сифатына эйә. Уларҙы иҙеп, 15 минутҡа битлек яһарға, һалҡын һыу менән йыуырға һәм крем һөртөргә.

### Күҙҙәр арыһа

❖ Компьютерҙа оҙаҡ эшләгәндән һуң, ғәҙәттә, күҙҙәрҙә әсетеү барлыҡҡа киләсән. Күҙ ҡабаҡтарын йышыраҡ йомоп алыу был проблеманан ваҡытлыса булһа ла ҡотҡарасаҡ. Бынан тыш, күнегеү күҙ эргәһендәге мускулдарҙы ла нығыта.

❖ Туҡланыу рационына А витамины күп булған ризыҡтар индерегеҙ. Ул кишер, картуф, ҡауында бар. Шулай уҡ диңгеҙ балыҡтары ашарға, етен майы ҡулланырға була. Самаһын белеп, әстерхан сәтләүеге лә ашағыҙ.

❖ Пакетлы йәшел сәй эскәндән һуң, уларҙы еңелсә һығып, 30 минут күҙҙәргә һалырға. Һуңынан күҙҙәр өсөн түбәндәге күнегеүҙе яһарға: күҙ ҡараһы менән өҫкә, аҫҡа, уңға, һулға ҡарарға. Күнегеүҙе көнөнә 2-3 тапҡыр яһарға.

❖ Үлән төнәтмәләре менән күҙҙәрҙе йыуырға була. Аҡ сәскә, ала миләүшә (анютины глазки), розмарин, миләүшә үләндәре күҙҙәр өсөн бигерәк файҙалы. 2-3 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә.

❖ Балға аллергия булмаһа, 1 балғалаҡ балды 3 ҡалаҡ таҙа һыуҙа иретеп, ошо сироп менән күҙҙәргә компресс яһарға. Икенсе көнөнә яңынан әҙерләргә.

❖ Гәрсистең эфир майын сикәләргә һөртөргә була.

❖ Дарыуханаларҙа һатылған күҙҙәр өсөн махсус тамсыларҙы ҡулланырға ашыҡмағыҙ. Саф һауала йөрөү, компьютерҙа эшләгәндә ял минуттары ойоштороу был проблеманы еңел хәл итәсәк.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ТУЙ ЙОЛАҺЫ

**Ике яҡта ла өсәр көн, байҙарҙа хатта аҙналап барған туйҙың аҙағында ҡунаҡтарҙы оҙатыу йолалары ла төрлө һәм үҙенсәлекле.**

Туйҙың аҙаҡҡы көнөндә хуш ашы үткәрелә. Дим һәм Өршәк буйынса йәшәгән башҡорттар уны - оҙатыу һалмаһы йәки ыступай (остопай) һурпаһы, үҙәк райондарҙа көн итеүселәр ҡайтыу ашы тип йөрөтә. Ҡайһы берҙә был йола мелендә бутҡа биргәндәр, был ризыҡ запасы ныҡыҫланды, тигәнде белдергән. Шуға ла был бутҡа төртҡөс ("ишара" мәғәнәһендә) бутҡаһы йәки бөртмәс ("бешеп етмәгән") бутҡа тип аталған. Дим бассейнында, Ғафури, Стәрлетамаҡ райондарында өйгә утын индереп, өйҙөң мөйөштәренә һуҡҡандар. Көньяҡ-көнсығыш райондарҙа хушлашыу ашына килгән өлкән ағаһы тунды кире ағын әйләндереп кейеп инә. Уның ҡулында осона ҡыҙыл сүҡ бәйләнгән сыбыртҡы була. Ул ҡунаҡтарҙың арҡыһына сыбыртҡы менән еңел генә һуғып ала, шуға ла был ашты атамаһы - сыбыртҡы ашы (ите), хуш ашы, ҡайтыр ите.

*- Һай-һайт, һай туҙә!*
*Әй, ҡоҙалар, ҡоҙалар,*
*Ай майҙы ашап бөттөгөҙ,*
*Һарыһын да бөтөрҙөгөҙ,*
*Инде ҡайтып китегеҙ,*
*Һай-һайт, һай туҙә!* - тип, хужалар таҡмаҡ та әйткән.

Ә ҡоҙалар, шаяртып, уларға шулай тип яуаплай:

*- Һайт-һайт, һайтылдама,*
*Сыбыртҡыңды ла төшөр.*
*Бына тағы һумлыҡ тағам,*
*Тиҙерәк итеңде бешер.*

Был аш ваҡытында ҡоҙалар тағы үҙ-ара бүләктәр бирешкән. Ҡайһы бер урындарҙа көрәгә ябыу йолаһы үткәрелгән.

Аш ашалғас, ишеккә ҡулына оҙон һуйылдар тотҡан ике кеше баҫҡан. Һуйылдың осона йөнлек тиреһенән тегелгән муҡсайҙар - сермә бәйләнгән була. Ҡоро сыҡһаң, ҡот китә, тип, ҡунаҡтар унда аҡса, башҡа бүләк һалып сыҡҡан. Урамда ҡымыҙ, буҙа йәки бал менән һыйлағандар, был йола хуш аяғы тип аталған. Кейәүҙең әсәһенә ҡоҙағый туҫтағы алып килгәндәр, ул эсемлекте эсеп, туҫтаҡты үҙенә алырға тейеш булған. Ҡоҙағый артына ҡарамайынса, сәк-сәк, кәнфит, тәңкәләр ташлаған, был кәләш нәҫеленең ҡото китмәһен өсөн эшләнгән. Ошо уҡ маҡсат менән ҡапҡаға ит киҫәге бәйләгәндәр. Ҡайһы бер осраҡтарҙа оҙатып ебәргән төп ҡоҙаларҙы арттарынан ҡыуып етеп, ҡоҙалыҡтан төштөгөҙ инде, хәҙер ҡунаҡ булығыҙ, тип, тағы бер тәүлек һыйлағандар.

Ҡунаҡтар менән өйҙөң ҡото китмәһен өсөн урамдан ботаҡтар, таптар индереп утҡа яҡҡандар. Ҡунаҡтарҙан ҡалған һыйҙы ашау серге ҡағыу, балтыр тарау йолаһы тип атала. Бер нисә көндән кәләштең әхирәттәрен ҡарта ашына саҡырғандар. Уларҙы ҡарта, ҡарын менән һыйлағандар, унан һуң ҡыҙҙар һәм йәш ҡатындар кәләшкә бирнә әҙерләргә ярҙам иткән.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион уҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК...

## һүҙҙә түгел, күҙҙә сағыла

**(Башы 5-се биттә).**

"Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты милләттәштәребеҙҙең үҙенсәлекле мәҙәниәтен, телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә тейешле шарттар тыуҙырырға тырыша. Ләкин был республиканың дәүләт органдары тарафынан һәр яҡлы ярҙам булғанда ғына мөмкин, - тип белдерҙе Румил Аҙнабаев. - Был йәһәттән республикала төрлө дәүләт программалары һәм башҡа хоҡуҡи акттар ҡабул ителгән. Үкенескә күрә, улар тулы ҡеүәтенә эшләмәй йәки формаль рәүештә генә иҫәпкә бар. Мәҫәлән, 2008 - 2017 йылдарға иҫәпләнгән "Рәсәй Федерацияһы башҡорттары" дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу буйынса һуңғы йылдарҙа бер генә ултырыш та уҙғарылмаған. Рәсми органдарға эшләнгән эштәр буйынса отчет биреүҙәрен һорап яҙған хатҡа килгән яуаптар түбәндәге картинаны тыуҙыра: 2009 - 2013 йылдарҙа атап үтелгән дәүләт программаһы БР Мәҙәниәт министрлығы буйынса 36 процентҡа ғына үтәлгән, йәғни 68 млн 445 мең һумға; БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы буйынса - 4,5 миллион һумға; БР Фәндәр академияһы буйынса - 0,156 миллион һумға; БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы буйынса - 7,516 миллион һумға; БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары министрлығы буйынса - 8,407 миллион һумға; "Башҡортостан" Дәүләт телерадиокомпанияһы буйынса - 10,93 миллион һумға; БР Территориаль үҫеш буйынса министрлығы тарафынан - 117, 7 миллион һумға; БР Башҡортостан Статистика идаралығы буйынса - 1, 88 миллион һумға; БР Сәнәғәт һәм инновация сәйәсәте буйынса министрлығы тарафынан - 20, 24 миллион һумға; БР Ауыл хужалығы министрлығы буйынса - 0, 8 миллион һумға; БР Төҙөлөш һәм архитектура министрлығы буйынса - 115 миллион һумға; Өфө ҡалаһы хакимиәте буйынса 2, 3 миллион һумға (барлығы 357 млн 874 мең һум) финансланып етерелмәгән. Бөгөн күп проблемаларҙы аҡса хәл иткән, республика, Рәсәй Хөкүмәте етәкселәре отчет һайын бюджеттарҙың социаль йүнәлешле булыуын һәм барлыҡ программаларҙың тулыһынса үтәлешен һыҙыҡ өҫтөнә алған заманда, "Рәсәй Федерацияһы башҡорттары" программаһының ярымйорто финансланыуы ғына аңлашылмай. Әллә һаман да етәкселектең матур һүҙҙәренә ышанабыҙ һәм түҙемле генә көтөп, тейешлеһен һорай белмәйбеҙ, әллә бөтөнләй һорамайбыҙ. Ә һорамаған бала ас ҡала...

Икенсе яҡтан, илһөйәрлек тойғоһон тәрбиәләү өсөн, бер яҡтан, аҡса кәрәкмәй ҙә кеүек. Ләкин, мәҫәлән, милли батырыбыҙҙың юбилейы айҡанлы Эстониялағы "Ағиҙел" башҡорт мәҙәни йәмғиәте китап нәшер итә икән, уны ҡоро теләк менән генә тормошҡа ашырыу мөмкин түгел. Йәки Ырымбур, Һамар башҡорттары үҙҙәренең гәзиттәрен, һамарҙар хатта журнал сығара икән - был да ошо төбәк башҡорттарының милли уҙаһын, рухын күтәреүсе бер сара түгелме? Шул уҡ ваҡытта милләттәштәребеҙ был эште әүҙем, илен, телен, тарихын яратыусы илһөйәрҙәр иҫәбенә, бағыусылар аҡсаһына башҡара, ә программала ҡаралған финанстар экономиялана. Мәктәптәрҙе ябып - балаларҙа, программаларҙы тулыһынса финанслмайынса милләттәрҙә экономиялайбыҙ. Ирекһеҙҙән, хәҙерге заман егеттәренең әрме хеҙмәтенә барырға теләмәүен дә аңларға мөмкин: элек ир-ат тыуған илгә бурысын хәрби хеҙмәт менән ҡайтара ине, хәҙер улар бер кемгә лә бурыслы түгел. Ә алмаған бурысты кемдең түләгеһе килһен?

Бында тағын да Мәхмүт Сәлимовтың сығышына мөрәжәғәт итке киләм. Ул Ростов өлкәһендә йәшәүенә ҡарамаҫтан, улы Дамир менән "Төньяҡ амурҙары" Хәрби-реконструкция клубының 1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡиғаларына арналған сараларында әүҙем ҡатнаша һәм юл сәхифәләрен брошюра итеп баҫтырып тарата. Был да үҙенә күрә патриотлыҡты пропагандалауҙың бер сағылышы.

Ғөмүмән, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының был ултырышы ватансыллыҡ тәрбиәләүҙең барлыҡ аспекттарына ла мөрәжәғәт итте, тиергә мөмкин. Сығыш яһаусылар ниндәй өлкәгә генә ҡағылмаһын: тарихмы, мәҙәниәтме, туризм өлкәһеме һ.б. - уларҙың телмәр осо барыбер ҙә тыуған ерҙе яратыуға, уны ҡәҙерләүгә, һаҡлауға, уның данын арттырыуға барып ялғанды.

Шулай уҡ ултырышта яҡын сит илдәрҙә йәшәүсе һәм Башҡортостанға күсеп ҡайтырға теләүсе йәки ҡайтып та гражданлыҡ ала алмаусылар мәсьәләһе күтәрелде, Башҡортостандан ситтә йәшәүсе милләттәштәргә тиндәр араһында тиң булып йәшәргә ҡамасаулаған ҡайһы бер кире күренештәр ҙә телгә алынды. Мәҫәлән, Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Тәлғәт Хәйеров һәм өлкәнең район-ҡалалары башҡорттары ҡоролтайҙары рәйестәре белдереүенсә, улар быны бер нисә ай инде өлкә башҡорттары ҡоролтайы ултырышы үткәреп, эште яйға һала алмай ҡаңғыра. Башҡарма комитет рәйесе вазифаһынан бушатыуҙарын һорап, үҙе ғариза биреп киткән элекке рәйес ни сәбәптәндер ҡоролтайға яңынан ҡайтырға булған һәм әлеге көндә уның эшендә ҙур кәртәләр тыуҙыра, башҡаларға эшләргә ҡамасаулай. Ошо ҡаңғырыҡ, әлбиттә, Силәбе өлкәһе башҡорттарының рухына ла, тормошона ла арыу ғына йоғонто яһаған. Был хаҡтағы ентекле һөйләшеүҙән һуң, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты етәкселәре мәсьәләне яйға һалыу буйынса эш башлаиы.

Ултырыштың икенсе көнөндә Салауат районында уҙған "Салауат йыйыны" иһә сараның кульминация өлөшө булып торҙо, тиергә мөмкин. Сөнки Башҡортостанда йәшәүселәр өсөн һәр сара, һәр ваҡиға шулай булырға тейешле тип ҡабул ителеп, беҙ йылдан-йыл юғарыраҡ кимәлде көтһәк, шуны талап итһәк, сит өлкәләрҙә, сит илдәрҙә йәшәүсе милләтәштәребеҙ өсөн бындай байрамдар - рух байрамы булып тора, уларға сит мөхиттә үҙ асылын һаҡлап ҡалыу ғына түгел, уны йәш быуынға тапшырыуға көс-дәрт өҫтәй. Ошоно раҫлап, Ялта ҡалаһынан килгән, Ҡырымдың "Иҙел - Урал" Башҡорт мәҙәни үҙәге етәксеһе Даларис Имелбаев шулай тине: "Салауат йыйыны" беҙҙе берләштерә һәм яҡынайта. Әммә көндәлек тормош гел йыр-бейеүҙән генә тормай. Шағир әйтмешләй, башҡорт булып һин ситтә йәшәп ҡара. Беҙгә күп һынауҙар үтергә тура килде һәм килә, ләкин беҙ туғанлыҡ хистәре менән, берләшеп йәшәйбеҙ. Күптән түгел генә Рәсәйҙең 82-се төбәгенә әйләндек. Ҡоролтайҙың илһөйәрлек темаһына арналған семинарында төрлө тарафтарҙан килгән милләттәштәребеҙ менән аралашып, проблемаларҙы нисек хәл итеү юлдары буйынса фекер алыштыҡ, ҡаҙаныштарыбыҙ менән бүлештек. Салауат Юлаев тураһында Эстонияла донъя күргән китапты күреп ҡыуандыҡ. Салауат Юлаев - беҙҙең милли геройыбыҙ. Ләкин уның тураһында Протазанов төшөргән кинофильмдан башҡа кино юҡ. Башҡорт йәмәғәтселеге батырыбыҙ хаҡындағы яңы башҡорт киноһының төшөрөләүен көтә.Салауаттың рухи мираҫын дауам итеп, был тормошта изге эштәр ҡылып йәшәйек. Уның үткән юлы беҙҙең өсөн азатлыҡ юлы булып тора, халыҡты киләсәктә тағы ла яҡшыраҡ йәшәргә өндәй".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр милләттең әпкәләйҙәре бар, һәм үндайҙарға патриотлыкты көсләп һеңдереү ҙә мөмкин түгел. Илһөйәрлектең, ватансыллыҡтың бөтөн кешегә лә тап килгән аныҡ ҡына рецебы юҡ. Ул рух, намыҫ, ихтыяр көсө булып, моғайын да, тыуғанда уҡ әсә һөтө менән һалыналыр. Һәм ватансыллыҡ, илһөйәрлек, нигеҙҙә, юғары трибуна артынан яңғыраған һүҙҙәрҙә түгел, оҫҡонланып торған күҙҙәрҙә сағыла икәне лә раҫ...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**



Сарала ҡатнашыусы бер төркөм.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ҠОШ СӨЙӨП ҺУНАР ИТЕҮ

**Халҡыбыҙҙың боронғо һунар төрө менән тарих фәндәре кандидаты Мирза Ғизетдин улы МУЛЛАҒОЛОВ таныштыра.**



Ҡош ҡулға бер аҙ өйрәнгәс, уны һунарға өйрәтә башлағандар. Быны өсөн һунарсы ҡошто таяҡҡа ҡуя ла, үҙе өсдүрт аҙымға алға китә. Бер нисә тапҡыр һыҙғырып, ул бөркөткә ит киҫәге күрһәтә. Ас ҡош шунда уҡ хужаһының һуҙылған ҡулына осоп килә һәм ит киҫәген ала. Йыш ҡына беренсе тапҡырҙан был килеп сыҡмаған, ләкин ҡоштоң янына ит алып барып биреү тыйылған. Сөнки ул саҡта йыртҡыс ҡош бер ҡасан да һунарға өйрәнмәйәсәк икәнен оҫталар яҡшы аңлаған. Өйрәтеүҙең башланғыс этабы үткәс, һунарсы яйлап үҙе менән ҡош араһындағы араны алыҫлаштырған. Хәҙер инде эйәләштереү эше йорт ихатаһында барған, ҡошто кәртәнең бер һайғауына ултыртҡандар. "Был эште һунарсы ҡош уның һыҙғырыуына күнеп, беренсе сигнал буйынса үҙенең ҡулына килгәнсе бик күп тапҡырҙар эшләгән".

Һунарсы ҡошҡа биреләсәк сей итте майҙан һәм һенерҙән таҙартҡан һәм һыуыҡ һыуҙа сылатҡан. Йәйләп уның көндәлек ашау нормаһын кәметә барғандар, ул ябыҡһын өсөн ашатыуҙы өс тапҡырҙан ике тапҡырға ҡалдырғандар. Был йыртҡыс ауырлығын юғалтҡанға ҡәҙәр дауам иткән. Әгәр ул һимерә башлаһа, майһыҙ иткә күскәндәр. Ныҡ ябыҡһа, уны ҡырағай йәнлек, ҡош, бәләкәй хайуандарҙың ите менән туҡландырғандар. Әлшәй районынан Абдулла Аҙнабаев һөйләүе буйынса, был яҡтарҙағы һунар ҡоштарын өйрәтеүсе Йәғәншә Мөхәмәтшин өйрәтелгән бөркөттөң физик хәлен яҡшы итеп тотоу өсөн уға йомран ите биргән.

Һунар алдынан һунарсы ҡошто осорға өйрәтеп, ашатмай һәм йоҡлатмай йонсотор булған. Һунынан ул эт толобон алып, уға ит бәйләп, бүрәнәгә ныҡытҡан. Күпмелер ваҡыт бөркөттөң күҙҙәрен ҡаплап һәм уны ас көйөнсә тотоп, ҡошто ошо эт толобо ҡуйылған ҡураға сығарған. Бөркөттөң күҙҙәрен асҡас, ул ҡош ҡаптырғысты күреп, "ҡорбаһына" ташланған, тәрән тырнаҡтарын батырып, уның итен ашай башлаған. Был эш бер нисә тапҡыр ҡабатланған. Билдәле булған мәғлүмәттәр буйынса, был ҡош өйрәтеү операцияһын тере эттәрҙә лә эшләгәндәр.

С.Т. Аксаков һүҙҙәренә ҡарағанда, башҡорттар бөркөттө эйәрҙең ҡашына ҡағылған таяҡта йөрөткән. Һунарсының иптәштәре аҡландан ҡуян йәки төлкөнө ҡыуып сығарған. Һунарсы, ҡырағай йәнлекте күргәс тә, бөркөттө күккә сөйгән. Йыртҡыс ҡош, бейеккә күтәрелгәс, ҡорбанына уктай ташланған. Был процесс И. Казанцевтың тикшеренеүҙәрендә яҡшы күрһәтелгән. "Һунарсы ебәргән бөркөт, йәнлектең һиғеҙгүҙенә ултырып, тәрән тырнаҡтарын ҡаҙап, ҡорбанының башына һәм күҙҙәренә суҡышының көслө һуғыуҙары менән йәнлекте үлтермәнә лә, уны ныҡ яралай, һунарсының ихтыярына бирә", тип яҙа тикшеренеүсе. Килеп еткән һунарсы хәлһеҙләнгән йәнлекте һуғып үлтергән, ә бөркөттө үлтерелгән йәнлектең итенән бер өлөш алып һыйлаған.

Алдан әйтеүемсә, XIX быуатта - XX быуат башында башҡорттар бөркөт менән ҡырағай хайуандарға әҙ һунар итәләр. Шул уҡ ваҡытта ҡош сөйөү башҡорттарҙа бөтә барыуға ҡарамаҫтан, ҡырағай ҡоштарҙы ҡулға эйәләштереү, һунарға өйрәтеү, улар менән кәсеп итеү бөтмәй әле. Киреһенсә, әйтелгән осор һунар ҡоштарын һатыу кәсебенең киң таралыуы менән характерлана. Тап ошо ваҡытта тау башҡорттары ҡанатлы йыртҡыс балаларын табып өйрәтеү менән шөғөлләнһә, дала башҡорттары уны һатыуҙа ҡатнаша. Ырымбур ҡалаһының һәм Ор ҡасабаһының урманлы райондарҙан йыраҡ булыуы сәбәпле, ҡоштарҙы ауыр юл шарттарында һатырға йөрөтөү ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Шуға күрә башҡорттарҙың мөрәжәғәте буйынса Баймаҡ районының Юлыҡ ауылында һатыу эшен ойоштороу яйға һалына. Йәрминкә көндәрендә Юлыҡта йыртҡыс ҡоштарҙы һатыу өсөн махсус рәттәр эшләй. Бында төрлө яҡтарҙан, башлыса Урта Азия, Ҡаҙағстан далаларынан сауҙагәрҙәр, һунарсылар килә. Бер сығанаҡта йәрминкә көндәре тураһында: "Иртән йәрминкә йәнлөндә. Бында башҡорт телмәре өҫтөнлөк итә, ләкин урыҫ, татар, мордва, ҡаҙаҡтарҙың һөйләшкәне лә ишетелә. Ә йыртҡыс һунар ҡоштары рәтендә үзбәктәрҙе, төркмәндәрҙе күрергә мөмкин. Андижандан - үзбәктәр, Эмба йылғаһынын үренән ҡаҙаҡтар һунар ҡоштары алырға килгәндәр", - тигән юлдарҙы табабыҙ.

Алдан әйтеп китеүебеҙсә, башҡорттарҙың бөркөт менән һунар итеү өсөн мөмкинлектәре булһа ла, һунарҙың был төрө таралып китмәй. Быны сәбәптәрен А. Игнатович менән Г. Н. Симаков үҙ хеҙмәттәрендә билдәләп китә. Башҡорттар өсөн бөркөттәрҙе йәрминкәләрҙә һатыу иҡтисади яҡтан күпкә килемлерәк була. Өйрәтелгән ҡоштарҙы икмәккә алыштырған осраҡтар әҙ булмай. Мәҫәлән, сауҙагәрҙәр ике бөркөт өсөн ике йөк бойҙай бирәләр. Бер бот арыш оно баҙарҙа 15 тин тороуын иҫәпкә алғанда, ҡош өйрәтеүсе бер ҡоштан 20 һум аҡса эшләй. Был бер центнер икмәк хаҡынан ҡиммәтерәк була. Бер ҡош хаҡына 80 бот бойҙай оно алырға була. Бына ни өсөн һунарға өйрәтелгән йыртҡыс ҡоштар, иң тәүҙә бөркөттәр, башҡорттарҙың башҡа халыҡтар менән сауҙа мөнәсәбәттәрендә мөһим урынды алып тора. П. Небольсин исемле кеше: "Урмандарҙа йәшәгән башҡорттар, бөркөт һәм ыласындарҙы тотоп, уларҙы һунарға өйрәтеп, беҙҙең таможняны үткән бай ҡырғыҙҙарға һәм Урта Азия сауҙагәрҙәренә һата", - тип яҙа.

Башҡорттар үҙ тауарҙары менән Ҡаҙағстан, Урта Азия далаларына ла йөрөй. Рәсәй һәм ҡаҙаҡ тарихи сығанаҡтарында ошоға дәлилдәр табабыҙ. Мәҫәлән, ҡырағай ҡоштарҙы эйәләштереүсе һәм өйрәтеүсе тигән дан алған үҫәргән башҡорто, данлыҡлы Мәмбәттен улы Мөхәмәтшәриф бөркөттәре менән далаларға барып һатыу иткән. Ғөмүмән, өйрәтелгән Урал бөркөттәре Ҡаҙағстан менән Урта Азиянан тыш, Көнбайыш һәм Көньяҡ Себер халыҡтарында, Ҡытайҙа, Монголияла, Үҙәк Азияла ла "һунар итә".

Шулай итеп, ҡош һатыу кәсебе үҫеүе арҡаһында башҡа тармаҡтар ҙа үҫешә. Бигерәк тә боронғо кәсептәр тергеҙелә. Бынан тыш, ҡош кәсепселеге иҡтисади мөнәсәбәттәрҙең үҫешенә лә үҙ ролен индерә, бигерәк тә ауыл кешеләренә ярҙам була был. Ләкин алда билдәләгән сәбәптәр арҡаһында бөркөттәр һаны ла кәмей башлай, ә ҡоштарҙың хаҡы арта. Бер аҙҙан был кәсеп төрө тарихта ғына тороп ҡала.

Ҡош сөйөү - башҡорттарҙың боронғо шөғөлө. Был турала кәмендә ике факт һөйләй. Беренсенән, ҡайны бер башҡорт ырыуҙарында һаҡланған боронғо ғөрөф-ғәҙәт - кәләш алырға тейешле егеттән, өйләнер алдынан, ҡырағай ҡошто эйәләштереп, уны һунарға өйрәтергә тейешлегенән ғибәрәт йола. Икенсенән, халыҡтағы ҡош, бигерәк тә бөркөт культы, башҡорт телендә ҡош сөйөүгә һәм ҡырағай ҡоштарға бәйле терминдарҙың, шулай уҡ топонимик исемдәрҙең күп кенә булыуы.

Башҡорттар быуаттар дауамында был һөнәр менән шөғөлләнеүҙәре арҡаһында ҡырағай ҡоштарҙы тотоуҙа һәм өйрәтеүҙә ҙур тәжрибә туплай. Улар ҡоштарҙың экологияһын һаҡларға тырыша. Мәҫәлән, ҡоштарҙы алған саҡта бер оянан бөтә себештәрҙе лә алмайҙар, берәүҙе алыу менән генә сикләнәләр. Бөркөт себештәрен ояла ташлап ҡалдырып китмәһен өсөн бар һаҡлыҡ ҡағиҙәләрен үтәйҙәр.

Ҡырағай ҡошто ҡулға эйәләштереү, уны һунарға өйрәтеү башҡорттарҙа ошо шөғөл менән мауыҡҡан башҡа халыҡтарҙыҡы менән бер үк булған. Ләкин башҡорттарҙың себештәрҙе ҡаяла урынлашҡан оянан алыуҙары үҙенсәлекле. Себештәрҙе ошо ысул менән алыу һирәк саҡта ғына уларҙың үлеменә килтергән. Сағыштырыу өсөн ҡаҙаҡтарҙың ҡош балаларын ояларынан нисек итеп алыуҙарын ҡарайыҡ. Улар ҡаяла урынлашҡан ояға тауҙың түбәһенән таштар тултырылған бизрә төшөргәндәр. Бизрә оя менән тиңләшкәс тә, уны тирбәтә башлағандар. Бәләкәй бөркөттәр, тауыштан ҡурҡып, ояларынан аҫҡа ҡолаған. Аҫта уларҙы кешеләр тотоп алған. Был ысул хәйләлерәк күренһә лә, ул ҡоштар өсөн бик насар йоғонто яһай. Беренсенән, ошондай ысул менән ҡурҡытылған бәләкәй ҡошсоҡта ҡурҡыу эҙе ғүмерлеккә һаҡлана, ҡаянан ҡолап төшкән себештәрҙең дә бөтәһе лә тере ҡалмай, тере ҡалғандары ла яралана. Шуға күрә лә был ҡоштар һунарсы булараҡ бер аҙ ҡайтыш булалар. Ошо сәбәпле, һаҡ ысул менән алынған башҡорт бөркөттәре һунарсылар араһында яҡшы баһалана.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 26-27-се һандарҙа).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Йорт эсендәге иң кәрәкле йыһаз булып урындыҡтар - стенаны алып торған, бейеклеге 40 - 50 сантиметр, киңлеге 1,5 метр (һүрәттәр) булған ағас түшәмә - иҫәпләнә. Урындыҡ өҫтөнә кейеҙ түшәлә, уның аҫтына ҡайны берҙә септә, ҡамыш септә йәки екән септә һалына. Кейеҙ өҫтөнә балаҫ йәки келәм йәйелә. Урындыҡ өҫтөндә ҡабырға яҡта төрлө кәрәк-яраҡ һалынған һандыҡ ултыра, уның өҫтөнә кейеҙ, келәм, түшәк-мендәрҙәр тау итеп өйөлә һәм стенаға түшәк таҫмаһы менән нығытылып ҡуйыла. Ишеккә ҡаршы яҡта булған төп урындыҡтан тыш ҙур өйҙәрҙә ҡабырға яҡ урындыҡтар ҙа бар. Башҡорт йорттарында башҡа йыһаз булмағанлыҡтан, урындыҡ йоҡлау ғына түгел, ашау урыны булып та хеҙмәт итә. Ҡайны берҙә урындыҡ өҫтөнән тимерсыбыҡ йәки ҡалын бау һуҙылып, уға шаршау эленә һәм ул төнгөләккә урындыҡты бүлеп тора. Бынан тыш, урындыҡ өҫтөндә, түбәнән тиҫтә сантиметр аҫтараҡ урҙа ҡуйыла һәм уға тундар, башҡа кейем-һалым эленә. Бындай урҙа берәү генә түгел, икәү ҙә булыуы мөмкин һәм улар урындыҡ буйына түгел, ә уға арҡыры эшләнелә.







Муллаларҙа һәм байҙарҙа урындыҡтың алғы яҡ өҫкө мөйөшөндә мосолмандарҙың изге урындары (Мәккә, Мәҙинә һ.б.) төшөрөлгән литографиялар урынлаштырыла. Шунда уҡ, кәштәләргә изге китаптар ҡуйыла, эргәһендә сөйгә сәлдә, намаҙлыҡ эленә. Стеналарға обойҙар ҙа йәбештерелмәй, улар аҡланмай ҙа. Улар сигелгән таҫтамалдарҙан башҡа нәмә менән биҙәлмәй. Хәлле башҡорттарҙа стеналарҙың бер яғы буйында өҫкө яғына быяла ҡуйылған шкафта һауыт-һаба, ҡиммәтле ҡама йәки ҡамсат бүректәр һаҡлана. Башҡорттарҙа өҫтәл һәм ултырғыстар бик һирәк күренеш. Әгәр ҡунаҡ өйөндә урындыҡ булмаһа, кейеҙ һәм келәмдәр иҙәнгә түшәлә. Шунда ултыралар, шунда йоҡлайҙар. Йыш ҡына йортто ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар яғына бары тик шаршау ғына бүлеп тора. Әгәр йорт ҙур икән, өй алдынан ике ишек ҡуйылып, уның береһенән - ир-ат яғына, икенсеһенән шаршау артына - ҡатын-ҡыҙ яғына инергә мөмкин.

Ишектең бер яғындағы мөйөшкә, бик һирәк ике ишек араһына мейес сығарыла. Уның иң ябайы булып сыуал иҫәпләнә. Ҡайны берҙә ул ваҡытлыса торлаҡтағы кеүек бик ябай була. Бик йыш камин, усаҡ һәм мейес бергә сығарыла (һүрәт). Ул түбәндәгесә эшләнелә: өй мөйөшөндә 1,2х1,5 метрлыҡ ер ҡаҙыҡтар менән уратып алына. Ҡаҙыҡтарға тал үрелә һәм стена менән ситән араһындағы бушлыҡҡа балсыҡ тултырыла. Бейеклеге 30 сантиметр булған көлдәксә барлыҡҡа килә. Уға мейесле сыуал һәм ҡаҙанлы усаҡ сығарыла (һүрәт).





# ЭШҠЫУАРЛЫҠҠА БАЙЫҒЫУ

**Эшҡыуарлыҡты беҙҙә йыш ҡына дөрөҫ аңламайҙар. Уны башлыса байығыу, "оҙон аҡса" эшләү алымы тип иҫәпләйҙәр. Ә шулай ҙа, эшҡыуарлыҡ һөнәр-шөғөлмө, әллә йәшәү рәүешеме? Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеү өсөн ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк? Киләсәктә ниндәй өлкәлә үҙ эшеңде асыу отошлораҡ буласаҡ? Һәм, ахыр сиктә, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә башлар өсөн башланғыс капиталың булыуы, йә кредит алыу мотлаҡмы? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап табыу маҡсатында беҙ эшҡыуарҙар - сығышы менән Әбйәлил районы Ҡушый ауылы уҙаманы Даян МӨХӘМӘҘИН менән тамырҙары Ҡырмыҫҡалы районынан булған Фәнис ӘЛМӨХӘМӘТОВты әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

**▸ Бөгөн күп кенә йәштәр юғары уҡыу йортон тамамлай ҙа, үҙ һөнәре буйынса эш таба алмай ҡаңғыра, тапһа ла, эш хаҡы менән риза булмай, икенсе эш менән шөғөлләнергә мәжбүр була. Һуңғы йылдарҙа бер-нисә дипломға эйә булып та, һөнәре буйынса түгел, ә башҡа аҡсалыраҡ урында хеҙмәт итеүселәр күбәйҙе. Әлбиттә, уңышлы ғына итеп үҙ эшен - шәхси предприятиеһын асыусылар ҙа етерлек. Әммә уларҙың күпселеге, ахыр сиктә, һалымдарҙы, йә башҡа ҡаршылыҡтарҙы йырып сыға алмайынса, ябыла тора. Ә һеҙ үҙ эшегеҙҙе нисек, ниҙән башланығыҙ?**

**Д. Мөхәмәҙин:** БДУ-ның тарих бүлеген тамамлағас, минең башымды: "Тарих уҡытыусыһы булып эшләһәм, киләсәктә ғаиләмде аҫырай, балаларымды уҡыта алырмынмы?" - тигән икеле уй биләп алды. Әмәлгә ҡалғандай, ағайымдың дуҫы Әхмәр ағай үҙ фирмаһына менеҙәр ярҙамында уларға буяу ягам. Футболкаларҙы күмәртәләп алмай инем, сөнки ул ваҡытта шәхси эшҡыуарлыҡ закон тарафынан тыйыла, уны боҙған кешеләрҙе иркенән мәхрүм итәләр ине. Футболкаларға ҡытлыҡ булмаһа ла, буяуҙар табыуы, айһай, ҡыйынға төшә торғайны. Мин уларҙы ҡаланың барлыҡ оҫтаханаларынан һатып ала инем. Шулай итеп, ул йылдарҙа



үҙебеҙҙең йөк һәм еңел автомашиналарыбыҙ барлыҡҡа килде. Һатыу күләме артыу менән һалым да арта бит инде. Беҙ үҙебеҙҙең килемебеҙҙең бер тинен дә йәшермәйенсә, отчет алып барҙыҡ. Шулай бер мәл һалымыбыҙ килемебеҙҙән артығыраҡ булды ла ҡуйҙы. Ойошманы тарҡатырға, "Камаз"дарыбыҙҙы, еңел автомобилдәребеҙҙе, башҡа мөлкәтебеҙҙе һатырға тура килде. Ойошманы япҡас, коллегаларҙы эштән бушатыр алдынан кемгә - еңел автомобиль, кемгә фатир өләшеп сыҡтым. Сөнки мин ул кешеләр өсөн яуаплы инем. Үҙемә бер ни ҙә ҡалмаһа ла, хеҙмәткәрҙәремде буш ҡалдырманым. Бизнесымдың ябылыуын бик ауыр кисерҙем. Бер-нисә йыл бер эшкә лә ҡул барманы. Ярай әле, ғаиләм мине аңланы, миңә көс бирҙе.

Артабан тәҙәләш, ремонт өлкәһен яулап ҡарарға булдым. Бер-нисә кешене яллап, фатирҙар ремонтлау эшенә тотондоҡ. Ләкин, әлеге лә баяғы, хеҙмәткәрҙәр өсөн яуаплылыҡ алғым килмәүе, өҫтәүенә, уларҙың эшенең сифаты менән ҡәнәғәт булмаған клиенттар алдында оятҡа ҡалыуым арҡаһында эшселәрҙе кәметә башланым. Эш рәтен белгән оҫталар бер ҡасан да кешегә ялланып эшләмәй, кешегә "урта ҡул" эшселәр генә яллана. Ҡыҫҡаһы, ҡатыным менән икәү генә эшләй башланыҡ. Был эштә әллә ни күп аҡса ла эшләп булмай, уның ҡарауы, һалымы ла аҙыраҡ.

**▸ Кредит алмай ғына бизнес башлау мөмкинме? Ошо турала фекерҙәрегеҙ менән дә уртаҡлашып үтегеҙ әле. Ғөмүмән, кредит алырға кәрәкме, йәки уны ниндәй шарттарҙа алырға була?**

**Ф. Әлмөхәмәтов:** Мин кредит яҡлы түгелмен. Тормошта һинең менән нимә генә булмауы мөмкин: йә ауырып китерһең, йә бизнесың килеп сыҡмаҫ. Шуға, кредит менән булышмаҫҡа тырышырға кәрәк. Әгәр кемдәндер үтескә һорап тороу мөмкинлегең бар икән, аҡсаны дуҫтарҙан алып тороу яҡшыраҡ. Дуҫтарың менән һөйләшеп, аҡсаны кире ҡайтарыуҙы ниндәйҙер ваҡытҡа күсереп тора алаһың. Дөрөҫөн әйтеп, яҡшылап аңлатһаң, дуҫың һине аңлаясаҡ, тип уйлайым. Дуҫтарың күп икән, тимәк, тағы ла яҡшыраҡ: тың мөлкәте булып иҫәпләнә. Һин күсеп йөрөү мөмкинлегеңде юғалтаһың. Ә бизнеста хәрәкәт талап ителә. Мәҫәлән, һиңә ҡапыл ғына нимәнелер (мәҫәлән, машинаңды) алмаштырырға кәрәк булды икән ти, һин уны алмаштыра алмайһың. Шулай итеп, бизнесың ййлай, тотҡарлана.

**Д. Мөхәмәҙин:** Эйе, шуның өсөн дә мин оҙайлы кредит алмайым, ә ҡыҫҡа ваҡытҡа иҫәпләнгәнен генә алам. Ниндәй генә суммала алһам да, мин уны бер йыл эсендә ҡайтарып бөтәрәм.

**Ф. Әлмөхәмәтов:** Ярай, тиҙ генә ҡапларлыҡ кредит алдың да, ти, ә иртәгә һин эшләгән баҙарҙы ябып ҡуйһалар, һин эшләрһең? Контейнерҙарыңдағы һатылмаған аҙыҡ-түлегеңде ҡайҙа ҡуйып бөтөрөрһөң? Әлбиттә, әгәр һин бер кемгә лә бойһонмайһың икән, һин был тауарыңдың барыһын да һатып ебәреп, икенсе бизнесҡа күсеп китә алаһың. Әгәр бизнесыңдың бер өлөшө һинең ҡулыңда түгел икән, был бик ҡурҡыныс, минеңсә. Шуға ла мин кредитҡа ҡаршымын. Кредитты бер аҙнаға, бер айға ғына алырға була. Артығыраҡ ваҡытҡа алырға кәрәкмәй ҙә. Әгәр һиңә ошо мәлдә бик ныҡ килемле, тиҙ генә үҙ хаҡын кире ҡайтара торған берәй нәмә һатып алыу өсөн аҡса кәрәкһә генә кредит алырға була.

**▸ Совет осоронда ауыл ерендә йәшәүсе бер кеше 20 тингә лотерея уйнап, еңел автомобиль отҡан, ләкин машинаһын көҙәрләмәүе, уны "егерме тинлек кенә" тип ҡарауы арҡаһында уны бер-ике йыл эсендә "иләп" тә бөтөргән, тиҙәр. Халыҡта, ҡапыл байыҡма, яйлап байыҡ, тигән әйтем бар. Ә һеҙ был фекер менән килешәһегеҙме, әллә ҡапыл байығыу эшҡыуар өсөн әллә ни насар түгелме?**

**Д. Мөхәмәҙин:** Мин үҙ эшемдә байығыу маҡсатында башланым, тиһәм, дөрөҫ булмаҫ. Иң тәүҙә ғаиләмде аҫырарға кәрәк ине, мине шул маҡсат алға әйҙәне. Тағы, ошо эште мин аҡарып сыға аламмы, тигән сәмдә көс бирҙе. Һәр көн иртән мин эшемә байығыр өсөн бармайым - ә ғаиләмдең бөгөнгө ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн барам. Шуға, эшем миңә ҡәнәғәтлек килтерә. Ә әйтемгә килгәндә, мин уның менән килешәм. Беҙҙең йәшәйеште бай йәшәү, байығыу тип атап та булмай. Әгәр кеше сит илдәрҙә ер һатып ала алһа, шул осраҡта ул кешене бай кеше тип әйтергә булыр ине. Ә минең фатирым да банктыҡы - ипотека түләйем, мин әле бай түгелмен.

Яйлап байығыуҙың нимәһе һәйбәт? Әгәр һинең ҡулыңа ҡала барыһы ла мин биҙәгән футболкаларҙа йөрөнө, тиһәм дә хата булмаҫ.

90-сы йылдар баштарында илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, алыпһатарҙар күбәйҙе. Улар алдында бер урындан икенсе урынға йөк ташыу ихтыяжы барлыҡҡа килде. Мин бер-нисә йөк машинаһын ҡуртымға алдым да, йөк ташыу хеҙмәте астым. Ләкин ул йылдарҙа юлдарҙа ошондай йөк автомашиналарына һөжүм итеп, байырға әүәҫләнгән юлбаҫарҙарҙың күбәйеүе арҡаһында, был бизнесты туҡтатырға тура килде.

90-сы йылдар аҙаҡтарында, Даян һымаҡ, беҙ ҙә алыпһатарлыҡҡа тотоноп киттек. Был эштә бер яңғыҙыңа бик ауыр буласағын аңлағанға күрә, тәү сиратта үҙемдең яныма фекерҙәштәрҙән торған төркөм туплай башланым. Уларға яңы заманға ылығып китеү зарурлығы тураһында аңлаттым: "Әгәр команда йыя алһаҡ, теләһә ниндәй ҡаршылыҡтарҙы ла үтеүе еңелләшер", - тинем. Тиҙҙән бик яҡшы белгестәрҙән тупланған командабыҙ барлыҡҡа килде. Бында кемдер мәғлүмәт туплауҙы үҙ өҫтөнә алһа, кемдер завод директорҙары менән һөйләшеүҙәр алып барҙы, кемдер башҡа эш менән булды. Ошо процестар менән үҙем идара иттем. Тәүҙәрәк эшебеҙ үҙ булмаған күләмдәрҙә атҡарылһа, көндән-көн ул ҙурайҙы, ҡеүәтләнә барҙы. Ҙур ғына автопаркыбыҙҙа

джер итеп саҡырҙы, яҡшы эш хаҡы вәғәҙә итте. Эшем шунан ғибәрәт ине: фирманың тауарын, йәғни аҙыҡ-түлек продукттарын һатам да, айырмаһын үҙемә ҡалдырам. Шулай һәүетемсә генә эшләп йөрөгәндә (2007 йылда), үҙ эшемде асырға кәрәк, тигән ныҡлы фекергә килдем. Хәҙер аҙыҡ-түлек һатыу менән үҙем шөғөлләнә башланым. Бер иптәш ҡайһы банктан кредит алыу унайлыраҡ булыуын төшөндөрөп биргәс, шул банктан 150 мең самаһы кредит алып, бизнесыбыҙҙы тағы ла киңерәк йәйелдереп ебәрҙек. Шулай итеп, халыҡ араһында "Гурьевка" тип йөрөтөлгән Киров районы баҙарында һатыу нөктәләребеҙҙе астыҡ, йөк машинаһы һатып алдыҡ. Бөгөн контейнерҙарыбыҙ һаны ун бишкә етте.

**Ф. Әлмөхәмәтов:** Һөйләгәндәрем тулыраҡ булһын һәм яҡшыраҡ аңлашылһын өсөн бәйәнемде 70-се йылдар урталарынан - үҫемдең 14-15 йәшлек үҫмер сағымдан башлағым килә. Бизнесым беҙ ул ваҡытта йәшәгән Ишембай ҡалаһында төрлө сит ил музыка төркөмдәренең исемдәре яҙылған футболкалар һатыуҙан башланып китте. Ул ваҡытта бары тик аҡ төҫтәге футболкалар ғына сығарыла, уларҙа бер ниндәй яҙыу ҙа, һүрәт-маҙар ҙа юҡ ине. Мин ҡалалағы бер-нисә фирма магазинынан 1-2 футболка һатып алам да, үҙем яһаған трафареттар, автомобиль буяй торған аэрозоль

һиңә ышаныусылар ҙа күп. Ә банк менән килешеп булмай. Сөнки банк - финанс ойошмаһы, ул ғәйәт ҙур ел тирмәне һымаҡ - туҡталып тора алмай.

Бөгөн бизнесымды янынан ойоштором да, кредит алмаҫ инем. Сөнки бизнесты башлайһың икән, һин эшең килеп сығырмы, юҡмы икәнен белмәйһең әле. Шуға, ҙур булмаған күләмле эштәрҙән башларға кәрәк. Тәүҙә килеп сығамы, юҡмы - шуны тәҫмөрләргә тырышаһың, шунан тәүәкәлләйһең инде.

**Д. Мөхәмәҙин:** Фәнис ағай хаҡлы хаҡлылыҡҡа. Әммә ҙур эшкә тотонам тиһәң, барыбер кредитһыҙ булмай. Мин дә кредит алмаҫ инем, ләкин алырға мәжбүрмен. Шулай ҙа хәҙер банктарҙың яҡшы яғы ла бар - кредит бирер алдынан улар тәьминәт залогы һорай. Бының өсөн һинең мөлкәтең булырға тейеш. Әйтәйек, мин параллель кредит алғанмын икән, минең тәьминәт залогым - машиналарым һәм страховкаланған бизнесым булыуы төп шарттарҙың береһе булып тора. Минең бизнес залогҡа ла алынған, икенсенән, страховкаланған да. Йәғни, бер-бер хәл була ҡалһа, минең предприятие страховкаланған.

**Ф. Әлмөхәмәтов:** Даян, һин үҙеңдең бар мөлкәтең залогта, тип әйтәһең. Тимәк, улар деюре һинеке була алмай - банк-

## Юҡ, ғаиләне

пыл ҙур күләмдә аҡса килеп эләкһә, һин уны нисек итеп әйләнешкә ебәрергә белмәйәсәкһең. Биш йыл элек кемдер миңә ун миллион бирәбеҙ тиһә, мин ул аҡсаны ҡайҙа итергә лә белмәҫ инем. Ә бөгөн - беләм. Шулай уҡ, әгәр бөгөн миллиард һум бирәбеҙ тиһәләр ҙә, мин ул тиклем аҡсаны ниндәй эшкә йүнәлтергә белмәй, албырғап ҡалыр инем. Сөнки әле мин ул кимәлдә фекер йөрөтә алмайым. Тағы биш йылдан был кимәлгә етермен дә, бәлки. Ошо турала һүҙ сыҡһа, йыш ҡына миңә: "Ә байҙарҙың балалары ҙур аҡсаны ла файҙалы тотона белә бит", - тип дәғүә белдерәләр. Был осраҡта ул балаларҙың ошо өлкәләге эштәр менән бала саҡтан таныш булыуын иҫәпкә алмай булмай. Ни тиһәң дә, аҡса "өйөрөлгән" урындарҙы бала саҡтан күреп үҫкәс, улар был кимәлгә беҙҙән алдараҡ барып етә.

Әйткәндәй, беҙ ҙә күп нәмәне атайыбыҙҙан күреп үҫтек. Унан алған тәрбиә арҡаһында ла бизнес өлкәһенә килгәнбеҙҙер. Атай үҙ заманы өсөн бик алдынғы ҡарашлы кеше булды. Уның яңыса фекерләүен 1973 йылда Тольятти ҡалаһына барып алып ҡайтҡан еңел автомобиле лә дәлилләй. Ул мәлдә еңел автомобилгә эйә булыусылар һирәк ине. Беҙҙең ауылда машина

*✓ Һин үҙ-үҙеңде табырға теләйһең һәм шуға ынтылып эшләйһең, кешеләр менән аралашаһың, уйланаһың, һәр ваҡыт теге йәки был мәсьәләне хәл итеү тураһында баш ватаһың.*

колхоз рәйесендә һәм бер ағайҙа ғына бар ине. Беҙ мал көттөк, ул малға ҡайҙан нисек бесән табыу, һөтөн-майын, итен ҡайҙа һатырға була икәнлеген атайҙан белеп үҫтек. Аҡсаны буш бирмәйҙәр икәнен белеүебеҙ артабан ныҡ ярҙам итте. Тимәк, беҙҙең эшҡыуарлыҡҡа атайыбыҙ нигеҙ һалған.

**Ф. Әлмөхәмәтов:** Беҙ ҙә төҙөлөш менән шөғөлләнеүгә күскәс, ҡыҙҙарыбыҙ Айгөл менән Лилиәне, улыбыҙ Илгизде йәйге каникул мәлдәрендә үҙебеҙ менән бергә эшләттек. Улар беҙгә ярҙам иттеләр. Егет кеше булараҡ, был эш Илгизгә күберәк эләкте инде. 12 йәшенән уны ошо һөнәргә өйрәтә башланыҡ. Һөнәрһеҙ ҡалмаҫ, эшләргә өйрәнер, тип уйланыҡ. Ысынлап та, уйыбыҙ дөрөҫ булып сыҡты. Илгиз юғары уҡыу йортон тамамлап, бер фирмаға эшкә урынлашҡайны, күп тә үтмәй, тырышлығы арҡаһында коллегаларының ихтирамын яуланы. Өс йыл эсендә бер-нисә тапҡыр үрләтеп тә ебәрҙеләр. Шулай итеп, мин дә уға аҡса буштан килмәй икәнен төшөндөрҙөм, хәҙер ул миңә рәхмәт әйтә.

**Д. Мөхәмәҙин:** Эйе, эшендә илке-һалҡы йөрөгән кеше ғаиләһенә лә илке-һалҡы ҡарай ул. Уның бөтөн тормошо ла шулай илке-һалҡы үтә.

**Ф. Әлмөхәмәтов:** Еңел килгән аҡса нисек еңел килә, шулай кәрәк. Эргәндә һинең менән бергә атлаған туғандарың, дуҫтарың, партнерҙарың булһа, һеҙҙең командаға бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс янамаясаҡ. Һәр кешенең иң ныҡ терәге - ул уның туғандары. Туғанлыҡ ептәре ныҡлы кешегә тормош һынауҙарын үтеүе лә ҡыйын түгел. Ундайҙар заман талаптарына ла еңелерәк яраҡлаша.

**Д. Мөхәмәҙин:** Беҙ эшебеҙҙе Таһир ағайым менән бергә башланыҡ. Һатыу эшендә Таһир ағайға еткән кеше юҡ: ул мин күрмәгән нәмәләрҙе күрә, төрлө хәлдәрҙә лә үҙенең һиҙгерлеге, тормош тәжрибәһе менән алдыра. Сетерекле хәл килеп тыуһа, уның менән килешмәгән саҡтарымда ла һәр саҡ ағайымдың кәңәшен тоторға тырышам. Ахыр сиктә, уның һүҙе гел дөрөҫкә сыға. Фәнис ағай дөрөҫ әйтте - ярҙамсың, терәгең булһа, бизнес еңелерәк бара. Әйтәйек, сығышыбыҙ менән ауылдан булғас, йыш ҡына теге йәки был сәбәп менән ауылға ҡайтып, ниндәйҙер эштәр башҡарырға, унда бер аҙ тотҡарланырға тура килә. Ағайым менән бергә эшләгәс, бындағы эштә һәр саҡ бер-беребеҙҙе алыштырабыҙ. Бер үҙем булһам, эштәремде сит кеше ҡарамағына ҡалдыра алмаҫ инем.

**▸ Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүсе кеше планһыҙ, маҡсатһыҙ йәшәй алмай, тиҙәр. Киләсәккә ниндәйерәк уйҙар ҡораһығыҙ?**

**Ф. Әлмөхәмәтов:** Хәҙер беҙ артабан үҫергә - ҡатыным менән ғаилә бизнесы асырға булдыҡ. Ҡала ситендәрәк ер алдыҡ та, быртыр унда йылытыла торған ҙур подвал төҙөй башланыҡ. Унда шампиньон бәшмәктәре үҫтерергә ниәтләнәбеҙ. Әммә был бизнесҡа бик күп аҡса һалырға кәрәк. Шуға, 120 кв. метрлыҡ йылытылған подвал төҙөү - ул бик ҙур сығымдар талап итә. Икенсе төрлө әйткәндә, тотош бер йорт, тотош комплекс төҙөгән һымаҡ килеп сыға. Кредит алмағас (бик оҙайлы проект булғас, кредит алырға теләмәйем), мин был ҡоролманы туғандарым менән үҙем төҙөйөм. Подвал янына лабораторияны, йылытыу бүлмәһен, ял бүлмәһен үҙ эсенә алған йорт та урынлаштырасаҡбыҙ. Был проектыма йыл һайын ҙур ғына суммала аҡса һалырға ниәт итәм. Балалар ҙа хәлдәренән килгәнсә ярҙам итә. Эшебеҙ яйға һалынһа, беҙ ҙә уларға ярҙам итә башлаясаҡбыҙ, улар быны яҡшы белә.

Подвалды нисек эшләйәсәгем тураһында артабан һөйләп үтәйем. Был майҙанды тулыһынса файҙаланыу маҡсатында мин подвал өҫтөнә теплица төҙөргә ҡарар иттем. Быныһы - 100 квадрат метрлыҡ теплица була инде. Ерҙең хаҡы күтәрелә бит, уны интенсив рәүештә файҙаланырға тура килә. Подвал йылытылғанға күрә, теплицаның иҙәне лә йылы буласаҡ. Өҫтәүенә, уның үҙенең йылытыу системаһы ла эшләйәсәк. Бында помидор, ҡыяр һымаҡ йәшелсәләр үҫтерергә теләйбеҙ. Былар әле минең планда ғына, быйыл мин был эште 80-90 процентҡа атҡарырға ниәтләйем. Икенсе йыл эште тамамларға ине иҫәп. Әлбиттә, ҡоролманы төҙөп бөтөү менән генә эш бөтмәй - эш башлана ғына.

Киләсәктә тағы бер система төҙөгөм килә. Минең өс балам бар, һәр береһенең үҙ ғаиләһе. Һәр ғаиләгә нимәлер һатып алырға кәрәк буласаҡ. Фатир, автомобиль, һәм башҡаһы. Ана шул сығымдарҙы ҡаплашыр өсөн ғаилә банкы төҙөгөм килә. Банк булғас, алған аҡсаны һәр кем кире ҡайтарырға бурыслы буласаҡ. Был - киләһе быуынды уйлап эшләнгән эш. Шул уҡ ваҡытта, был эшкә шул принципты ла һалғым килә: әгәр һин яҡшы эшләйһең, һинең ниндәйҙер күләмдә артыҡ аҡсаң бар һәм һин ғаиләгә ярҙам иткең килә икән, һин был банкҡа ярҙам итәһең. Һөҙөмтәлә, һәр кем быны файҙаһын күрәсәк. Ә былай банктар системаһына ҡаршымын, улар һинең арҡ-



да шундай ҙур арала ярыштырыу. Бының өсөн тәү сиратта аҡса кәрәк. Әйткәндәй, беҙҙә атты 5 саҡрымға сабыштыралар ҙа, уны "оҙон бәйге" тиҙәр. Ул оҙон бәйге түгел. Был ара - тик ҡолондар өсөн. Беҙ бәләкәй саҡта Дәүләт һәм Селиван ауылдары араһындағы 6 саҡрымға сабып, бик еңел үтә торғайныҡ. Ун ике саҡрымға тураға сабыштырғандар. Өсөнсө хыялым - фильм төшөрөү. Байыҡһам, миллиондарым булһа, Алдар батыр тураһында фильм төшөрөр инем.

**▸ Эшҡыуарлыҡ менән ғәҙеллек төшөнсәләре бер-береһе менән нисек яраша?**

**Ф. Әлмөхәмәтов:** Күптәр бизнестан да яҡшыраҡ әйбер юҡ, бизнес менән шөғөлләнһәң,

алып тороуы еңел ул, уны кире ҡайтарыуы ауыр. Ләкин мин ул сумманы тиҙ йыйҙым, ярты йыл тигәндә барыһына ла бурысымды ҡайтарып бирҙем. Ошо хәлдән күренеүенсә, эшебеҙҙе сифатлы, теүәл атҡарғаныбыҙға күрә, беҙҙең менән эш итеүсе кешеләрҙең беҙгә ышанысы ла ныҡлы булып сыҡты. Тимәк, беҙҙең эшебеҙ ғәҙел.

**Д. Мөхәмәҙин:** Эшҡыуар һәр саҡ дөрөҫтө һөйләргә һәм дөрөҫ эштәр эшләргә тейеш. Алдашҡан кеше менән эш итергә теләүселәр ҡалмаясаҡ. Һәр кеше әйткән һүҙендә торорға, эшләй алмаһа, сәбәбен аңлатырға, бурысын һуңлата икән, был турала иҫкәртергә тейеш. Күптәр, бизнеста алдашыу киң таралған күренеш икән, тип уйлай. Был дөрөҫ түгел. Алдашһаң, һинең бизнесың бармаясаҡ. Үлсәгәндә дөрөҫ үлсәмәйһең икән, был эшеңде беләсәктәр һәм һинең менән аралашмай башлаясаҡтар. Срогы сыҡҡан тауарҙы һатһаң да, шул уҡ хәл. Гәрсә, ундай хәлдәр ҙә булғылай. Бөтөн тоҡтарҙы йә ҡаптарҙы ла тикшереп бөтөп булмай бит. Һатып алыусы, тауарҙың сифатһыҙ булыуын күреп, кире ҡайтарыуы мөмкин. Һин уларҙы ҡабул итеп: "Эйе, яңылыштан шулай килеп сыҡҡан", - тип, тауарҙың хаҡын ҡайтарырға бурыслыһың. Яңыраҡ, һыуытҡыстар эшләмәүе арҡаһында тауыҡ ите боҙолғайны, мин уларҙы машинама тейәнем дә, "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһындағы вольерға йәнлектәргә алып барҙым. Хеҙмәткәрҙәр иттәрҙе ҡараны ла, ҡабул итте.

Алдашмаһаң, ғәҙел булһаң, һине һанлайҙар, хөрмәт итәләр. Әлеге ваҡытта миндә Бөрйән районынан Харис исемле тырыш бер егет эшләй. Бер көндө ул минән: "Даян ағай, мин дә үҙемдең тауарымды, мәҫәлән, күмер һатайыммы?" - тип һораны. Аҡсаһы аҙыраҡ булғас, мин уға күмер һатып алырлыҡ аҡса бирҙем. Ул эште ойоштороҙо - күмерҙе һата ла, айырмаһын үҙендә ҡалдыра. Тырыш кешегә ярҙам итке килә. Ҡасандыр ул да минең һымаҡ уңышлы эшҡыуар булып китер, минән дә юғарыраҡ үҫер, тип ышанам, һәр хәлдә, уның да күтәрелеп, аяҡҡа ныҡлап баҫып китеүен теләйем. Миндә 6 егет эшләй, бөтәһе лә ауылда тыуып-үҫкән башҡорт егеттәре. Уларҙан ике телде: рус һәм башҡорт телдәрен белеүҙе талап итәм. Һатыу эшендә бит халыҡ менән аралашыу, һөйләшеү ҙә талап ителә. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙең эштең өстән бер өлөшө аралашыу менән үтә.

# ӨСӨН КИЛӘЛӘРМЕ?

## аҫырау өсөн

еңел генә сығып китә. Сөнки, Даян әйткәненсә, аҡса килгәнен аңлау ҙа кәрәк. Аҡса еңел генә табылһа, уны ҡайҙа, нимәгә тотонорға белмәйһең. Үҙеңә, күңел асыуға тотонаһың, һәм башҡалар. Бизнестың ҡайҙа күпме аҡса һалырға тигән алгоритмы бар. Ошо алгоритмды белмәһәң, аҡсаны үҙләштерә алмайынса, туҙҙырып бөтөрәсәкһең. Аҡсаны еңел туҙҙырырға бер өйрәнһәң, яйлап ошондай йәшәү рәүешенә күнегәһең. Ә инде еңел, ҡапыл тапҡан аҡсаң бөткәс, үҙеңдең аҡсаңды ла бөтөрәһең. Шулай итеп, бизнесың "яна".

**▸ Фәнис ағай, һеҙ 90-сы йылдарҙа башлаған бизнесығыҙ тураһында һөйләгән сағығыҙҙа фекерҙәштәр төркөмө туплауығыҙ тураһында әйттегеҙ. Ошо турала ентекләберәк һөйләшәйек әле.**

**Ф. Әлмөхәмәтов:** Ысынлап та, бизнесты башлаған саҡта ошо ниәтеңде тормошҡа ашырыуға үҙеңдең, туғандарыңдың, дуҫтарыңдың инициативаһын һалырға тура килә. Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй. Инициатив төркөм барлыҡҡа килһә, нимәлер килеп сығасаҡ, тип ышанырға була. Артабан арҡаҙаштарыңды эштең асылы менән таныштырырға, көтөлгән һөҙөмтәнең өмөтлө булыуына өмөт уятырға

анда байығырға тырыша, һин уларҙың ҡолона әйләнәһең. Һин үҙеңә түгел, ә банкҡа эшләйһең килеп сыға. Балаларыбыҙ банк ҡоло булмаһын өсөн беҙҙән һуң дә үҙ эшен дауам итерлек банк булдырырға теләйем. Бының өсөн балаларыма был эштең файҙаһын һеңдерергә, бер-береһенә ярҙам итеп йәшәргә өйрәтергә теләйем.

**Д. Мөхәмәҙин:** Мин бала саҡта ат өҫтөндә үҫтем. Элек, ат өҫтөндә тыуҙым, ат өҫтөндә үлермен, тип уйлай инем. Мине иҫ белгәндә бер атҡа мендергәйнеләр, мин ул аттан 18 йәшемә етеп, хәрби хеҙмәткә алынғансы "төшмәнем". Шул саҡтар һағындыра. Шуға, минең йылҡы көткөм, бәйгеләр ойошторғом килә. Беҙҙең Ҡушый ауылы Асҡарҙан 12 саҡрым алыҫлыҡта ята. Элек Ҡоръятмаҫ тигән ерҙән ун ике саҡрымлыҡ тигеҙ урында аттар сабыштырғандар. Ат һыбайлыны ташлап китһә лә, финишҡа барып инһә, ат еңеүсе булып иҫәпләнә булған. Хәҙер улай түгел - һыбайлы ҡолап ҡалһа, атты ярыштан сығаралар. Элек аттарҙы түңәрәк буйлап сабыштырмағандар - тура һыҙыҡ буйынса ярыштырғандар. Алдараҡ әйткән күренеш - һыбайлы ҡолап ҡалһа ла, аттың ярышта ҡатнаша алыуы монголдарҙа әле лә бар. Улар аттарын 50 саҡрымғаса ярыштыралар. Унда сабышҡан балаларҙың йәше ете йәштән уҙмай. Минең икенсе хыялым - йылҡы көтөүе тотоп, башҡорт аттарын

һин аҡсала йөҙәһең, тип уйлай. Улай түгел ул. Эшҡыуарлыҡ - шул тиклем ауыр эш, ул эш кенә түгел, ә йәшәү рәүеше лә, минеңсә. Һин үҙ-үҙеңде табырға теләйһең һәм шуға ынтылып эшләйһең, кешеләр менән аралашаһың, уйланаһың, һәр ваҡыт теге йәки был мәсьәләне хәл итеү тураһында баш ватаһың.

Беҙ ҙә һәр клиентыбыҙҙы күҙ ҡараһылай һаҡларға, эште матур итеп башҡарырға тырышабыҙ. Шуға ла беҙҙе ихтирам итәләр. Бер мәл миңә ҡапыл ҙур ғына күләмдә аҡса кәрәк булды. Банктарға мөрәжәғәт итеп торманым. Уйлап-уйлап ултырҙым да: "Ҡана әле, клиенттарымдан алып торайым", - тигән фекергә килдем. Яңы идеямдан ҡанатланып, кеҫә телефонымды ҡулыма алдым. Билдәле булыуынса, телефонда исемлек алфавит тәртибендә урынлаштырылған. Исеме "А" хәрефе менән башланған, исемлектә беренсе торған тәүге клиентымдың һандарын йыйып, ни өсөн шылтыратыуым тураһында һөйләп бирҙем. Ул мин һораған сумманы бирәсәге тураһында белдерҙе. Миңә ул аҡса ни өсөн кәрәк икәнлеге тураһында һорашып та торманы. "А"-нан башланған исемле хеҙмәттәштәремә шылтыратып бөтөүгә, кәрәкле сумма йыйылып та өлгөрҙө. Бер кем дә ярҙамдан баш тартманы, расписка ла һораманы. Тәүҙәрәк тартынаңҡырап, кемдән - 5, кемдән 10 мең һораһам, иң аҙаҡҡы кешенән 50 мең һораным. Аҡса

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һөйләшеү барышында яңғыраған фекерҙәрҙән сығып, ниндәй һығымта яһарға була? Килгән ҡунаҡтарыбыҙҙың үҙҙәренән, һөйләү манераһынан сығып фекер йөрөткәндә, уңышлы эшҡыуар булыр өсөн эшлекле лә, аҡыллы ла, кешелекле лә, ғәҙел дә булыу талап ителә. Һәм, ошоларға ҡушып, тағы Даян Мөхәмәҙин һәм Фәнис Әлмөхәмәтов һымаҡ аралашыусан булыу ҙа төп шарттарҙың береһелер, тип уйланыла. Ә һеҙ был аралашыуҙан ниндәй фәһем, һабаҡ алдығыҙ?**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

***✓ Ул Асияның һәр ҡыланышын йотоп, һөйләгәндәренә ҡыйыуһыҙ ғына йылмайып баш ҡағып ултырыуҙан башҡаға эшкинмәне. Бәләкәс Сулпан да, әсәһенең тойғоларын бүлешкән кеүек, яңы "инәйен" тыңлап ҡына йөрөнө - мыжыманы.***






Ҡатындың башында хәҙер бер һорау, бар уйын, булмышын шул һорау ялмаған: ҡайҙан суррогат әсә табырға? Кемде ялларға?

Ике аҙна үҙ алдына һөҙөмтәһеҙ көйәләнгәндән һуң, башҡа сара тапмайынса, әлеге апаһына кәңәш итергә булды. Шуға ла ялды көтөп алып, нисек тә ирен эйәртмәйенсә, күрше ҡалаға юлланды. Барып еткәйне лә, апаһы телефондан эш менән сығыуын, бер ярты сәғәттән өйҙә буласағын хәбәр итте. Асҡыстың ҡайҙалығын белһә лә, Асияның буш өйгә инеп ултырырға теләге булманы һәм ул машинаһы эсендә ҡалыуҙы хуп күреп, йән-яҡты күҙәтергә кереште. Талғын көйҙәр тулҡынында тирбәлеп ойоп ултыра торғас, кинәт ҡаршы урынлашҡан бараҡтан үткәндәге таныштары килеп сыҡҡанды аңғарып ҡалды. Йәш ҡатын өсдүрт йәштәрҙәге балаһын, нишләптер, күтәреп алған. Саҡ көсө етә үҙенең. Туп кеүек кейенгән бала әсәһенән саҡ ҡына ҡайтыштыр. Нишләп ҙур баланы атлатмайҙыр?

Ҡатын бараҡтың күрше подъезына тиклем барҙы ла, шундағы эскәмйәгә ҡунаҡлап, балаһын алдына рәтләңкерәп һалды. Балаһы йоҡлайҙыр, күрәһең. Нишләп йоҡлаған бала менән сыҡты икән, йүнләп көсө лә етмәгәс? Асия был күренеште ҡыҙыҡһынып күҙәтте. Теге ҡатын да бер ергә лә ҡабаланманы, алдына ҡарап, уйға батып ултыра бирҙе.

Шул ваҡыт Асияның күңелендә шайтандар уйнаны. Ул нимә булырын белмәһә лә, нимәгәлер өмөт итеп, нимәгәлер ынтылып, машинаһынан төштө һәм был икәүгә ыңғайланы.

- Һаумыһығыҙ. - Сәләменә баш ҡағып ҡына яуапланылар. Йәш ҡатын ҡараштарын күсереп тә ҡараманы, исмаһам.

- Һеңлекәш, һин мине иҫләмәйһең, ахыры, - Асия торошона уңайһыҙланған төҫ сығарып, ҡатын йәнәшәһенә сүгәләне. Шул ваҡыт ҡына тегенеһе, иҫенә килгәндәй, ҡарашын күсерҙе.

- Һеҙ?.. Ғәфү итегеҙ... Ҡапылдан аңғармағанмын.

- Ғәйеп юҡ. Прогулкамы?

- Про...гул-ка...

Бер килке һүҙһеҙ ултырҙылар. Йәш ҡатын тынысһыҙланып шыңшыған бәләкәсен тубыҡтарында бәүелтте.

- Тшш-тшш, бәпесем... Тшш-тшшш...

- Ауырыймы әллә? - Бәләкәстең һау түгеллеген аңғарған Асия борсолоп ҡуйҙы. Әсә кеше өндәшмәҫтән балаһын бәүетеүен дауам итте. Тик бала тынысланырға теләмәне, киреһенсә, күҙҙәрен асып уҡ шыңшырға кереште:

- Әс-сә-әй... Эсем ауыта-а...

Ҡатындың күҙҙәренән йәштәре атылып сыҡты, ул ярҙам эҙләгәндәй, ҡараштарын янъяҡҡа йүгертте лә, таяныр таяныс тапмағас, өҙгөләнеп балаһына эйелде:

- Сулпан, бәләкәсем, илама йәме... Йоҡла ҡыҙым, йоҡла.

Йоҡлай буламы инде! Бала баяғынан да нығыраҡ мыжымаҡсы. Ултыра торғас, балаһына әсәһе лә ҡушылды. Икәүләшеп балауыҙ һыҡмаҡсылар. Бөтөн был күренеште сәйерһенеп күҙәтеп ултырған Асияға башҡа сара ҡалманы, ул ҡапыл ҡалҡынып тороп, ҡатындың ҡулындағы балаға үрелде:

- Ҡана әле, һеңлекәш, былайтып олошоп ултырып булмаҫ, бир баланы, киттек.

Өмөтһөҙлөктөң сигендә булғандыр, күрәһең, йәш әсә бер һүҙһеҙ ҡулындағы ғәзиз йөгөн дә бирҙе, үҙе лә эйәрҙе.

Айһылыу апаһы менән дә таныш булып сыҡты "ҡунаҡтар". Булмай һуң. Ҡара-ҡаршы күрше йорттарҙа йәшәгән кешеләр бит. Айһылыу ишек асып быларға һораулы ҡарашын төбәгәс тә, әсә кеше йәштәренә быуылып:

- Айһылыу апай, Сулпан ауырый шикелле, - тип һулҡылданы.

Хәлде бер күҙ һирпеүҙә үк аңлап алған Айһылыу, баланы диванға һалып, сисендереп ташланы ла, быуындарын уксус иретмәһе менән ыуҙы, йылы сәйгә ҡушып, дарыу эсерҙе лә, таҙа простыняға урап, әсәһенең алдына һалды:

- Иплəп кенә бәүет әле, хәҙер тирләп йоҡлап алһа, бер аҙ хәле еңеләйер, моғайын.

Ысынлап та, күп тә үтмәй, ҡыҙыҡай мышнап уҡ китте. Баланы юрған аҫтына һалғас, ҡатындар аш бүлмәһенә сыҡты. Айһылыу ҡунаҡтары алдына сәй ҡуйҙы.

- Әйҙә ынтыл, Ләйсән, балаң йоҡлағанда ашап ал, - Айһылыу йәш ҡатын алдына ит, кәбеҫтә салаты шылдырҙы, - ҡыйынһынма.

Ләйсән бер Айһылыуға, бер Асияға ҡарашын күсерҙе:

- Һеҙ туғандармы әллә, Айһылыу апай?

- Эйе. Оҡшағанбыҙмы ни? - Айһылыу көлөп, һеңлеһенә ҡараны.

- Ныҡ уҡ булмаһа ла, танырға була, - Ләйсән рәхмәтле күҙҙәрен Асияға төбәне. - Һеҙ, апай, теге ваҡытта ла ярҙам иткәйнегеҙ, бөгөн дә...

- Тегендә нимә? - Айһылыу барак яғына эйәк ҡаҡты.

- Нимә булһын инде - гужбан... Баланы йоҡлатып алыр хәл дә юҡ... - Ләйсән өҫтәлдә ятҡан ҡулдарын бөгөн тәүгә күргәндәй, ентекле төбәлеп китте. Тынлыҡ урынлашты.

Ашап алғас, Ләйсән китергә уҡталһа ла, Айһылыу яҡын да килмәне, шкафынан халат алып һуҙҙы ла, балаһы янына инеп ятырға ҡушты. Арыған, йонсоған йәш ҡатын артыҡ ҡаршылашманы, битен-ҡулын сайып, яҫтыҡҡа башын терәүе булды - күҙҙәре лә йомолдо.

Айһылыу менән Асия оҙаҡ ҡына һөйләшеп ятты. Ҡыҙҙың аянһыслы яҙмышы хаҡында һөйләне апаһы. Шул саҡтамы, бәлки, һуңғараҡтыр, Асияның башында бер уй яралды. Ағас олонона инеп урынлашҡан ҡорт кеүек ине ул уй, яйлап ҡына ҡатындың мейеһен кимерҙе лә кимерҙе. Тора-бара Асия үҙе лә шул уй эсендә йөрөй, йәшәй башланы. Шул уйҙы донъяға ашырыу планын ҡорҙо.

* * *

Киләһе килгәнендә ҡатын Ләйсәндең ҡыҙы менән сыҡҡанын һағалап тороп, машинаһына ултыртып алып китте лә, ҡала уртаһындағы кафеға алып барҙы. Кире ҡағыуҙарҙы ҡабул итмәҫтән, тәмле ризыҡтар менән һыйланы, юҡ-бар һөйләп әүрәтте. Ҡайтҡанда-рында уйынсыҡ магазинына индереп алып сығырға ла онотманы. Шулай бергәләшеп ярты көндө күңелле итеп үткәрҙеләр. Йәш ҡатын яңы танышына һушы китеп, һоҡланып ҡараны. Уға был апайҙағы бар нәмә оҡшай ине: үҙен ышаныслы, иркен тотоуы ла, заманса, стилле кейенеүе лә, машина менән уйынсыҡ уйнаған кеүек идара итеүе, бер аҙ һауалыраҡ булыуы ла. Модалы прическаһы, сағыу сумкаһы, итектәре, ялтырап торған ҡыҫҡа шәшке туны, ҡолағындағы әллә ниндәй таштарҙан эшләнеп емелдәшкән алҡалары, нәфис муйынындағы ҡалын алтын себе, ирен, күҙ ситтәренә беленер-беленәҫ кенә булып ята башлаған ваҡ йыйырсыҡтары - ҡатынды буй етмәҫлек юғары, был тормоштоң бар ауырлығы һәм уңышһыҙлығы еңелеп, уның аяҡ аҫтына ҡолайҙыр кеүек итеп һынландырҙы. Магазиндарҙағы әйберҙең хаҡына күҙ ҙә һалмауы, ә оҡшауына, күңеле ятыуына ҡарап һайлауы ла, һатыусыларҙы йүгертеп йөрөтөп хеҙмәтләндерергә мәжбүр итерлек һөйләшә белеүе лә, кафела салат йәшелсәләренән хуш еҫ сыҡмағаны өсөн генә лә алмаштырып биреүҙәрен талап итеүе һәм уны бер һүҙһеҙ үтәүҙәре, яҙмыш типкеһендә йөрөп миктәгән һәм бындай иркле, дәрәжәле кеше янында бер башҡа үҫеп киткәндәй булған Ләйсәнде тамам әсир итте. Ул Асияның һәр ҡыланышын, хәрәкәтен, ымын йотоп, һөйләгәндәренә ҡыйыуһыҙ ғына йылмайып баш ҡағып ултырыуҙан башҡаға эшкинмәне. Хатта бәләкәс Сулпан да, әсәһенең тойғоларын бүлешкән кеүек, яңы "инәйен" тыңлап ҡына йөрөнө - мыжыманы. Мыжырға, инәй бит уның теләгәндәренә "Аҡса юҡ" тимәй, ә, киреһенсә, "Был оҡшамаймы? Теге кәрәкмәйме?" йәки "Бынау мәмәй һиңә генә ҡарап ята" тип ала ла бирә, ала ла бирә. Тәмле-татлы менән бүккәнсе һыйланып, матур уйынсыҡтар ҡосаҡлағас, иламайһың инде.

Айырылышҡанда ҡатындар яҡын әхирәттәр кеүек үпәсләшеп хушлашты. Ләйсәндең күптән булмағанса күңеле рухланып, ҡараштары асылып, баҙыҡланып ҡалғайны, кәйефен хатта әсәһенең сәсе-башы туҙып иҫереп ятыуы ла боҙа алманы. Мөйөштәге бәләкәй карауатҡа инде ойой башлаған балаһын һалып, өҫтөн япты ла, янына ултырып, бәпләп кенә "әүәй" итергә кереште. Үҙе һаман Асия апаһы хаҡында уйланы, сибәр ханым бер нисек тә уның күҙ алдынан китмәне.

Бынауы ҡотһоҙ, алама, фәҡир булмыш араһында ҡапыл килеп сығып балҡыған яҡтылыҡ, нур, әкиәти мөғжизә һымаҡ булды был осрашыу. Кискә яҡҡас та әле яңы танышының һөйләгәндәрен бер ҡат хәтеренән үткәрҙе. Асияның: "Баланан башҡа бөтә нәмәм дә бар, бына ошондай ғына бер бәләкәс тәнәй бирмәй бит Хоҙай бабай" тип ураған һайын ҡыҙын тупылдатып һөйөүен иҫләне.

Ләйсән ошо емерек бараҡта үҫте. Әсәһенең һөйләгәндәре дөрөҫкә сыҡһа, ошонда тыуған да шикелле. Әле ул бәләкәй саҡта уҡ ана емерелә, бына емерелә тигән ике ҡатлы ағас йорт ныҡ булып сыҡты, бөгөн дә унда башҡалар тарафынан онотолған, тормошҡа дәғүәһе, талабы булмаған кешеләр йән аҫырай. Коридор осонда йәшәгән Аня әбей менән үҙен иҫәпкә алмағанда, бындағыларҙың барыһы ла ҡулдарына аҡса йораты килеп инеү менән көндөң йә төндөң теләһә ниндәй ваҡытында, ямғырҙа ла, буранда ла эргәләге һыра лавкаһына йүгерергә торғандар ине. Уларҙы бараҡтарында коридор иҙәндәренең сереп һелкенеп ятыуы ла, подъезд ишегенең ҡайырылып төшөп тороуы, ҡыйыҡтың урыны-урыны менән ямғыр үткәреүе, һыуҙың, газдың күптән ябылыуы ла, электр утының ошо көндәрҙә өҙөлөргә тейешлеге лә һис кенә лә борсомай, күрәһең. Уның менән әлеге Аня әбейҙән башҡа берәү ҙә иртәгә ҡайҙа китерен уйлап көйәләнмәй. Әбей: "Мин, ярай, ҡарттар йортона ла бара алам, һин, балам, ҡалайтырһың инде?.." - тип әйтеп-әйтеп ала эскәмйәлә ултырғандарында.

Ләйсәндең әсәһе Сәриә балалар йортонда үҫкән, тегеү фабрикаһына эшкә урынлашҡас, уға ошо бараҡтан бүлмә биргәндәр. Был йортта, ысынлап та, кемде алып ҡараһаң да балалар йортонан сыҡҡан бит. Күршеләге Сергей менән Наташа ла шулай уҡ детдом тәрбиәләнеүселәре. Ҡаршылағы ағас аяҡлы ир ҙә, анау Әклимә лә, әсәһе әйтеүенсә, улар кеүек үк туған-тумасаһыҙ, йортһоҙ-ерһеҙ әҙәмдәр. Йыйылышып тамаҡ сылатҡан һайын үҙҙәре "Ҡала түрәләре беҙгә фатир биреү урынға ошонда килтереп тыҡты. Бурҙар, алдаҡсылар, беҙҙең өлөштө йоттолар", тип әрләйҙәр.

Ләйсәндең атаһы юҡ, булмаған да. Бәләкәйерәк саҡта әсәһе янында күпмелер йәшәп киткән Ғариф тигән бер ағайға "атай" тип өндәшә лә торғайны шикелле. Уныһы сығып киткәс, онотолдо. Унан ары үҙҙәрендә йәшәп сыҡҡан "ағайҙарҙың" атай түгел икәнлектәрен аңлай ине инде ҡыҙыҡай. Йылдан-йыл нығыраҡ, бәйһеҙерәк эскән әсәһен бер көн килеп әсәлектән мәхрүм итеү менән ҡурҡытып, Ләйсәнде ваҡытлыса приютҡа алып та киттеләр. Бер генә түгел, ике тапҡыр әле хатта. Беренсеһендә ярты йыл, икенсеһендә йылдан ашыу йәшәне унда. Әсәһе күпмелер ваҡыт эсеүен ҡуйып, эшкә төшөп, ҡыҙын кире юллап алды ла, түҙемлеге оҙаҡҡа етмәне - кире эсте. Бикле ҡалып ас ултырған, аҙналар буйы әсәһен көтөп ала алмаған, иҫеректәрҙән ҡурҡып, Аня әбейҙә йоҡлаған саҡтарын иҫәпләп тә, иҫләп тә бөтөп булмайҙыр.

Мәктәпте яҡшы ғына билдәләр менән тамамланы былай. Бар теләге медицина колледжына инеү, тиҙерәк һөнәрле булып, үҙ аллы тыныс тормошта йәшәү ине. Тик уҡыуын тамамлай ғына алманы. Икенсе курста ПТУ студенты Раян менән танышты. Бер аҙна эсендә ҡыҙҙың башын орсоҡ шикелле әйләндерҙе егет. Күп тә үтмәй, Ләйсәндең барагына уҡ килеп йөрөй башланы. Теле телгә йоҡмай, шаян, шуҡ, теләһә ниндәй хәлдән дә сығыу юлын тапҡандай йылғыр ине ул. Ҡыҙҙы ла, айыҡ булғанда, әсәһен дә ауыҙына ҡаратып ҡуйҙы. Киләһе йыл, Ләйсән уҡыуын тамамлау менән, районға әсәһе янына алып ҡайтып китәсәген, унда эш тә, йәшәрҙәренә ҙур йорттары ла барлығын ҡабат-ҡабат тәмләп һөйләй торғас, ҡыҙ был буласаҡ хәлдәргә шул ҡәҙәр ышанды, хатта инде үҙе лә "ауылға барғас" тип хыяллана башланы. Шунлыҡтан, ауырға ҡалыуын белдергәс, кейәүенең һыуға төшкән кеүек юҡҡа сығыуына бер нисек тә ышана алманы. Егетенең ятағы алдында әллә нисә кисен көтөп үткәрҙе, тик иптәштәре тегене күрмәне лә белмәне. Ахырҙа бер көн берәүһе ҡыҙҙы йәлләп китте микән, шыпырт ҡына итеп: "Эҙләмә, тапмайһың һин уны, күптән бында уҡымай ҙа, йәшәмәй ҙә бит ул, урлашып ҡыуылғайны", - тип китте. Был һүҙҙәрҙән шаңҡып ҡалды Ләйсән. "Нисек инде - уҡымай? Ул бит "киләһе йыл уҡып бөткәс" тип һөйләне... Уларҙың бит... уларҙың... мөхәббәт... Нисек инде?.."

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

# САЛАУАТТЫҢ РУХЫ, ШИҒРИ ҺҮҘЕ...



## сал быуаттар аша елеп ҡайтты

**(Башы 1-се биттә).**

### "Ай, Уралым, Уралым..."

Ун йыл рәттән уҙғарылған "Салауат йыйыны"ның иң тулҡынландырғыс өлөшө, ғәҙәттә, театрлаштырылған тамашаға тура килеүенә өйрәнеп бөткәнбеҙ. "Сал быуаттар аша" тип аталған быйылғы тамаша анығ ҡына бер ваҡиға булараҡ үҫешмәһә лә, Салауатты яугир ғына түгел, нескә күңелле шағир булараҡ күрһәтеүе менән хәтерҙә ҡаласаҡ. Быны сценарий авторы Зөһрә Бураҡаева менән режиссер Азат Йыһаншиндың ҙур уңышы, тип иҫәпләргә мөмкин.

Һүҙ сәнғәтен, бигерәк тә шиғри һүҙҙең баһаһын халҡыбыҙ борондан яҡшы белгән. Яҡшы һүҙ - йән аҙығы ғына түгел, ул рухи тәрбиә эшендә лә ҙур урынды биләй, илһөйәрлек, батырлыҡ, кешелеклелек сифаттарын үҫтерә. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов менән Салауаттың - ике бөйөк һүҙ оҫтаһының, халҡыбыҙ азатлығы өсөн үҙенең ғүмерен йәлләмәгән ике яугирҙың ниһәйәт бер майҙанда осрашыуы ошо хәҡиҡәтте иҫебеҙгә төшөрөүе менән дә әһәмиәтле булды. Шулай ҙа шәхесте шәхес иткән иң мөһим төшөнсә - ул тыуған ерҙе һәм милләтеңде эскерһеҙ яратыу тойғоһолор ул. Һәр хәлдә, Руслан Хайсаровтың Салауаты менән Фирғәт Ғариповтың Рәми образы уларҙы тап ошо сифаттар ҙур шәхес һәм шағир яһағанлығына ышандыра алды. Ә Гөлназ Ғөбәйҙуллина йыйын тарихында иң нәзәкәтле Зөләйха булып күңелдәрҙә һаҡланасаҡ.

Быйылғы йыйында тағы шул таң ҡалдырҙы: майҙанда иртәнән кискә тиклем төрлө урындарҙа Салауат Юлаевтың тыуған төйәгебеҙҙе данлаған "Ай, Уралым, Уралым" шиғыры доға кеүек ҡабатланды. Тарихи хәтеребеҙҙе нығытып торған Урал тауынан, ошо ерҙән, ошо һауанан, ошо һыуҙарҙан һәм, әлбиттә, "Салауат йыйыны"нда тулыһынса тиерлек сағылыш тапҡан рухи мөхитебеҙҙән башҡорт халҡы көс-ҡеүәт ала. Йыйын йәштәр араһында рух көсөн уятыусы бер сара булһа, Салауат бөгөн дә милләтте берләштереүсе, ойоштороусы, милли аңды уятыусы шәхес булып ҡала әле.

### Көмөш тә генә өҙәңге...

"Көмөш өҙәңге" Эшҡыуарлыҡ инициативалары һәм кәсепселек бәйгеһе - быйылғы йыйындың тағы бер күркәм биҙәгенә әүерелде. Унда республиканың төрлө район-ҡалаларынан бәйгеселәр ҡатнашты. Конкурсҡа айырым оҫталарҙан тыш, халыҡ һөнәрҙәре һәм кәсепселек менән шөғөлләнеүсе шәхси эшҡыуарҙар саҡырылһа ла, тәүгеләре икенселәренә ҡарағанда күберәк булды.

Ғөмүмән, бәйгелә ни өсөндөр ир-егеттәр аҙ ҡатнашты. Әллә боронғо кәсептәр һаман да эшҡыуарҙар өсөн килем килтерә торған табышлы ысулға әйләнеп китә алмаған, әллә көслө зат бындай сараларға йөрөүҙе кәрәк тип тапмай, йә ата-бабалар һөнәрҙәре онотола төшкән. Ҡатын-ҡыҙ иһә һәр заманда ла шәл бәйләп, балаҫ һуғып, иш янына ҡуш булһын, тип тырышҡанға күрә, был шөғөлдәрҙән бөгөнгө көнгә тиклем айырылмаған. Хәйер, ҡул эше менән булышыу матди күҙлектән сығып түгел, ул йышыраҡ күңел өсөн башҡарыла торған шөғөл беҙҙә. Шуға ла бөгөн райондарҙа ағинәйҙәр ҡоро, мәҙәниәт усаҡтары хеҙмәткәрҙәре тарафынан кис ултырыу кеүек йолаларҙың күпләп тергеҙелеүе, уларға халыҡтың ихлас йөрөүе ошо хаҡта һөйләй.

Ҡайһы бер яҡтарҙа шәлде йыл әйләнәһенә бәйләйҙәр, мәҫәлән, Ейәнсура районы Үтәғол ауылы китапханасыһы Зәриә Рахманғолова шәл бәйләгәндә бер юлы китап уҡып та ултырам, телевизорға ла ҡолаҡ һалып өлгөрәм, ти. Әйткәндәй, ейәнсуралар шәл бәйләп, ниндәй генә күргәҙмәләрҙә булмаған, баш ҡаланы уҙып, Мәскәү, Новгородҡа тиклем барып еткән. "Көмөш өҙәңге" бәйгеһенә лә улар иң эксклюзив шәлдәрҙе алып килгәйне. Хәйбулла районы Вәзәм ауылы ағинәйҙәренең әлеге мәлдә шәл һуғыу кәсебен тергеҙеп йөрөгән көндәре. Нурсилә апай Сурина әйтеүенсә, һуғылған шәл сифаты яғынан нығыраҡ була, тиҙ туҙмай, уны шәл дә, палантин итеп тә ябынырға мөмкин. Сама менән 10 мең тирәһе торған был затлы шәлдәрҙе башлыса бүләккә алалар, ти вәзәмдәр. Улар шулай уҡ балаҫ һуғыу эшенә лә тотонмаҡсылар. Аҫалы балаҫ - халҡыбыҙҙың юғары зауыҡҡа эйә булыуының тағы бер күрһәткесе шул. Һәр биҙәкте мәғәнәһенә ҡарап, төҫтәрен тап килтереп һуғыу ныҡышмалылыҡтан бигерәк, тап ана шул зауыҡ талап итә. Өлкән йәштә булыуына ҡарамаҫтан, Әлшәйҙән килеп еткән балаҫ һуғыу оҫтаһы Нәзиә Әхмәтвәлиеваның аллы-гөллө балаҫтары был һөнәрҙең иң камил өлгөһө булып торҙо, тиһәк, һис тә яңылышмаҫбыҙ.

Балаҡатай ҡатын-ҡыҙҙары үҙҙәренең төбәгенә хас милли күлдәк-алъяпҡыстарға, таҫтамалдарға һалынған үҙенсәлекле сигеү өлгөләрен бөгөнгө көнгә тиклем һаҡлап ҡалыуҙары менән дан тота. Боронғо йолаларҙы еренә еткереп үтәгәнлектән, йола башҡарыу өсөн кәрәкле әйберҙәр халыҡ араһында бигерәк үтемле. Мәҫәлән, һәр килендең төшкән ерендә морондоҡ инәһе менән атаһы, йәғни, ата-әсәһен алыштырыусылары була. Был йола башҡарылған мәлдә морондоҡ атайға - ҡайыулы таҫтамал, морондоҡ инәйгә ҡайыулы алъяпҡыс бүләк ителә. Ошондай уҡ таҫтамалды ҡыҙҙың атаһы ризалыҡ билдәһе итеп төп ҡоҙаһына бирергә тейеш. Бәйгелә ҡатнашыусы Венера апай Ғәлиәкбәрова күргәҙмәгә ҡайылған кейәү мендәре лә алып килгәйне. Баҡтиһәң, кейәүе атта йөрөгәндә эйәрҙә ҡаҡланып йөрөмәһен, тип, борон ҡәйнә кеше уға махсус мендәр әҙерләгән. Кейәүҙәр күптән заман атына күсеп ултырһа ла, ҡәйнәләр йола һаҡлап, кейәүҙәренә биҙәктәр ҡайып, суҡтар бәйләп, мендәр яһауын дауам итә.

Ир-егеттәр һөнәре иҫәпләнгән зәргәр - көмөштән ювелир биҙәүестәр яһау эшен дә гүзәл зат бөгөн үҙ ҡулына алған. Учалы ҡалаһынан Әлфинур Ғәлимйәнованың семәрле көмөш алҡалары, беләҙектәре, сулпылары республиканың һәр гүзәл затына таныштыр ул, моғайын. Таш ҡырҡыу оҫтаханаһы эргәһендә эшләп килгән был цех шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүҙең уңышлы өлгөһө булып тора, милли биҙәүестәргә һорау кәмемәй, киреһенсә, арта ғына, ти оҫта. Шулай ҙа ысын ирҙәргә хас шөғөл булараҡ, исмаһам, зәргәр һөнәре ир-егеттәрҙе йәлеп итмәҫме икән берәй заман? Юғиһә, ойоштороусылар тарафынан бәйгегә исем итеп һайланған көмөш өҙәңгене яһау ҙа тиҙҙән ҡатын-ҡыҙ иңенә төшмәҫ, тимә, ай-һай.

### Батырмын, тип кем әйтмәҫ...

"Салауат йыйыны" фольклор байрамы сиктәрендә үткән "Йор үҙән" республика этнофестивале программаһында ҡаралған "Батыр тоҡомо" этноконкурсында 16 йәштән 25 йәшкә тиклемге егеттәр көс һынашты.

Ир-егеттәр өсөн үткәрелгән башҡа бәйгеләрҙән айырмалы рәүештә, "Батыр тоҡомо" конкурсында ҡатнашыусы 12 батыр егет шәжәрәһе, ырыуының батырҙары, тамғаһы, ораны, ағасы, ҡошо буйынса белемдәрен һынаны, башҡорт халыҡ йырын йәки ҡобайырын башҡарҙы, ҡурайҙа, думбырала, ҡумыҙҙа уйнап күрһәтте, осҡон сәсрәтеп халыҡ бейеүҙәрен бейене, Салауат Юлаевтың шиғырҙарын яттан һөйләне. Сараның режиссеры һәм хореографы Рәис Низаметдинов лайыҡлы билдәләүенсә, халҡыбыҙ борондан йыр, бейеү, тапҡыр һүҙ һөйләү оҫталығы буйынса ярышырға яратҡан - ошо рух ҡаныбыҙҙа һаман һаҡлана әле. Шуға ла был "Батыр тоҡомо"н тамаша ҡылырға теләүселәр ҙә күп булды.

Икенсенән, батырлыҡтың сиктәре юйыла төшкән заманда был бәйге егеттәрҙең үҙҙәренә лә тәбиғи асылын аңларға ярҙам итте, ахыры. "Бөгөн ошонда кисергән күтәренке халәтемде юғалтҡым килмәй, хатта бер нисә минутҡа булһа ла ысын батырлыҡ, ғәййәрлек ғәҙәти күренеш булған Салауат йәшәгән заманға барып килергә лә теләр инем", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашҡайны Йылайыр уҙаманы Азамат Монасипов. Әйле егете, Стәрлетамаҡ ҡалаһы данын яҡлаусы Заһир Зәйнетдинов иһә конкурсҡа әҙерләнгәндә, Салауаттың шиғырҙарын ятлағанда батырлыҡ рухының йәшәйешенә, ҡылыҡтарына ныҡлап инеүенә шатланыуын белдерҙе. Әйткәндәй, Салауат Юлаевтың шиғырҙарын яттан һөйләп ярышыу барыһына ла нығыраҡ оҡшаған. Уларҙың ир-егет өсөн иң кәрәкле тойғо - ватансыллыҡты тәрбиәләүе, тыуған ерҙе ятарырға, уның менән ғорурланырға өйрәтеүе менән ҡәҙерле һәм әһәмиәтле. Бәйге ҡуйған шарттарға бар яҡтан тап килһәләр ҙә, һәр береһе һыу һөлөгө һымаҡ булған был егеттәр баҫалҡылыҡтары менән дә айырылып торҙо. Батырмын, тип кенә батыр булып булмаған кеүек, ысын талант та ҡысҡырып маҡтаныуға мохтаж түгел инде ул.

Ҡурай уйнауҙы, бейей-йырлай белеүҙе халыҡ әллә ни ҙур һөнәр күрмәһә лә, милли рухты тап улар тәрбиәләй. Индән-иң батыр исеменә лайыҡ булыусы бейеүсе, ҡурайсы, йырсы Айназ Низаметдинов 2004 йылда 8 йәшендә беренсе тапҡыр "Салауат йыйыны"на килеп, батыр егеттәр конкурсында ҡатнашырға хыялланып ҡайтҡан булған. Ун йылдан һуң уның ошо хыялы тормошҡа ашты. "Салауат Юлаев - иң бөйөк батырыбыҙ, йәштәребеҙҙе уның күркәм өлгөһөндә тәрбиәләүҙән дә дөрөҫөрәк ысул юҡ", - тип иҫәпләй ул.

**(Дауамы 16-сы биттә).**









✓ *Урманда үҙ мылтығынан үлеп ҡалған кешеләр тураһында ишеткәнем булды. Ошонан һуң еләккә, бәшмәккә барһам да, башҡа йомоштарым менән керһәм дә, урман хужаһына ниәтемде әйтеп, рөхсәт һорар булдым.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ТЕЛДӘР БЕЛЕҮ...

## ахмаҡлыҡтан да ҡотҡара

■ Һиндостан ғалимдары ике тел менән файҙаланыуҙың ҡартлыҡ көнөндә еңел аҡыллылыҡтан яфаланыу хәүефен кәметеүен асыҡлаған. Ике тел менән файҙаланған саҡта мейенең иғтибар һәм башҡарыу функциялары өсөн яуап биреүсе зоналары әүҙемерәк үҫешә. Мейенең ҡартайыу сире осоронда тап ана шулар зыян күрә лә инде. Ике телде белеп, уны өйрәнеүҙе артабан камиллаштыра барыу бик яҡшы, ти ғалимдар һәм телдәр өйрәнеү юлы менән мейене күнектереүгә йәш саҡтан уҡ тотонорға кәңәш бирә.

■ Себер федераль университеты лабораторияһы ғалимдары уникаль биопластик эшләп сығарған. Ул кешенең тән туҡымалары һәм эске ағзалары дефектын тултырыу өсөн тәғәйенләнгән. Биопластик ярҙамында табиптар тәндең янған ҡатламын "ямай" аласаҡ, был материал шулай уҡ стоматологияла, дөйөм һәм бит-яңаҡ хирургияһында ла ҡулланыласаҡ. Иң мөһиме - биопластик яман шештәрҙе дауалауҙа ла файҙалы булмаҡсы: өр-яңы ошо материал ярҙамында зарарланған ағзаға туранан-тура дарыу ебәреп, уның дозалап бүленешен һәм организмға тәьҫирен контролдә тотоу мөмкинлеге асыла. Яңы материал, көнбайыш аналогтарҙан айырмалы, үҙ функцияһын үтәгәндән һуң организмға бер ниндәй зыян килтермәйенсә, үҙенән-үҙе юҡ булыу һәләтенә эйә.

■ Спорт тапшырыуҙарын ҡарау калорияларҙы яндырыуға булышлыҡ итә, ти Австралия тәжрибәселәре. Ә эш шунда: бындай программалар ҡарау йөрәк ҡағыуға, тын алышының йышайыуына, тире ҡатламына ҡан йүгереүгә, тир бәреп сығыуға һәм физик әүҙемлектең башҡа ҡайһы бер күрһәткестәренең үҙгәрешенә килтерә. Шулай итеп, физик әүҙемлек күренештәрен күҙәткән ваҡытта мускулдарҙың симпатик нервылар әүҙемлеге лә арта.

■ Лондон медицина колледжы ғалимдары билдәләүенсә, тәмәке ҡабындағы иҫкәртеүсе һүрәттәр тәмәке тартыусыларға ҡарағанда, был насар ғәҙәте булмағандарҙы күберәк ҡурҡыта. Тикшеренеүҙәрҙә хроник үпкә сирлеләр, шулай уҡ тын юлдары системаһы сирҙәре булмаған кешеләр ҡатнашҡан. Ике төркөмдәге респонденттарҙың 90 проценты тәмәке тартыуҙың үпкә яман шешенә килтереүен яҡшы белә, әммә уның эҙемтәһендә барлыҡҡа килгән башҡа сирҙәр тураһында мәғлүмәткә эйә түгел. Мәҫәлән, һуҡырайыуҙың шулай уҡ тәмәке тартыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүен 20 процент яуап биреүсе белә. Тәжрибә барышында шундай ситуация тыуҙырыла: унда ҡатнашыусыларға тәмәке тартыуҙан килеп сыҡҡан бер нисә ауырыуҙан берәүһен генә һайлап, уны дауалау мөмкинлеге бирелә. Бар ҡатнашыусылар ҙа тиерлек һуҡырайыуҙы йәки йөрәкҡан тамырҙары ауырыуҙарын һайлай. Шуныһы ҡыҙыҡ, тәмәке тартмаусылар тәмәке ҡабындағы иҫкәртеүсе һүрәттәрҙе күреп, шунда уҡ ҡурҡыу тойғоһо кисерә. Ә тәмәке тартыусыларға бындай һүрәттәр бөтөнләй тәьҫир итмәй. Ғалимдар быны уларҙың бындай яҙыуҙарҙы һәм һүрәттәрҙе йыш күреүе менән дә бәйләй. Шуға ла тәмәке тартыуға ҡаршы көрәштә бындай тыйыуҙар ярҙам итмәй.

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ДОНЪЯҺЫ*

**Кеше үҙен ниндәй генә көслө аҡыл эйәһе итеп тоймаһын, ул тик матди донъяны ғына күрә һәм ҡабул итә ала. Элегерәк параллель донъя тураһында һөйләүселәрҙә параноя билдәләре күреп, психиатрик дауаханаға һалып та ҡуйырҙар ине. Шулай ҙа ғалимдар, кеше беҙҙе уратып алған донъяның бер процентын генә күрергә һәләтле, тигәнде таный хәҙер. Был ысынлап та шулайҙыр. Дини китаптарҙа ла беҙгә күренмәгән донъя, унда йәшәүселәр хаҡында мәғлүмәт бирелеп, уларҙан һаҡ булырға өйрәткән иҫкәрмәләр бар бит.**



# ПАРАЛЛЕЛЬ ДОНЪЯ...

## уйҙырма түгел

Тағы бер ваҡиға иҫтә ҡалған. Сабынлыҡта трактор арбаһына бесән тейәнем дә, урман араһынан аҡрын ғына сыға башланым. Тәгәрмәс юлынан этем йүгереп килә. Бер аҙҙан эт сыйнап илай башланы. Боролоп ҡараһам, этемде күҙгә күренмәгән кемдер алға үткәрмәй. Эт сәбәләнә, тегеләй, былай йүгереп ҡарай, быялаға төкөлгәндәй башы менән бәрелә лә, ултырып илай. Мин арбамды артҡа табан йөрөтә башланым, ошо саҡ этем муйынындағы ҡайышынан бер метр тирәһе бейеклеккә күтәрелде, мин арбамды кире алға йөрөткәс, эт кире төшөрөлдө. Был күҙгә күренмәгән көс менән көрәшеүҙең файҙаһыҙ булыуын тойоп, ҡайтып киттем, эт бер сәғәттән һуң ҡыуып етте.

Ошоға оҡшаш тағы бер ваҡиға булды. Ҡустылар, кейәүҙәр, үҙемдең малайҙар менән Нөгөш буйына балыҡҡа китеп барабыҙ. Иң алдан - ҡустылар, ике кейәү, улар артынан томбойоҡ, ҡамыштар араһынан - мин, минең арттан этебеҙ Байкал килә. Яр буйынан шулай эйәртенеп бара инек, артта этебеҙ сыйнап илай башланы. Әйләнеп ҡараһам, этте ниҙер үткәрмәй. Эт минән 10 метрҙар самаһы ғына алыҫлыҡта, һуҡмаҡта бер ни юҡ. Йүгереп килеп нимәгәлер бәрелә лә, ҡолап илай. Әйтерһең, быялаға килеп бәрелә был. Яҡын бара башлағайным, этемде ҡайышынан ниҙер күтәреп алды, эт һығыла башланы. Артҡа сиктем. Этте төшөрҙөләр. Бындай ваҡиға таныш булғас, этте ҡалдырып киттем. Ярты сәғәттән һуң ғына ул беҙҙе ҡыуып етте. Ошоға оҡшаш ваҡиғаны район башлығын йөрөткән водитель Юрий Афанасьевич һөйләп торғайны. Улар Өфөгә иртәнге кәңәшмәгә өлгөрөр өсөн төнөн юлға сығалар. Элек Сәрмән аша юл юҡ ине. Маҡарға етеп килгәндә, машина нимәгәлер төкөлөп, туҡтап ҡалдыҡ, ти. "Сығып ҡарайбыҙ - бер нәмә юҡ, ҡуҙғалабыҙ тиһәк, машина китә алмай. Артҡараҡ сигеп, термостағы сәйҙе эсеп, бер аҙ ҡапҡылап алғас, машинабыҙҙы ебәрҙеләр", - тине ул. Тимәк, кешелек донъяһы менән кемдәрҙер йә тәжрибә үткәрә, йә шаяра, күрәһең. Шуныһы мәғлүм, ҡалаларҙа, машиналар мыжғып йөрөгән урындарҙа улар бик осрамай, йәшәр өсөн тыныс урын эҙләйҙәрҙер, сөнки кешене, этте, кешеләр ҡулланған ҡорамалдарҙы яратып бөтмәйҙәр. Ҡайһы бер ауылдарҙа урманға эшкә китеп, аҡылға зәғифләнеп ҡайтҡан ағай-эне тураһында ла йыш ишетелә торҙо элек.

Тағы бер ваҡиға тураһында һөйләмәксемен. Геология экспедицияһында эшләй инем. Бер ваҡыт вахтала яңғыҙым дежурҙа ҡалдым. Мылтыҡ, патронташтар бар. Бер көндө ике овчарканы эйәртеп, Ҡужә буйына һунарға киттем. Аҙаштым. Йөрөй торғас, бер тау башына килеп мендем. Ҡараһам, ҡарағайҙар араһында бер нәмә һикереп йөрөй. Атып ебәрҙем, ике көбәк тә ҡоролған булып, мине мылтыҡ тибеп ебәрҙе, ҡолап киткәнде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Мылтыҡ аяҡҡа төштө. Ә теге мин атҡан йән эйәһе ҡанаты бер тапҡыр атылған, етмәһә, бер аяғы һынып йөрөгән һуйыр булып сыҡты. Ауыртҡан яурынымды тотоп, һуйыр ятҡан ергә барҙым. Ысынлап та, был һуйырҙы атыу миңә сауап ҡына булғандыр. Үҙ ғүмеремә шул сиккә етеп яраланған, ҡанаттары һынған, бер аяғы өҙөк, төпсөгө күгәргән, бетләп бөткән һуйырҙы күргәнем юҡ ине. Үҙем аҙашҡанмын, етмәһә, эттәр әллә ҡайҙа булды. Был зәғиф һуйырҙы ни эшләтергә, тип уйланып торҙом да, "ҡыл түбә"ләр ашар әле, тип, үҙем менән алдым. Мылтыҡты ике көбәккә ҡороп, һаҡлағыстан алып уҡ ҡуйҙым. Йөрөй торғас, бер яҙыу күреп, ҡурсаулыҡ территорияһында аҙашып йөрөгәнемде белеп, ҡыуанып киттем. Йәтеш кенә урын табып, ашап алырға булдым. Икенсе йомортҡаны әрсеп бөтөп кенә бара инем, миңә ҡарай ике овчаркам сабып килә, күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй. Сыйнай-сыйнай сабып килделәр ҙә, икеһе лә миңә арҡаларын ҡуйып ултырҙылар, йөрәктәре сыға яҙып һуға, хатта ишетелеп тора. Быларҙың артынан 4 метр бейеклеккә япраҡтар күтәреп өйөрөлөп ҡойон һымағыраҡ нәмә килеп сыҡты ла, беҙҙе түңәрәтеп өйөрөлә башланы. Унан минең алда ятҡан мылтыҡ үҙенән-үҙе атылып китте, ҡолаҡ тондо. Ҡойон кире китеп барҙы. Эттәр шул тиклем ҡурҡҡан булып сыҡты, оҙаҡ ҡына икәүләшеп аяҡ араһына уралып, йүнләп атларға ирек бирмәй барҙылар. Шулай көскә ҡайтып еттек. Урманда ҡурҡмаған кеше булһам да, бараҡтарға ҡайтып ингәс, бер аҙ ишекте бикләп ултырҙым. Был хәлде шулай аңланым: параллель донъяла мылтыҡ, эт, техника менән йөрөгән кешене яратмайҙар. Мин урманда үҙ мылтығынан үлеп ҡалған кешеләр тураһында күп ишеткәнем булды. Йомортҡа әрсеп ултырған кеше нисек итеп ситтә ятҡан мылтыҡтың ике тәтеһенән сирттерһен? Ошонан һуң еләккә, бәшмәккә барһам да, башҡа йомоштарым менән керһәм дә, урман хужаһына ниәтемде әйтеп, рөхсәт һорар, эт эйәртмәҫ булдым. Ә теге һуйырҙан икенсе көндө килеп еткән "ҡыл түбә"ләр аш бешерҙе, мин ашын ашаным, ә ите каучук һымаҡ ҡаты булып сыҡты, ул итте урыҫтар рәхәтләнеп сәйнәп йөрөнөләр бер аҙ.

Ауыл араһында ла күрергә тура килде параллель донъя менән бәйле хәлдәрҙе. Беҙ үҙәк урамдың урамдар киҫешкән өлөшөндә йәшәнек. Тауыҡтарыбыҙ һәм һаҙ ҡондоҙо (нутрия) тигән йәнлектәребеҙ бар ине. Уларға ашарға биргән саҡта, нимәнәндер ҡурҡып, өйөлөшөп торғандарын күрә торғайным. Был гел киске сәғәт биш менән алты араһында була, шул саҡта мине лә аңлатып булмаған ҡурҡыу солғап ала, етмәһә, кемдер күҙәткән һымаҡ тойола ине. Бер мал өй алдына бәләкәй йорт һала башланым. Ике-өс ҡат бүрәнәне һалғас, бәйле этебеҙ төҙөлә башлаған ошо йорттоң нигеҙенә ҡарап өрә башланы. Нисә тапҡыр сығып һуҡранһам да, эт киске биш менән алты араһында бураға ҡарап өрөүенән туҡтаманы. Бура эшләнеп бөттө. Бер саҡ бура эсендә торһам, стенаны тырнай-тырнай тыш яҡлап нимәләр менеп, түшәм аша икенсе яҡҡа төшөп китте. Сапсып менеүенә ҡарағанда, уның бесәйҙән күпкә ҙур, ауырыраҡ икәне һиҙелде. Бер үк ваҡытта, бер үк маршруттан тайпылмаҫ нимә булыр был? Ҡыйыҡ, фронтон, кәрниз эшләгәндә турғай ҙа һыйырлыҡ тишек ҡалдырманым. Йорттоң эсен сутлап йөрөп, киске биш етте, мин көтөп тора башланым. Бер саҡ стенаны тырнап килеп менде лә был, һыҙғырған тауыш сығарып, ҡыйыҡ эсенә керҙе, һыҙғырған тауыш сығарып, икенсе стенанан килеп төштө. Таҡта ярығынан һыйып үтергә һәләтле ниндәй йәнлек һуң был? Был турала ауыл муллаһына һөйләгәйнем: "Һин уның юлына "Аятел көрси" доғаһын йәбештереп, бысаҡ, йә салғы һынығын ҡатып ҡуй", - тине. Мин шулай эшләнем һәм был маршрутын үҙгәртте, беҙҙең мунса ҡыйығы аша йөрөй башланы. Бер нисә тапҡыр мунсаға йыуынырға инеп ултырғандар ҡурҡып ҡайтып кергәндән һуң, беҙгә был мунсаны ташларға тура килде.

Бының кеүек хәлдәрҙе ишеткән, белгән, кисергән кешеләр күп. Гәзит уҡыусыларҙың да әйтер һүҙҙәре барҙыр. Ислам динендә бының кеүек һәр осраҡҡа аңлатма бар. Беҙ был донъяла яңғыҙ түгелбеҙ, параллель донъя ағзаларын беҙ күрмәҫкә тейешбеҙ икән, тимәк, улар менән юлдарыбыҙ киҫешергә, йоҡлаған карауаттарыбыҙ, ашаған урындарыбыҙ уларҙың юлында булырға тейеш түгел. Хоҙай үҙе шулай ҡушҡандыр - улар үҙҙәренсә, кешеләр үҙҙәренсә һәм шул уҡ ваҡытта үҙ-ара аңлашып йәшәргә тейешбеҙҙер, күрәһең. Яңы өйгә күскәндә тәүҙә бесәйҙе алып инәләр ҙә, уның ҡылығын күҙәтәләр. Бесәй ҡайһы бер осраҡта арҡа йөнөн тырпайтып, нимәгәлер текәлеп, ҡурҡып сигенә башлай, йә ҡатып ҡала. Бындай саҡта сараһын ваҡытында күрергә кәрәк. Ислам динендә һәр иҫкәртеү яҙылған, һәр һаҡланыу сараһы ҡаралған. Параллель донъя менән юлдары киҫешкән кешеләрҙе фекер алышыуға саҡырам. Был күптәргә фәһемле булыр һәм кемдәрҙелер һаҡһыҙ эш итеүҙән һаҡлап ҡалыр, тип уйлайым.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**
**Бөрйән районы.**

**(Аҙағы. Башы 27-се һанда).**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ФИТЫР САҘАҠАҺЫ МЕНӘН...

## ураҙаларыбыҙҙы камиллаштырайыҡ!



Башҡа айҙарҙан йөҙҙәрсә, меңдәрсә тапҡырға юғарыраҡ күтәрелгән сираттағы Рамаҙан айы ла тамамланасаҡ. Уның менән бергә айырым бер сихри көскә эйә булған, рухи күтәрелешкә өндәгән сәхәрҙәр, ураҙалар, ифтарҙар, тәрәүихтар ҙа артта ҡаласаҡ.

Фани донъяла ниғмәттәр мәңгегә бирелмәй. Уларҙың самалы ғына бирелеүен күреп, ғәҙәттә, әҙәм балаһының күңеле ҡыралыусан. Шуға ла кешегә әйтелә: "Эй, кеше! Фани донъя ниғмәттәре бөтөүенә ҡайғырма, Аллаһы Тәғәләнең шәфҡәтлелек ҡаҙналары сикһеҙ. Был донъя ниғмәттәренең фанилығы тураһында уйлап төшөнкөлөккә бирелмә. Ул ниғмәттәр сикһеҙ шәфҡәтлелек емеше. Сикһеҙ шәфҡәтлелек ағасы мәңге булғанға күрә, бер емеш урынына икенселәре үҫәсәк".

Рамаҙан айы ла шундай бер ниғмәт ул. Уның әһәмиәтен аңламаған кеше өсөн ул яҡшы иҫәпләү бирәмәге, ябай бер ай арауығы. Григориан календары буйынса йәшәгән Рәсәйҙә бөтөн халыҡ түгел, хатта күп кенә этник мосолмандар ҙа был айҙың башын да, аҙағын да белмәй. Әммә кемдеңдер был өлкәләге наҙанлығы Рамаҙандың әһәмиәтен төшөрмәй. Мәңгелектә ҙур бәхеткә өлгәшеү өсөн бирелгән был мөмкинлек уның менән ҡулланмаусыларҙың, инҡар итеүселәрҙең, онотоусыларҙың гүәйебен өҫкә сығара. Ә был мөмкинлек менән ҡулланыусыларҙы иһә, яңы рухи бейеклектәргә күтәрә.

Эйе, бар тормош тәҡдир ителгән. Бар ғүмер алмаҫҡа бәрәбәр ниғмәттәр менән тулған. Был ниғмәттәр өсөн бер көн һорау алынасаҡ. Уларҙы нисек ҡулланыуың, рәхмәтле булыу-булмауың өсөн яуап тоторға тура киләсәк. Кеше ул ниғмәттәрҙе дөрөҫ ҡулланып, Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле булып, шөкөр итеп кенә тулөй аласаҡ. Түләнмәгән, дөрөҫ ҡулланылмаған ниғмәттәр хисап көнөндә ауыр йөк булып, бурыслылар иңенә ятасаҡ. Фани донъяның төп маҡсаты баҡыйлыҡ булғанға күрә, ғибәҙәт, шөкөр, Аллаһы Тәғәләгә маҡтауҙар һәм мөхәббәт - был донъяның емештәре. Шуға күрә лә "Был тормоштоң маҡсаты - рәхәтлектә йәшәү, хайуани теләктәргә эйәреү", тип иҫәпләүселәр наҙанлыҡтары менән хаҡ маҡсаттарҙы түбән баҫҡыстарға төшөрөп, үҙҙәрен иң тәрән упҡынға ырғыта.

Изге Рамаҙан ошо фани донъяла мәңгелек донъяға өлгәшергә насип итә. Аҙ ризыҡ менән ҡәнәғәтләнеү, аҙмыштан риза булыу, баҫалҡылыҡ, тыйнаҡлыҡ шөкөр хисабы булып иҫәпләнә. Ошо хикмәттәргә төшөнөүселәр уныңҡа өлгәшә. Йәшәү мәғәнәһен аңлауҙары, баҫалҡылыҡтары һәм рәхмәтле булыуҙары арҡаһында тормоштарын ғибәҙәткә әйләндерәүселәр бәхетле. Ә инде рәхмәтле булмау ҡомһоҙлоҡта, исрафлы булыуҙа, хәләлде харамдан айырмайынса, ауыҙға эләккән бар нәмәне ашауҙа күренә. Быңдайҙар үҙҙәрен мәңгелек бәхетһеҙлеккә дусар итә.

Рамаҙандағы ураҙа Аллаһы Тәғәлә биргән башҡа ниғмәттәр өсөн шөкөр генә түгел, үҙе үк оло бер ниғмәт тә. Шуға ла мөьмин ошо айға етеүе өсөн дә рәхмәтле булырға бурыслы. Был рәхмәтлелектең, шөкөрҙөң мөлкәти эквиваленты булып фитыр саҙаҡаһы тора ла инде. Хәҙистәрҙең береһендә: "Ураҙа ер менән күк араһында эленеп тора. Фитыр саҙаҡаһын түләгәндән һуң ғына Аллаһы Тәғәләгә еткерелә", - тип әйтелә.

Фитыр саҙаҡаһын Рамаҙан айы башланған беренсе көнөнән алып, байрам намаҙына тиклем (27 июль Рамаҙан айының һуңғы көнө, байрам, йәки ғәйет намаҙы 28 июль иртән уҡыласаҡ) арауыҡта түләргә кәрәк. Байрам көнө башланғандан алып байрам намаҙына тиклемгә ваҡытта ул мотлаҡҡа әйләнә. Байрам намаҙынан һуң ул ябай саҙаҡа булып ҡына ҡала, фитыр саҙаҡаһы өсөн бирелгән бәрәкәтен, ҡиммәтен юғалта. Бәйғәмбәребеҙ әйтә: "Кем намаҙға тиклем (байрам намаҙы) фитыр саҙаҡаһын бирә, уның саҙаҡаһы ҡабул ителә, намаҙҙан һуң бирелгәне иһә, саҙаҡаларҙың бер төрө булып ҡына ҡала". Һис шикһеҙ, бөтә төр саҙаҡалар ҙа Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында маҡтаулы, әммә Ул, Рамаҙан айын башҡа айҙарҙан күтәргән кеүек үк, фитыр саҙаҡаһын да башҡа саҙаҡаларҙан күтәргән.

Шулай уҡ фитыр саҙаҡаһы ураҙа ваҡытында ебәрелгән етешһеҙлектәрҙе тултырыусы ла. Сөнки бер кем дә тулы ышаныс менән ураҙаны урынына еткереп тотоуы һәм уның ҡабул булыуы тураһында әйтә алмай. Ана шул кәмселектәр, хаталар фитыр саҙаҡа менән юйыла ла инде. Ләкин иң мөһиме, фитыр саҙаҡаһын биреү - ул намаҙ, ураҙа, хаж, зәкәт кеүек ғибәҙәт. Шуға ла фәҡирҙәргә, юлсыларға, башҡа төр мохтаждарға, дини һәм донъяуи уҡыу йорттарында уҡыған талиптарға, уҡыусыларға ярҙам күрһәтеп, был ғибәҙәтте урынына еткереп атҡарып ҡалырға тырышырға кәрәк. Фитыр саҙаҡаһы ирекле, бурысы булмаған һәм мохтаждар исемлегенә инмәгән бар мосолмандарға үәджиб, йәғни фарызға, мотлаҡҡа яҡын. Тормош иптәшенә, балаларға, ейәндәргә бирергә ярамай. Фитыр саҙаҡаһы аша мөьмин ураҙаһын еренә еткерә, ураҙа аша иманын камиллаштыра. Камил иман менән мәңгелек хозурлыҡҡа өлгәшә.

Башҡортостан Республикаһы мосолмандары Диниә назараты биргән фәтүәгә ярашлы, 2014 йылда фитыр саҙаҡаһы нисбәте урта хәлләрҙән түбән булғандар өсөн - 50 һум, урта хәлләргә - 150 һум, хәлләләргә 250 һум тәшкил итә. Фитыр саҙаҡаһы, ураҙа тотоу, тотмауға ҡарамаҫтан, һәр бер ғаилә ағзаһы иҫәбенән түләнә. Ауырып, ауырлы булып, ныҡ ҡартайыу сәбәпле ураҙа тота алмағандарға фидиәнең, йәки ҡотолоу саҙаҡаһының нисбәте көнөнә 150 һум, йәки бер Рамаҙанға 4500 һум. Шулай уҡ Рамаҙан айында тағы бер фарыз ғәмәл - зәкәт үтәлә, бирелә, билдәләнә. Ул, мөфтиәт фәтүәһенә ярашлы, таҙа килеме 120 мең һум булғандан алып бирелә башлай. Килемдең 1/40 өлөшөн, йәки 2,5 процентты тәшкил итә. Әйтелгән сумманан 3000 һум зәкәт түләнә.

**Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзите редакцияһы коллективы ағзалары үҙҙәренең фитыр саҙаҡаһын Өфөлә йәшәүсе Рәйсә Ғәйфуллинаға тапшырҙы. Уның 5 йәшлек ауырыу улына Израилдә ҡатмарлы операция яһаясаҡтар. Башҡаларҙы ла милләттәшебеҙгә ярҙам итергә саҡырабыҙ. Рәйсә Зәфәр ҡыҙының телефоны: 8-917-443-99-75.**

Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ әҙерләне.

БАЛАҢА УҠЫ!

## ЙӘНДЕ ТЕЛГЕЛӘР ҠЫЛЫҠ

Был хәл Рамаҙан айында була. Ифтар алдынан әсәһе Әҙһәмде икмәк алырға тип пекарняға ебәрә. Пекарня алдына оҙон сират теҙелгән була. Ифтар ваҡыты яҡынлаша барған һайын, сиратта тороусы халыҡ сабырһыҙлана бара. Һатыусы ла ҡабалана башлай. Тап ауыҙ асыу ваҡыты еткәндә Әҙһәмдең сираты ла килеп етә. Һатыусы ҡабаланыуҙан уға аҡсаны артығы менән ҡайтарып бирә. Әҙһәм ҡаушап ҡала ҡалыуға, аптырап, бер һатыусыға, бер аҡсаларға ҡарап тора ла, бер ни өндәшмәй, тиҙерәк өйөнә ҡайтып китә.

Өҫтәл артында ултырғанда Әҙһәмдең йөҙө уйсанырак булыуына барыһы ла иғтибар итә. Йоҡларға ятҡанда борсолоуы тағы ла ныҡыраҡ көсәйә. Кемдер уға: "Һин ниңә кеше аҡсаһын алдың?" - тип әйтеп торалыр кеүек тойола. Ул барыһы тураһында ла әсәһенә һөйләргә уйлай ҙа, тыйыла. Әсәһе уны әрләйәсәк һәм оялтасаҡ бит, тип уйлай.

Шулай төнө буйы борғоланып, борсолоп сыға Әҙһәм. Иртән йоҡонан торғас та уны борсолоу ташламағанын аңлай ул. Шул саҡ ҡарашы стенала торған календарға төшә. Уны йыртып алып, Бәйғәмбәрҙең ошо хәҙисен уҡый:

**"Һинең йәнеңде телгеләгән, башҡаларға белдермәскә теләгән нәмә - ул гонаһ була".**

Шунда Әҙһәм йөҙөнөң ҡыҙарып китеүен тоя. Бәйғәмбәр был хәҙисте тап уға төбәп әйткән кеүек була. Ул тап-тура пекарняға юллана һәм ғәфү үтенеп, һатыусыға яңылыш биреп ебәргән аҡсаны кире ҡайтара.

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Тыңлай белеү: кешеләрҙең йөрәктәренә инер өсөн ҡолаҡтарығыҙҙы файҙаланығыҙ

**Дәғүәселәрегеҙ.** Сэм Маркевич ҡасандыр: "Әгәр һеҙ минең менән килешмәйһегеҙ икән, тимәк, мине бөтөнләй тыңламағанһығыҙ", - тигән. Әлбиттә, был шаяртыу, әммә лидер икенсе ойошманы үҙенә дәғүәсе итеп ҡарай икән, ул бөтөн иғтибарын үҙ позицияһын яҡлауға йәки үҙенең дәлилдәрен нығытыуға туплай һәм оппоненттарының эшмәкәрлегенән һабаҡ алырға кәрәклекте онота. Ларри Кинг: "Һәр иртә үҙемдә шулай тип иҫкәртәм: көн дауамында әйткән бер генә һүҙем дә бер нәмәгә лә өйрәтмәйәсәк. Әгәр мин нимәлер өйрәнергә теләһәм, башҡаларҙы тыңларға тейешмен". Лидер булараҡ һеҙ икенсе кешене ҡабатларға тейеш түгелһегеҙ, әммә камиллашыу маҡсатында үҙегеҙгә кәрәк нәмәне алыу өсөн башҡаларҙы тыңлау зарур.

**Остаздарығыҙ.** Бер генә лидер ҙа остаздарһыҙ нимәлер эшләй алырлыҡ кимәлдә алдының ҡарашлы йәки тәжрибәле була алмай. Мәҫәлән, мин үҙемдән тәжрибәлерәк лидерҙарҙан күп нәмәгә өйрәндем. Әгәр һеҙҙең әлегә остазығыҙ юҡ икән, ваҡытығыҙҙы әрәм итмәгеҙ һәм уны тиҙерәк табығыҙ. Кемдеңдер шәхси ярҙамын алыуға өлгәшә алмайһығыҙ икән, был процесты китаптар уҡыуҙан башлағыҙ. Тап китаптар минә тәүге аҙымды һһарға ярҙам итте. Иң мөһиме - ошо процесты ҡуҙғатып ебәреү.

**Уйланырға мәжбүр итеүсе һорауҙар.** Яҡшы тыңлаусылар иҫәбенә инә алаһығыҙмы? Эшмәкәрлегем башында мин был хаҡта хыяллана ла алмай инем. Мине үҙ бурыстарымды үтәү һәм кәрәкле ваҡиғаларҙың тормошҡа ашыуы ныҡыраҡ ҡыҙыҡһындыра ине. Әммә ығы-зығынан арынып, тирә-яғымда нимә барғанына иғтибар итә башлағас, эшмәкәрлегемдең аныҡ фокусы барлыҡҡа килеүен һәм һөҙөмтәлелеге артыуын аңланым.

Ҡасан һуңғы тапҡыр кешеләргә һәм уларҙың һеҙгә нимәлер әйтергә теләгәненә етди иғтибар бүлдегеҙ? Бары тик ҡоро дәлилдәрҙе генә алырға, һүҙәрҙе генә ишетергә тырышмағыҙ, хис-тойғоларға, уларҙың аҫтыртын мәғәнәһенә ҡолаҡ һалығыҙ.

**Өйгә эш.** Тыңлай белеү һәләтегеҙҙе үҫтереү һәм яҡшыртыу өсөн түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:

- Көн тәртибен үҙгәртегеҙ. Артығыҙҙан эйәреүселәрҙе, клиенттарығыҙҙы, дәғүәселәрегеҙҙе һәм остаздарығыҙҙы тыңлау өсөн махсус ваҡыт бүләһегеҙме? Әгәр календарығыҙҙа ошо дүрт төркөм вәкилдәре менән даими осрашыуҙар билдәләнмәгән икән, күрәһең, һеҙ уларға тейешле иғтибар бирәп еткермәйһегеҙ. Был категориялар өсөн көн һайын, аҙна һайын булмаһа ла, айына бер тапҡыр айырым ваҡыт бүлегеҙ.
- Кеше менән уларҙың территорияһында осрашығыҙ. Ихлас тыңлаусы булыу өсөн кеше менән уртаҡ темалар табырға кәрәк. Хеҙмәткәрегеҙ йәки клиентығыҙ менән икенсе тапҡыр осрашҡанда уға 4-5 шәхси һорау биреүгә әҙерләнегеҙ. Алдан уның нимә менән ҡыҙыҡһыныуын асыҡлағыҙ.
- Һүҙ араһынан тыңларға өйрәнегеҙ. Кеше менән аралашҡанда, әлбиттә, әңгәмәнең фактик йөкмәткеһенә иғтибар бирергә онотабыҙ. Ләкин һис ҡасан да уның ниндәй хис-тойғола барғанына күҙ йоморға ярамай. Ҡайһы бер ваҡыт, әгәр һүҙ араһынан уҡырға өйрәнһәгеҙ, ысынбарлыҡта нимә булғанлығы хаҡында күберәкте беләсәкһегеҙ. Яҡын арала ҡолаҡ менән генә түгел, йөрәк менән тыңлау өсөн ваҡыт бүлегеҙ.

Джон МАКСВЕЛЛ.

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# КИСКЕ НАМАҘ НИСЕК АТАЛА?




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**26-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Мөбәрәков. Импровизатор. Әҡрәбә. Уйпат. Такси. Нечаева. Рояль. Палдиски. Йәтсә. Рефлектор. Тайра. Тавасиев. Иле. Рейн. Хат. Карантин. Корректор. Комод. Аспирант. Чукча. Дауа. Һарына. Ғарипов. Хәстәр. Бимаза. Истисҡа. Март. Иҙелбаев. Иғлан. Злобин. Ләғәли. Вазифа. Овал.

**Вертикаль буйынса:** Ишәк. Нәфсехур. Треска. Анкер. Дағa. Егет. Имән. Тайран. Раджа. Исмәғилев. Мәрйә. Ватин. Әхирәт. Әсир. Зина. Улъя. Ихтилал. Оңғо. Катапульта. Саба. Тымпат. Карта. Вандал. Арҡа. Сафари. Рәжәп. Драхма. Инабат. Нәһар. Игәт. Адонис. Вайнах. Тамада.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Июль (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахыргы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (17) дүшәмбе | 3:59 | 4:29 | 5:51 | 14:30 | 21:13 | 22:43 | 0:13 |
| 15 (18) шишәмбе | 4:01 | 4:31 | 5:52 | 14:30 | 21:12 | 22:42 | 0:12 |
| 16 (19) шаршамбы | 4:02 | 4:32 | 5:53 | 14:30 | 21:11 | 22:41 | 0:11 |
| 17 (20) кесе йома | 4:03 | 4:33 | 5:54 | 14:30 | 21:10 | 22:40 | 0:10 |
| 18 (21) йома | 4:05 | 4:35 | 5:55 | 14:30 | 21:08 | 22:38 | 0:08 |
| 19 (22) шәмбе | 4:06 | 4:36 | 5:57 | 14:30 | 21:07 | 22:37 | 0:07 |
| 20 (23) йәкшәмбе | 4:08 | 4:38 | 5:58 | 14:30 | 21:06 | 22:36 | 0:06 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ФОЛЬКЛОР ЭКСПЕДИЦИЯҺЫ - Ишембайҙа

**Республикабыҙҙың төрлө райондарына фольклор йыйыу буйынса экспедициялар йыл һайын ойошторолоп тора. Быйыл Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклористика бүлеге хеҙмәткәрҙәре Ишембай районында эшләне.**

Ишембайға һуңғы тапҡыр фольклор экспедицияһы 1968 йылда эшләй, шуға ла был районға ашҡынып барҙыҡ. Урман-Бишҡаҙаҡ, Ҡарайған, Ҡанаҡай, Әхмәр, Ишәй, Маҡар, Ғүмәр, Үрге Әрмет, Сәлих, Кинйәкәй, Кинйәбулат ауылдарында үҙҙәрендә халыҡ хәтерен һаҡлаусы ихлас кешеләр менән осрашып, ҡыҙыҡлы материалдар яҙып алып ҡайттыҡ. Урман-Бишҡаҙаҡ ауылынан Фәниә Рәшитова, Ҡанаҡайҙан Тамара Абыҙгилдина, Ғүмәрҙән Маһиҡәмәр Исхаҡова, Сәлихтән Рәйхана Байғазина апайҙар, һ.б. халыҡ ижадын яҡшы белеүҙәре менән һоҡландырҙы.

Был төбәктә күпселектә ер-һыу атамаһына бәйле риүәйәттәр, им-том, ырым-ышаныуҙар, һынамыштар, тыйыуҙар, әйтемдәр киңерәк таралған. Һәр ауылда тиерлек им-томдо белгән өшкөрөүсе һәм үҙенсәлекле ысул менән ноҡот һалыусы (таш һалыу, тиҙәр) апай-әбейҙәр бар. Урындағы халыҡ "Ҡарға бутҡаһы", "Кәкүк сәйе", "Ямғыр саҡырыу" йолаларын яҡшы хәтерләй. Ошо ерлектә тыуған йырҙар ҙа яҙып алырға тура килде. Үкенескә күрә, ҡайһы бер жанрҙар бөтөнләй осраманы тиерлек, әкиәттәр, мөнәжәттәр, бәйеттәр, йомаҡтар юҡ кимәлендә.

Фольклор йыйғанда шулай милләттәштәребеҙҙең рухи донъяһы менән танышып, хәлдәрен дә белешеп йөрөнөк. Мәҫәлән, Торатауға бәйле төрлө-төрлө хәтирәләр, риүәйәттәр яҙып алғанда халҡыбыҙ өсөн изге булған ошо тауҙы "Сода"ға сеймал итеп биреү ихтималлығы тураһында ишетеп аптыраныҡ. Борон-борондан Ер кендеге иҫәпләнгән, милләтебеҙҙең ҡомартҡыһы, әүлиәләр ерләнгән изге тауға ҡулын һуҙырға кем баҙнат итер икән? Ғүмәр ауылы халҡы ла үҙҙәренең Бүжә тауҙарына шундай уҡ ҡурҡыныс янауы тураһында әсенеп һөйләне. Унда, баҡтиһәң, әлегә өйрәнелмәгән археологик ҡомартҡылар, боронғо зыярат барлығы, Салауат яуында ҡатнашҡан, ҙур кәүҙәле Аллабирҙе исемле ғәскәр башлығы ерләнгәнлеге билдәле. Тәбиғәтебеҙ ҡомартҡыларын емерергә юл ҡуйырмы икән Хоҙай, тип уйланыла ла ул... Нисек кенә булмаһын, шуға ышанайыҡ.

**Фәнирә ҒАЙСИНА,**
**филология фәндәре кандидаты.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# РАМАҘАН АЙЫ ҒӘМӘЛДӘРЕ

✦ Бер хәҙистә "Кешеләр Рамаҙан айының өҫтөнлөктәрен белһә, улар уның мәңге һуҙылыуын теләр ине", тип әйтелә.

✦ Бер хәҙисе-ҡотдусиҙа: "Әҙәм балаһының ураҙанан башҡа булған бөтә ғәмәлдәре үҙе өсөн, ураҙа ғына Минең хаҡыма тотола. Уның өсөн әжер-сауаптарын да үҙем бирермен", тип әйтелә.

✦ Билдәле ислам ғалимы, имам Ғазали: "Әгәр Аллаһ ҡолон ярата икән, уның әжерен арттырыу өсөн Ул мөьминде изге көндәрҙә яҡшы ғәмәлдәр башҡарыуға йүнәлтә. Әгәр ҡолон яратмаһа, гонаһтары өсөн ҡаты язалау маҡсатында, уны насар эштәр башҡарыуға йүнәлтә. Ә инде Аллаһы Тәғәләнең кешене һөйөү-һөймәүе был кешенең алдағы эштәренән тора", - тигән.

***Аттарҙы кисеүҙә алыштырмайҙар, ә бына ишәктәрҙе алыштырырға мөмкин һәм кәрәк.***

***(Александр Лебель).***



АФАРИН!

# САЛАУАТТЫҢ РУХЫ, ШИҒРИ ҺҮҘЕ...

## сал быуаттар аша елеп ҡайтты

**(Башы 11-се биттә).**

### Фирүзә ташты эҙләп, үҙ асылыбыҙ табылды...

Фәлән ерҙәге фирүзә таш йөҙөккә ҡаш була алмай, тигән башҡорт халыҡ мәҡәлен беләһегеҙҙер, моғайын. Ҡайҙалыр ситтә, береһе лә белмәгән ерҙә табылырға тейеш аҫыл таштан, ул ни тиклем генә затлы булмаһын, йөҙөк ҡашы яһап булмай. Йөҙөктөң һәр элементын оҫта үҙ күҙҙәре менән күреп, самалап ҡарап, яраштырып эшләргә тейеш. "Салауат йыйыны" сиктәрендә үткәрелгән "Йөҙөк ҡашы - Зөләйха" конкурсы иһә, ошо мәҡәлдең тағы бер мәғәнәһенең сағылышын асты кеүек. Береһенән береһе һылыу ҡыҙҙарҙың сәмле ярышын ҡарап, моғайын, күптәр, йөҙөк ҡашы булырҙай фирүзә ташты бына ҡайҙа эҙләргә кәрәк икән, тигән һығымтаға килгәндер.

Быйыл йәмғеһе 14 һылыу ҡатнашҡан конкурстан һуң ҡалған тәьҫораттар, һығымталар менән таныштырғанда, тәү сиратта, ҡыҙҙарҙың милли рухты сағылдырған кейемдәренә туҡталып китке килә. Юҡҡа ғына, ағас күрке - япраҡ, әҙәм күрке - сепрәк, тимәгән бит ата-бабаларыбыҙ. Ысынлап та, Башҡортостандың төрлө районларынан килгән ҡыҙҙарҙың һәр кеме үҙенең ырыу ҡатын-ҡыҙҙарына ғына хас милли кейемдәрҙе кейеп отто ғына. Бер ҡарауға, улар араһында уртаҡлыҡтар күп кеүек, ләкин шул уҡ ваҡытта һәр кем үҙенсәлекле, хатта Юрматы ырыуы менән Ҡатай ырыуы ҡыҙҙарының икеһе лә башҡорт һылыуҙары, тип уйламаҫһың да! Ишембай ҡалаһынан Ынйы Абдуллина сәхнәгә музей ҡомартҡыһы итеп һаҡланған Юрматы ырыуы тархан-бикәһенең костюмын кейеп сыҡты. Башлығы бер бот ауырлыҡта, өҫкө кейеме 20 килограмм тартҡан костюмды ун ете йәшлек ҡыҙға үҙ иңендә күтәреп йөрөү еңел дә булмағандыр. Әммә Ынйы үҙе әйтеүенсә, ошо тархан-бикә кейемен кейеп, унын иңенә төшкән ауырлыҡты самалап ҡарағас ҡына, шул заманда йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙар өлөшөнә төшкән яуаплылыҡтың да ҙурлығын тояһың икән.

БР Мәҙәниәт министрлығы ҡарамағындағы Республика халыҡ ижады үҙәге ойоштороусыларының тырышлығы менән үткәрелгән "Йөҙөк ҡашы - Зөләйха" конкурсы һәр яҡлап та үҙ маҡсатына өлгәште. "Башҡорт һылыуҡайҙарының башҡа төр конкурстары ла ошондай милли рухта үткәрелгәндә күпкә отошлораҡ булыр ине", - тип үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашты жюри ағзаһы, "Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррире Гөлназ Ҡотоева. Ысынлап та, "Йөҙөк ҡашы - Зөләйха" конкурсы күпкә мәртәбәле, юғарыраҡ тойолдо. 16-22 йәш арауығындағы ҡыҙҙар алдына ябай ғына талаптар ҡуйылған: ырыу атрибуттарын, тарихынды, шәжәрәңде белеү, үҙең йәшәгән төбәккә хас этник костюмыңды күрһәтеү, ҡул эштәреңде алып килеү, ҡумыҙ йәки думбырала уйнап, башҡорт халыҡ йырын башҡарыу, башҡорт бейеүен бейеү, Салауат Юлаевтың шиғырҙарын яттан һөйләү. Ләкин ошондай шарттар үҙе үк башҡорт ҡыҙының асылын сағылдырҙы ла ҡуйҙы. Баҡтиһәң, ул асыл ябай ғына - башҡортлоҡ.

"Салауат йыйыны" Республика фольклор байрамы сиктәрендә үткәрелгән "Йөҙөк ҡашы - Зөләйха" конкурсы һөҙөмтәләре буйынса, Гран-прины Стәрлетамаҡ ҡалаһы өсөн сығыш яһаусы Регина Салауатова яуланы. Жюри ағзаһы, филология фәндәре докторы, профессор Мирас Иҙелбаев әйтеүенсә, милли батырыбыҙ Салауат мөхәббәтенә тиң булырға ынтылған ҡыҙҙар араһында еңеүсене билдәләү еңел эш булмаған. Шулай ҙа, һәр жюри ағзаһы үҙендә билдәләгән мәрәйҙәрҙе дөйөмләштереп, ғәҙел һығымта яһалған. Салауат Юлаевтың шиғырҙарын ятлап, бер-береһен ярты һүҙҙән дауам итеп китергә әҙерләнеп килгән ҡыҙҙар конкурсты күҙәткән жюри ағзалары өсөн дә, тамашасыларға ла саялыҡтың, отҡорлоҡтоң, ысын матурлыҡтың өлгөһөн күрһәтә алды, буғай. Йөҙөк ҡашы булырҙай фирүзәләрҙе фәлән ерҙән, сит милләттәр араһынан эҙләгән зимагорҙарҙың уфтанғаны ла ишетелгәндәй булды хатта...

### Тирмәләрҙә ҡалған башҡорт донъяһы...

Сәхрәләргә сыҡҡас, эш барамы инде тирмә ҡормайса. "Салауат йыйыны"на барышында ла башҡорт халҡының көнкүрешен, йәшәйешен сағылдырған тирмәләр менән аралашып киткән урыҫ өйҙәрен ҡунаҡтар килеүгә теҙеп ултыртып та ҡуйғайнылар. Һәр башҡорт тирмәһендә Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов инеп сығыуына махсус әҙерләнгән йолалар уйналды. Тирмәләр араһында үткәрелгән конкурстың баһалама ағзалары ҡарап, тәмтомдарҙан ауыҙ итеп, халыҡ менән туйғансы аралашып сыҡҡас, ҡунаҡсыл хужалар тирмә ауыҙҙарын инергә теләгән һәр кеше өсөн асыҡ ҡалдырҙы. Уларҙың киң күңеллелеге менән файҙаланып, Салауат районының ун өс ауыл Советы ҡорған тирмәләр, урыҫ өйҙәре буйлап экскурсия ойошторҙоҡ.

Әлкә ауыл Советы тирмәһенә күҙ һалырға ингәндә шундай уҡ оло ҡыҙыҡһыныу менән йөрөгән бер апай менән һөйләшеп киттек. Баҡтиһәң, Учалы районынан алыҫ араларҙы яҡынайтып килеп еткән икән ул: "Салауат еренә аяҡ баҫыуыма шул тиклем шатмын. Бөгөнгө байрам йәштәрҙә милли рух, илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләүсе сара, тип иҫәпләйем. Йәштәребеҙ бик матур итеп күңел асты, майҙанда эскән килеш йөрөгән бер кеше күренмәүе һөйөндөрҙө. Ысын мәғәнәһендә милли һабантуй итеп ойошторолған, һәр ерҙә - тәртип. Бөтөн нәмәне отоп алып, ҡолағына киртеп, күҙе менән байҡап, мейеһенә һалып йөрөүсе балалар өсөн бөгөнгө матур байрам ҙур өлгө", - тип тәьҫораттары менән бүлеште Фәриҙә Ситдыҡова. Эйе, фекере менән уртаҡлашҡандарҙың һәр береһе ошоно раҫланы: "Салауат йыйыны рухландырҙы!"

**Ләйсән НАФИҠОВА.**
**Сәриә ҒАРИПОВА.**





АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯМАН ҠАТЫН...

## ирен кеше алдында хур итер

Һауаны - йондоҙ, ирҙе - һаҡал, ҡатын-ҡыҙҙы сәс матурлай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аттарҙы кисеүҙә алыштырмайҙар, ә бына ишәктәрҙе алыштырырға мөмкин һәм кәрәк.

**(Александр Лебель).**

Ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡыйыулыҡты тәжрибә менән аҡылдан да өҫтөн ҡуйыу үҙен аҡлай.

**(Бальтасар Грасиан-и-Моралес).**

Донъяла сәскә атмаған үләндәр ҙә, емеш бирмәгән сәскәләр ҙә була.

**(Конфуций).**

Тау үрендә һыу тормаған кеүек, тәкәббер кешелә аҡыл һәм мәрхәмәт булмай, улар түбән урынды эҙләй.

**(Фарсы мәҡәле).**

Бөтөн йылғалар ҙа диңгеҙгә ҡоя, әммә диңгеҙ бер ҡасан да ярҙарынан ташмай.

**(Екклесиаст).**

Бар нәмә лә уйҙан башлана. Уй менән идара итеп була. Шуға ла үҙ-үҙеңде камиллаштырыуҙа төп бурыс - дөрөҫ уйларға өйрәнеү.

**(Лев Толстой).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике бер туған ағалы-ҡустылы фермерлыҡ эше менән шөғөлләнгән. Туғандарҙың береһе - буйҙаҡ, икенсеһе ғаиләле булған. Һәр кис туғандар эшләп тапҡандарын ҡап уртаға бүлешәләр икән. Бер көн буйҙаҡ булғаны шулай тип уйланы: "Беҙҙең һәр кис эшләп тапҡандарыбыҙҙы уртаға бүлешеү дөрөҫ түгел. Мин өйләнмәгәнмен, ҡарарға ғаиләм һәм балаларым юҡ. Шуға күрә минең ихтыяждарым да ҙур түгел. Ә ҡустымдың ғаиләһе һәм балалары бар". Шулай тип уйлағандан һуң ул һәр кис үҙенең аҙбарынан бер тоҡ бойҙай алып, туғанының аҙбарына бушата башлай.**

**Эшләп тапҡандарын бер тигеҙ бүлешеү ҡустының да уйынан сыҡмай икән. Бер кис ул да үҙенә: "Эшләп тапҡандарыбыҙҙы бер тигеҙ бүлешеү бер ҙә генә дөрөҫ түгел, - ти. - Мин өйләнгәнмен. Киләсәктә мине ҡараясаҡ балаларым бар. Ә ағайымдың киләсәктә ҡарарлыҡ бер кеме лә юҡ." Ул да һәр кис үҙенең аҙбарынан ағаһының аҙбарына бер тоҡ бойҙай бушата башлай.**

**Көндәр шулай үтә тора. Туғандар үҙҙәренең аҙбарҙарындағы бойҙайҙың кәмемәгәнен күреп аптырай, нимә тип уйларға ла белмәй икән. Бер көн шулай бер-береһенең аҙбарҙарына бойҙай бушатҡан саҡта осрашалар. Икеһе лә ваҡиғаның айышына төшөнә. Йөкмәгән бойҙайҙарын ергә ҡуйып, бер-береһе менән ҡосаҡлашалар. Икеһенең дә күҙҙәре йәш тамсыһына сыланған була..."**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 11 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4700
Заказ 2164